ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

30-6 ноябрь - декабрь (ҡырпағай - аҡъюлай) 2019

№48 (882)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Аҡмулла тыуған аҡъюлай**




3

**Әрме хеҙмәте...**

эскелеккә ҡаршы бер сарамы?



6

**Бал ҡорто - ул илһам сығанағы,**



ул матдилыҡтан күпкә юғары һәм аңлы донъя

8-9

**Күкрәүҙәрен тойоп замандың,**

йәки Башҡорт театры тарихын күҙҙән үткәреп



11-13

**ТВ-программа** 14


***Мөхтәрәм йәмәғәт! Арзанға яҙылып ҡалығыҙ!***
***Республикабыҙҙың һәр район-ҡалаһында, иң төпкөл ауылдарҙа ла 2 декабрҙән 12 декабргә тиклем иғлан ителгән ун көнлектә 2020 йылдың беренсе яртыһына ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә ташламалы хаҡҡа - 611 һум 70 тингә яҙыла алаһығыҙ. Был мәғлүмәтте йәнәшәләге дуҫ-иштәрегеҙгә, туғандарығыҙға ла еткерһәгеҙ ине.***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## "Тораҡ биләмәләре эстетикаһы йылы"нда ниндәй эштәр башҡарырға күҙаллайһығыҙ?

***Хәкимйән СӘҒИТОВ, Өфө ҡалаһы, менеджер:*** Башҡортостанда киләһе 2020 йылды "Тораҡ эстетикаһы йылы" тип иғлан итеп, Указға ярашлы, төп иғтибар тротуарҙарға, газондарға, ҡоймаларға, урамдарға яҡтылыҡ үткәреүгә бирелгән икән, тимәк, республикала эстетика кимәле бик түбән, тигән һығымта яһарға ла мөмкин. Әлбиттә, тәү сиратта документта һанап үтелгән объекттар тирәһендә ҡайнар инде төҙөкләндереү эштәре. Әммә ауыл һәм ҡалаларҙың эстетикаһы тураһында һүҙ алып барғанда был эштәрҙең унын үҫешенә йоғонто яһарға тейешлеген иҫтә тотоп планлаштырырға кәрәктер. Төҙөклөктәр шунда йәшәгән халыҡ өсөн генә түгел, ә килгән кешеләр өсөн дә ылыҡтырырлыҡ булырға, уларҙың ошонда йәшәргә ҡалыу теләген йәиһә турист булараҡ, ҡабат килеү теләген тыуҙырырға тейеш.

Теге йәки был биләмәнең эстетикаһын кеше үҙенсә күреү, ишетеү һәм һиҙеү кеүек тойоу ағзалары аша йә ҡабул итә, йә ҡабул итмәй. Бында, әлбиттә, архитектура һәйкәлдәре, иҫтәлекле урындар, ҡаланың рельефы йәки ландшафы төп роль уйнай. Ишетеүгә килгәндә, ул аҙан йәки сиркәү ҡыңғырауы тауышы, башҡа шундай хәтерҙә ҡалырлыҡ тауыш булырға тейеш. Ә инде еҫ тойоу йәһәтенән ҡарағанда, биләмәнең үҙенә генә хас еҫе булырға тейеш. Ул урамдағы сауҙа нөктәләренән сыҡҡан еҫме, башҡамы - мөһим түгел. Иң мөһиме - ул күңелдә уйылып ҡалһын. Мәҫәлән, Өфө өсөн ул йүкә сәскәһе еҫе тиергә мөмкин.

Шулай уҡ ниндәйҙер символдар, арт-объекттар ҙа биләмә эстетикаһын тәшкил итә. Шуға күрә, бындай эштәрҙе башҡарғанда ла уйлап, зауыҡ менән эш итергә кәрәк. Ундай объекттарҙың күплеге генә эстетика тыуҙыра тип әйтеп булмай, улар ысынлап та ҡала халҡында ла, килгән ҡунаҡтарҙа ла зауыҡ тәрбиәләргә тейеш.

***Хажи МОРАТОВ, фермер:*** Йыл иғлан ителде лә ул, әммә әлеге ваҡытта аныҡ ҡына нимә эшләргә кәрәклеге тураһында бер ниндәй күрһәтмә лә юҡ. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ни өсөн йылды тап "Тораҡ биләмәләре эстетикаһы йылы" тиергә ҡарар итеүе тураһында былай тигәйне: "Республика буйлап күп йөрөнөм, шулай уҡ беҙгә килгән мөрәжәғәттәрҙе анализлап, халыҡты нығыраҡ ҡыҙыҡһындырған теманы һайланыҡ. Төҙөкләндереү зарурлығы - тотош төбәккә хас проблема икәнен күрҙем. Бында халыҡтың әүҙемлегенә өмөтләнәм. Граждандар әүҙем булған, йәғни халыҡ үҙе лә ҡатнашҡан урындарҙа тораҡ пункттарын төҙөкләндереү буйынса проекттарҙы бюджеттан финанслау өлөшөн арттырып дәртләндерәсәкбеҙ. Власть менән берлектә эшләп, биләмәләрен төҙөкләндереүҙә үҙ өлөшөн индереп, үҙ ҡулы менән булдырған объекттарға граждандар ҙа һаҡсыл мөнәсәбәттә булыр ине. Бынан тыш, республикала санитар таҙалыҡ булдырырға: төҙөлөш майҙандарынан сүп-сарҙы алырға, емерек ҡоролмалар ултырған территорияларҙы таҙартырға, ҡороған ағастарҙы киҫергә, башҡа бик күп эштәр башҡарырға, ҡыҫҡаһы, тулы таҙалыҡҡа йүнәлеш алырға кәрәк".

**(Дауамы 2-се биттә).**

АФАРИН!

# ҠАҘ ӨМӘЛӘРЕ ЕТТЕ!

**Халҡыбыҙҙа "Йола тотҡан - яҙлыҡмаҫ" тигән бик тапҡыр мәҡәл бар. Йола тотҡандар, тимәк, ата-бабалар нигеҙ һалған көнитмеш ҡағиҙәләренән, милли асылдан, имандан яҙмаҫ, тигәнде аңлатыр был аҡыл. Шөкөр, һуңғы йылдарҙа ошо аҡылды һанлаусылар ишәйә. Беҙ ғәҙәтләнгән бер нисә бөртөк кенә түгел, бик күп башҡа йолалар тергеҙелә. Һәм был эштәрҙең башында ағинәйҙәр тора. Ошо көндәрҙә Стәрлетамаҡ районы Күсәрбай ауылы ағинәйҙәре лә районның башҡа ауылдарындағы һәм Стәрлетамаҡ ҡалаһындағы әхирәт ағинәйҙәрен "Ҡаҙ өмә"һенә саҡырҙы. Тәүҙә сәхнәлә шәхси хужалыҡтарында 60 ҡаҙ аҫраған Рәйлә һәм Фуат Зариповтарҙың ҡаҙҙарын Таңсулпан Байрамғолова етәкселегендәге Төрөшлө ауылы ағинәйҙәре йолҡоп, еренә еткереп эшкәртеп, тамаша ҡылыусыларҙы ла ошо йолаға бәйле уйындар уйнатып, матур сәхнә күренешен күҙ алдына баҫтырҙы. Шунан иһә йырлап-бейеп ҡаҙҙарҙы ағын һыуға йыуырға алып барҙылар. Һеҙ күргән һүрәттә ошо күренеш һынланған.**



12+

***✓ Кеше йәшәмәгән, ташландыҡ йорттар бик күп. Улар кәртә-ҡураһы емерелеп, ауылдың йәмен ебәреп ултыра. Ауыл хакимиәте шундай йорттарҙы йә һүтеү, йә нисектер күрмәлекле ҡиәфәткә килтереү яйын да тапһын ине.***

*ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!*

# ФОЛЬКЛОРҒА...

## тейешле мөнәсәбәт кәрәк

**Билдәле булыуынса, 2020 йылдың йәйендә Өфөлә Бөтә Донъя фольклориадаһы үтәсәк. Ошо донъя кимәлендәге сара алдынан халҡыбыҙҙың быуаттан-быуатҡа күсә, быуындан-быуынға тапшырыла килгән рухи ҡиммәттәре тураһында һөйләшеү бик урынлы һәм кәрәклелер, тип уйлайым.**

XX быуаттың 60-70-се йылдарында билдәле ғалим һәм яҙыусы Кирәй Мәргән етәкселегендә ысын мәғәнәһендә академик статустағы оҙайлы ваҡыт дауам иткән экспедициялар мәлендә башҡорт халыҡ ижадының бай корпусы туплана һәм "Башҡорт халыҡ ижады" баҫмала 18 томда донъя күреп, башҡорт мәҙәниәте һәм ғилеме тарихында әһәмиәтле ваҡиға тигән юғары баһаға лайыҡ була. Бөгөнгө көндә өлкән быуын фольклорсыларының эше дауам итә. Экспедициялар ойошторола, фольклор әҫәрҙәре төрлө форматтағы китаптарҙа донъя күрә, башҡорт халыҡ ижадының күп жанрҙары буйынса фундаменталь хеҙмәттәр яҙыла. Халҡыбыҙҙың рухи тормошонда фольклорҙың әһәмиәте ҙур булыуы бәхәсһеҙ. Халыҡ педагогикаһының нигеҙендә лә фольклор ята. Унда халыҡтың тарихы ла, көнкүреше лә сағылыш таба. Фольклор менән телдең бәйләнеше лә тығыҙ, сөнки халыҡ ижады әҫәрҙәре мотлаҡ туған телдә ижад ителә. Ошо белем сығанағына, халыҡтың алтын аҡылына, баһалап бөткөһөҙ рухи хазинабыҙға мөнәсәбәт тә тейешенсә булһын ине. Үҫеп килгән балалар, йәштәр белһен, аңлаһын, яратһын ине халыҡ ижады ынйыларын. Өлкән быуында был сифаттар бар бит, улар экспедиция мәлдәрендә, изге эш артынан йөрөйһөгөҙ, тип, беҙҙе шатланып оҙатып ҡалалар, рәхмәт әйтәләр. Ғаиләлә, балалар баҡсаһында, мәктәптә ошо йүнәлештә эш алып барылһа, радио, телевидение, гәзит-журналдар ҙа ҡушылһа, халыҡ ижадын популярлаштырыу эшенең үтемле алымдары табылһа, улар эшләһә, моғайын, ыңғай һөҙөмтәләргә ирешеп булыр ине.

Ошо урында ҡапыл 1945 йылда капитуляцияға бирелгән Японияның тарихы иҫкә төштө. Ил бөлә, 30 процент халыҡ үҙен-үҙе үлтерә, 13 процент халыҡ сит илдәргә ҡасып күсеп китә. Яңы һайланған премьер-министр комиссия төҙөп, милләттәштәренән ярҙам һорай. Комиссияла күренекле кинорежиссер Курасава ла була. Комиссия уйларға өс көн биреүен һорай етәксенән. Өс көндән улар үҙҙәренең планы менән премьерға инә. Нимә булған һуң ул планда? Халыҡтың, бигерәк тә йәш быуындың күңелен тәрбиәләү, әҙәбиәтте, сәнғәтте үҫтереү - төп маҡсат итеп күрһәтелгән була унда. Япония мәктәптәрендә донъя классикаһын уҡыта башлайҙар, йыр һәм театр сәнғәтен күтәрәләр, кино төшөрөүгә иғтибарҙы көсәйтәләр. Ил етәкселеге айырыуса киләсәк быуындың күңеленә изгелек орлоҡтары һалыуға, кешеләргә һәм тәбиғәткә яҡшы мөнәсәбәт тәрбиәләүгә күп көс һала. Һөҙөмтәлә Япония 1970 йылдарҙа иҡтисад буйынса алдынғы илдәр рәтенә сыға. Ошо тарихты иҫкә төшөргәс, мин ул планда халыҡ ижадының да күҙ уңында тотолоуына шикләнмәйем. Киләсәк быуынды тәрбиәләүҙә, уларҙы матурлыҡты күрә белергә, изгелекте танырға өйрәтеүҙә фольклор иң һөҙөмтәле алым булып тора.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, халыҡ мәҙәниәтенең был өлкәһе бөгөнгө көндә Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми федераль тикшереүҙәр үҙәге Маҡтау билдәһе орденлы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының бармаҡ менән генә һанарлыҡ профессиональ фольклорсыларының (бөгөнгө көндә тулы штатта эшләгән өс кеше) һәм Республикабыҙҙың мәҙәниәт министрлығына ҡараған Республика халыҡ ижады үҙәге хеҙмәткәрҙәренең тырышлығы арҡаһында ғына эшләп килә. Фольклориада алдынан хөкүмәтебеҙ, республикабыҙҙың Фәндәр академияһы фольклор һәм фольклористика проблемаларына иғтибар итһә ине, тигән фекерҙе еткерергә генә теләгәйнем.

**Гөлнур ХӨСӘЙЕНОВА,**
**филология фәндәре докторы, профессор.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

# "Тораҡ биләмәләре эстетикаһы йылы"нда ниндәй эштәр башҡарырға күҙаллайһығыҙ?

**(Башы 1-се биттә).**

Әлбиттә, ниәттәр изге. Әммә әлеге ваҡытта ла төрлө программаларға ярашлы шул уҡ эштәр башҡарыла. Мәҫәлән, урындағы инициативаларҙы хуплау программаһына ярашлы, нимәлер эшләргә йәки төҙөргә кәрәк булһа, конкурста ҡатнашып, аҡса алырға мөмкин, әммә дөйөм сумманың күпмелер өлөшөн ошо биләмә халҡы үҙе йыйырға тейеш. Бер яҡтан, был бик уңайлы, сөнки ҙур объекттарға, тулайым төҙөкләндереү эшенә биләмә халҡының ғына көсө етмәүе лә бар, ә инде ярҙам булғанда, ышаныс менән тотонорға мөмкин, тип уйлайым. Шуға күрә, әлегәсә башҡарылған эштәрҙе бер программа аҫтына тыҡмайынса, тораҡ пункттарының йөҙөн яңыртыу, уларға яңы һулыш өрөүгә тағы ла өҫтәмә рәүештә ярҙам булһын өсөн яңы программа булдырылыуына өмөт итәм.

***Ришат НАСИБУЛЛИН, пенсионер:*** Элек-электән ауылдарҙа һәр кем үҙенең ихата алдын да, йортон да даими ҡарап, тәрбиәләп, ауыл Советы менән берлектә тыҡрыҡтарҙы, урамдарҙы хәстәрләп, бик булмаһа, халыҡты өмәгә йыйып, бына тигән итеп таҙартып, кәрәк урында кәртәләп, йығылып ятҡан ҡоймаларҙы яңыртып, тәртип булдыра ине. Хәҙер тораҡ биләмәләрендә тәртип булмауы, тәү сиратта, эш булмауға, ауылдарҙың ҡартайыуына бәйлелер, тип уйлайым.

Ҡасандыр гөрләп торған, әле күпселектә пенсионерҙар, бары тик мәктәп уҡытыусылары ла, клуб, фельдшер-акушер пункты, почта хеҙмәткәрҙәре генә тороп ҡалған ауылдарҙа был программаны тормошҡа ашырыу еңел булмаҫ, моғайын. Сөнки бөгөн ниндәй генә программа йәки проектты тормошҡа ашырырға булһа ла, уның күпмелер өлөшөнә халыҡ үҙе аҡса йыйырға тейеш. Йыйылмаһа, тимәк, проект үтмәй ҡала. Әлбиттә, эш урындары булып, үҙенән артҡан аҡсаны сығарып биреү мөмкинлегенә эйә халыҡ йәшәгән урындарҙа быларҙы эшләү еңел буласаҡ, ә аҡса йыйырға хәленән килмәгән ауылдар нимә эшләр икән? Былай ҙа бит элекке йола буйынса бөтөн нәмәне өмә ойоштороп, үҙҙәрендә булмағанын булдырып, үҙҙәренсә төҙөкләндереп, бер-береһенә ярҙам итеп йәшәргә тырышҡан булалар. Хәҙер кәртәләнмәгән, кәртәһе яңыртылмаған зыяраттар ҡалмағандыр ҙа инде. Был йәһәттән халыҡ мәңгелек йортобоҙ буласаҡ урынды һәр саҡ тәртиптә тоторға тырыша.

Әммә бына ҡаланан алыҫ урынлашҡан, эргә-тирәлә шифаханалар йәки туризм объекттары булмаған ауылдарҙы алып ҡараһаҡ, уларҙың барыһында ла кеше йәшәмәгән, ташландыҡ йорттар бик күп. Улар кәртә-ҡураһы емерелеп, ауылдың йәмен ебәреп ултыра. Ауыл хакимиәте ошо программаны тормошҡа ашырғанда шундай йорттарҙың иҫәбен алып, хужалары бармы-юҡмы икәнен асыҡлап, йә һүтеү, йә нисектер күрмәлекле ҡиәфәткә килтереү яйын да тапһын ине. Юлдар мәсьәләһе лә бик ҡырҡыу тора. Бигерәк тә төпкөл башҡорт ауылдары яғына бороловы менән асфальт бөтә, артабан һикәлтәле километрҙар башлана. Ошо хаҡта ла уйларға, уларҙы ремонтлауҙы юлларға кәрәк. Производство булмаған, күпселекте пенсионерҙар тәшкил иткән ауылдар ҙа бюджет иҫәбенә төҙөкләндерелер, бер ыңғай клубтар яңыртылыр, бәлки, спорт майҙансыҡтары булдырылыр, моғайын, тип күҙаллайым.

**Шәрифә САЛАУАТОВА**
**яҙып алды.**

*БАШ ҠАЛАМ*



# ЙӘМЕ БУЛЫР ИНЕ...

**Бөгөн бөтөн донъяла заманса үҫеш менән бер рәттән тарихҡа, боронғолоҡҡа ҙур иғтибар бүленә. Ниндәй генә баш ҡаланы йәки башҡа ҙур мегаполисты алып ҡарама, уларҙа мотлаҡ тарихи үҙәк - бынан бер нисә быуат элек төҙөлгәненән алып быуат башында һалынған йорттар, биналар архитектура ансамблен тәшкил итеп, туристарҙы ылыҡтырған бер утрау булып тора.**

Сит илдәрҙә хатта был квадратта йәһүдтәрҙең, сиғандарҙың, башҡа милләттәрҙең үҙ кварталы бар. Йәғни ҡасандыр улар ошо урында берләшеп йәшәгән, үҙҙәренең тарихын, мәҙәниәтен, ғөрөф-ғәҙәттәрен ошо "утрауҙа" һаҡлаған.

Башҡортостанда, Мәҙәни мираҫ объекттарын дәүләт һаҡлауы буйынса идаралыҡ мәғлүмәттәренән күренеүенсә, Өфө территорияһында урынлашҡан архитектура һәйкәлдәренең 60 проценты реставрацияға мохтаж. Был исемлектә ярайһы уҡ һаҡланып ҡалған, әлеге ваҡытта торлаҡ йорт итеп файҙаланылған биналар ҙа күптән инде авария торошонда булған һәм бөтөнләй юҡҡа сығыу алдында торған йорттар ҙа бар. Ошондай ташландыҡ ҡомартҡылар рәтенә Вахмянин мунсалары, Веденеев йорто, Бухартовскийҙарҙың ҡала усадьбаһы, Судаковтарҙың усадьба йорттары, Кузякиндар усадьбаһы, Тихониндар йорто, "Боронғо йолалар йорто", Першиндар усадьбаһы ансамбле һәм башҡа объекттар инә.

Әле яңыраҡ ҡына Яңы күпер урамындағы бер архитектура ҡомартҡыһын - Дашковтар йортон шунда элиталы йорттар төҙөүсе ойошма ҡамасаулап торған өсөн һүтеп ырғытҡан тигән хәбәр таралды. Улар хатта бинаны икенсе урынға күсереп һалыу тураһындағы тәҡдимгә лә күҙ йомған. Әле тикшереү эштәре бара. Әгәр төҙөлөш ойошмаһына был ҡылығы өсөн бер ниндәй ҙә яза бирелмәһә, башҡалар ҙа был насар өлгөгә эйәреп, "ҡамасаулап" ултырған тарихи объекттарҙы юҡҡа сығара башлауы ихтимал...

**Сәлимә ХӘЙҘӘРОВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Рәсәй Федерацияһы хөкүмәте ҡарамағындағы Финанс университеты рейтингына ярашлы, Өфө йәшәү сифаты буйынса тәүге ун ҡала иҫәбенә инде. Анализ үткәргәндә Өфө халҡы юлдарҙы хеҙмәтләндереү һәм йүнәтеү, йәмәғәт транспорты һәм юл полицияһы менән шөғөлләнгәндәрҙең эшенә, мәғарифтың һәм мәҙәни инфраструктураның үҫешенә, торлаҡ фондының торошона һәм ҡаланы төҙөкләндереүгә ыңғай баһа биргән. Урындағы властарҙың эше, медицина хеҙмәтләндереүенең сифаты һәм ҡалалағы хәлгә дөйөм баһа ла иғтибарҙан ситтә ҡалмаған.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың Указы менән министрҙарға командировкаға сығыу өсөн республика хөкүмәте премьер-министрының беренсе урынбаҫарҙарынан рөхсәт алырға ҡуштылар. Был вазифаларҙы Андрей Назаров һәм Илшат Тажетдинов биләй. Быға тиклем командировкалар тураһында профилле вице-премьерҙар менән кәңәшләшергә кәрәк ине. 18 ноябрҙәге оператив кәңәшмәлә Радий Хәбиров "чиновниктар туризмын бөтөрөргә ваҡыт" тип белдерҙе һәм министрҙарға сәфәр йомғаҡтары хаҡында отчет бирергә ҡушты.

✓Ирек Сәғитов Башҡортостан хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары итеп, Айбулат Хажин Башҡортостандың мәғариф һәм фән министры итеп тәғәйенләнде. Уларҙың тәғәйенләнеүе тураһындағы указға республика Башлығы Радий Хәбиров ҡул ҡуйҙы.

✓Ағымдағы йылдың 10 декабренә тиклем Башҡортостандың барлыҡ муниципалитеттарында Яңы йыл шыршылары ҡуйыла. Республикала 1099 боҙ ҡаласығы төҙөү күҙаллана. Шулай уҡ 566 һырғалаҡ һәм 1266 боҙ тауы була. Республика ҡалаларын һәм райондарын 1782 шыршы биҙәй. Республикала 1634 - "тере", 139 - яһалма һәм 9 пиксель шыршы ҡуйыла. Һуңғылары - ошо йылдың яңылығы. Иң бейек - 32 метрлыҡ пиксель шыршыны Өфөлә "Торатау" конгресс-холы янында күрергә мөмкин.

✓Өфөнөң Совет майҙанына Яңы йыл шыршыһы ҡуйҙылар. Биш йылдан ашыу был майҙанда Яңы йыл шыршыһы ҡуйылғаны юҡ ине. Оҙаҡ майҙанды - ҡаланың төп шыршыһы, аҙаҡ Киров районының төп шыршыһы биҙәне. Һуңғы ваҡытта майҙан ҙур парковка булып хеҙмәт итте. Ләкин быйыл бындағы ҙур реконструкция эштәре алдынан йоланы тергеҙергә хәл итеглде.

БЫЛ АЙҘА...

# АҠМУЛЛА ТЫУҒАН АҠЪЮЛАЙ

**Йыл ахыры акъюлай яҡынлашҡан һайын, ҡыш һулышы нығыраҡ һиҙелә. Быйыл иһә ҡырпагайҙың да яртыһын ҡарһыҙ ғына үткәреп ебәрҙек; йыл һайын рашҡылы йонсоу көндәре менән теңкәгә тейә торған көҙ был юлы һис ҡасан булмағанса ҡоро, айҙ һәм йылы көндәре менән һөйөндөрҙө.**




Тик быңдай күренештең әҙемтәһен ер кешеһе - игенсе генә аңлайҙыр, сөнки тап ошо осорҙа тупраҡ ҡышҡы һалҡындарҙы дымға туйынып ҡаршыларға тейеш бит. Уның ҡарауы, алдан күҙаллауҙар буйынса ҡыштың да гәҙәттәгенән йылыраҡ һәм яуым-төшөмгә мул булыуы көтөлә, тиҙәр. 22 декабрь астрономдар иҫәбе буйынса Ҡояштың үҙәге күк йөҙө экваторының иң алыҫ нөктәһенә күскән мәле була һәм был ваҡыт Ҡояш офоҡ һыҙығына иң яҡын арала торасаҡ. Ҡояш торошо ваҡытында иң ҡыҫҡа көн һәм иң оҙон төн күҙәтелә. Ҡыштың тәүге көнө айы булыуға ҡарамаҫтан, "ҡыш бауыры оҙон" тигән һынамыш йәшәп килһә лә 22 декабрҙән көндәр яҙға табан ауыша башлай, тип иҫәпләнә.

Аҡъюлайҙың да үҙенә генә хас иҫтәлекле һәм тарихи көндәре байтаҡ. Шулар араһында төрлө кимәлдәге мәғариф учреждениелары, йәмәғәт ойошмалары, киң мәғлүмәт саралары тарафынан дәррәү күтәреп алынған һәм популярлыҡ яулап өлгөргән Башҡорт теле көнө (**14**) хаҡында айырым әйтеп китеү фарыздыр. Ошо уҡ айҙа билдәләнеүсе Рәсәй Федерацияһы һәм Башҡортостан Республикаһы Конституциялары (12.12.1993; 24.12. 1993) һәр граждандың үҙ туған телендә иркен һөйләшергә, аралашырға, уны өйрәнергә, тәрбиә эшендә файҙаланырға, ошо телдә уҡырға, ижад итергә киң мөмкинлектәр бирә. Әйткәндәй, үткән ай башында, 5 ноябрҙә генә, Кремль залында Рус теле буйынса РФ Президенты В. Путин ҡарамағындағы Совет ултырышы булып үткәйне. Унда рус телен үҫтереү, һаҡлау һәм уға ярҙам итеү өлкәһендә дәүләт сәйәсәтен камиллаштырыу мәсьәләләре ҡаралды. В. Путин, көн тәртибенә ҡуйылған мәсьәләнең мөһимлеген һыҙыҡ өҫтөнә алып, "Беҙгә рус телен һаҡлау, үҫтереү һәм таратыу буйынса ифрат ҙур яуаплылыҡ йөкмәтелә, бигерәк тә бөгөн, донъя кимәлендә рус теле киңлектәрен аҙәпһеҙ һәм тупаҫ рәүештә сикләргә, ҡыҫырыҡларға маташыуҙар күҙәтелгәндә", - тип юҡҡа ғына белдермәне. Урыҫ теленең дә дошмандары етерлек һәм улар бер русофобтар ғына түгел, әошо йүнәлештә маҡсатлы рәүештә, әүҙем эшләүсе агрессив милләтселәр, тип билдәләне Президент.

Оло йортто ни борсоһа, кесеһендә лә - шул, тип әйткә килә шуға ла билдәле әйтемде үҙгәртә биреп. Рус теле менән бер ҡатар Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булған башҡорт теленә лә бик күп һынауҙар киҫерергә тура килә бөгөн. "Башҡорт тарихы, мәҙәниәте һәм теленә ҡарата ата-әсәләрҙә һәм уҡытыусыларҙа аҙәпле һәм һаҡсыл мөнәсәбәт булдырырға тырышыу урынына Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булған башҡорт теленең абруйын ҡаҡшатыусы аҙым эшләнде", - тип билдәләнгәйне РФ Кеше хоҡуҡтары буйынса Президент ҡарамағындағы Советтың күсмә ултырышындағы (Өфө, 25-28 март, 2019 йыл) документында. Һөҙөмтәлә Совет Башҡортостан Хөкүмәтенә республика халҡы араһында башҡорт телен популярлаштырыу буйынса программа эшләргә тәҡдим итте. Ул республикала башҡорт теленә эйә халыҡ өлөшөн арттырыу, ике теллелекте тотороҡло һаҡлау йүнәлешендә эшләргә тейеш, тип ҡарала. Был документта шулай уҡ БР Мәғариф министрлығына элек башҡорт теле уҡытылған мәғариф учреждениеларында уны уҡытыуҙы ҡайтанан тергеҙергә, туған тел дәрестәрен үҙ белдеклелек менән факультатив сәғәттәргә күсермәҫкә, башҡорт теле предметы сәғәттәрен ҡыҫҡартмаҫҡа тигән бурыс йөкмәтелде. Билдәле ғалим, иҡтисад һәм философия фәндәре докторы, Башҡортостандың атҡаҙанған иҡтисадсыһы Хәлил Барлыбаев тап ошо хаҡта күптән түгелге үҙенең интернет-сәхифәһендә "Талаш алмаһы түгел, ә республиканы нығытыу сараһы: нисек итеп башҡорт телен һаҡларға?" тигән мәҡәләһе менән сығыш яһағайны. Автор менән килешмәү мөмкин түгел: әсә телен һанламауҙа башҡорттар үҙҙәре лә, шул уҡ ваҡытта дәүләт мәғариф системаһы ла, тел сәйәсәте һәм йәмғиәткә идара принциптары ла берҙәй уҡ гәйепле.

Үкенескә, ашаған табағына төкөрөүсе хөсөтсөләр һис тынсый алмай. Яңыраҡ ҡына туған тел уҡытыусыларының Мәскәүҙә булып үткән Бөтә Рәсәй мастер-класс финалына "саҡырылмаған ҡунаҡ" сифатында әрһеҙләшеп барып, республика йөҙөн таплап ҡайтырға эшкингән шулай уҡ Өфөнөң 69-сы мәктәбенең тарих уҡытыусыһы исемен йөрөтөүсе Лариса Удинцева тигән бәрәү. Башҡорт телен генә түгел, ә үҙе йәшәп-эшләп, тамаҡ туйҙырған (ә, бәлки, ошонда уҡ тыуғандыр ҙа?) ере - Башҡортостандың тарихын да, мәҙәниәтен дә, әҙәбиәтен дә белергә теләмәүе, уҡыусыларға ла уның кәрәк түгеллеге тураһында зарланып ҡайтҡан, тиҙәр. Хәйер, быңдай айырым хөсөтсөләр сөңкөлдәүенә иғтибар итеп тороу кәрәкме икән? Эт өрә торор, тәгәрмәс алға тәгәрәй бирер. Тимәк, мәсьәләгә уяуыраҡ, объективыраҡ ҡарарға ла сәбәптәр бар. Ә шулай ҙа барыбер һуңғы осор йәмғиәтселектә туған тарих, мәҙәниәт һәм тел мәсьәләләренә ҡарата күңел имшеүе, ҡыҙыҡһыныу оскондарын шәйләмәү ҙә мөмкин түгел. "БР дәүләт телдәрен һәм БР халыҡтары телдәрен үҫтереү буйынса саралар тураһында" указға ҡул ҡуйылып, тап ошо көн мәшһүр мәғрифәтсе, шағир Мифтахетдин Аҡмулланың тыуған көнө айҡанлы Башҡорт теле көнө тип иғлан ителгәндән һуң әллә ни күп ваҡыт үтмәһә лә туған телебеҙҙә аралашыу, уны популярлаштырыу буйынса байтаҡ матур башланғыстарға нигеҙ һалынып өлгөрҙө: башҡорт теле, тарихы, мәҙәниәтен һаҡлауға йүнәлтелгән проекттарға республика Башлығы гранттары, башҡорт теленән халыҡ-ара диктанттар, һәр төрлө конкурстар, башҡорт телен компьютер технологияларына индереү буйынса комплекслы программалар төҙөү һәм башҡа бик күп шундай саралар, һис һүҙһеҙ, башҡорт теленә ҡыҙыҡһыныуҙы арттырыр, үҙ асылы - әсә теле мөхитенә ҡайтып, уның ҡәҙеренә төшөнөүселәр һаны тағы ла күберәк булыр, тип өмөтләндерә.

Аҡъюлайҙа Бөтөн Рәсәй хоккей көнө, Бөтөн донъя СПИД менән көрәш (**1**), Билдәһеҙ һалдат, Юрист, Халыҡ-ара инвалидтар көндәре (**3**), Информатика (**4**), Халыҡ-ара ирекмәндәр (**5**), Бөтөн донъя балалар телевидениеһы һәм радиоһы, Рәссам көндәре (**8**), Ватан Геройҙары, Халыҡ-ара коррупция менән көрәш (**9**), Кеше хоҡуҡтары, Бөтөн донъя футбол көндәре (**10**), Халыҡ-ара тауҙар көнө (**11**), Халыҡ-ара сәй (**15**), ЗАГС органдары хеҙмәткәрҙәре (**18**), Халыҡ-ара фәҡирҙәргә ярҙам көнө (**19**), Кешеләрҙең халыҡ-ара теләктәшлек көнө (**21**), РФ ҡотҡарыусыһы (**27**), Халыҡ-ара кино (**28**) көндәре билдәләнәсәк.

**Аҡъюлайҙа тыуғандар:**

**8 -** Рәсәй Федерацияһы Геройы **Мансур Рафиҡовка** ( сығышы менән Күгәрсен районынан) **- 55 йәш** (1964).

**15 -** йырсы, БАССР-ҙың халыҡ артисы **Ғүмәр Әбделмәновка - 90 йәш** (1929).

**30 -** ҡурайсы, педагог, РСФСР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы, БАССР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Йомабай Иҫәнбаев, Ишмулла Дилмөхәмәтов исемдәрендәге, шулай уҡ Бөтә Рәсәй конкурстары лауреаты **Мөхәмәт Түләбаевка - 75 йәш** (1944).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙә хәбәр итеүенсә, "ҡумта"ларҙы ҡышҡа әҙерләү ваҡыты тамамланды. Улар бөтәһе 231, һырғалаҡтар, футбол һәм уйын майҙансыҡтары менән бергә - 499. Өфөлә барлығы 84 "ҡумта" һәм 19 боҙ һырғалағы әҙер. Башҡортостан етәксеһе һүҙҙәренсә, шулай уҡ республикала яңы "ҡумта"лар төҙөү һәм иҫкеләрен тергеҙеү дауам итәсәк. Тиҙҙән Өфөнөң Затон биҫтәһендә, "Тулҡын" скверында яңы майҙансыҡ асыла.

✔18 һәм 19 ноябрҙә Башҡортостан менән Силәбе өлкәһе сигендә ике ер тетрәү теркәлгән. Ҡаҙағстан сейсмик станцияһы хәбәр итеүенсә, тәүгеһе Силәбе өлкәһенең Ҡыҙыл районында - Сибайҙан 18 саҡрым алыҫлыкта булған. Ул саҡта магнитуда 2.2 бәрәмек тәшкил иткән. Икенсе осраҡты сейсмологтар 19 ноябрҙә ҡарай төндә теркәгән. 2.5 магнитудалы ер тетрәү Силәбе өлкәһе Уй районының Кочнево ауылы янында (Башҡортостандың Туңғатар ауылынан алыҫ түгел) күҙәтелгән.

✔Өфөлә Көнсығыш сығыу юлында төҙөлөш-монтаж эштәре 2020 йылдың 20 ғинуарында башлана, тип хәбәр итте хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә Башҡортостандың Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитеты етәксеһе Тимур Мөхәмәтйәнов. Көнсығыш сығыу юлы төҙөлөшөн 2023 йылда тамамлау күҙаллана.

✔Башҡортостанда йәшәүселәр ылыҫлы ағастарҙы рөхсәтһеҙ ҡырҡыу тураһында 8 (347) 218-14-14 телефоны буйынса Урман хужалығы министрлығының диспетчер хеҙмәтенә хәбәр итә ала. Зыян өсөн административ һәм енәйәт яуаплылығы ҡаралған: граждандарға - 3-4 мең, вазифалы кешеләргә - 20-40 мең, юридик берәмектәргә 200-300 мең һум административ штраф янай. Штрафтан тыш, браконьер урман фондына килтергән зыянды ла ҡапларға йә енәйәт яуаплылығына тарттырылырға тейеш.

✔24 ноябрҙән 31 ғинуарға тиклем Өфөлә "Торатау" конгресс-холы алдындағы һәм Совет майҙанындағы парковкалар ваҡытлыса ябыла. Был яңы йыл сараларына әҙерләнеү һәм уларҙы уҙғарыу менән бәйле, тип хәбәр иттеләр ҡала хакимиәтенән. Автомобиль хужаларын хәлде аңлап ҡабул итеүҙәрен һорайҙар.

✓ *Йәмәғәт тәртибен һаҡлауҙа, кешеләрҙе ҡотҡарғанда, ғүмер өсөн хәүефле шарттарҙа хәрби, граждандыҡ, хеҙмәт бурысын үтәгәндә батырлыҡ күрһәткәндәрҙе Шайморатов ордены менән бүләкләргә тәҡдим ителә.*



ҺОРАУ - ЯУАП



# ПЕНСИЯ ХӘЛЕ НИ ХӘЛ?

**? Киләһе йылдан пенсияларҙы индексациялау һаҡланасаҡмы һәм ул ниндәй тәртиптә үткәреләсәк?**

Быйыл Рәсәй Федерацияһының пенсия тураһында закон нигеҙҙәре етди үҙгәрештәргә дусар булды: пенсия йәшен арттырыу башланды, социаль өҫтәмәләр тәғәйенләүҙә үҙгәрештәр булдырылды, страховкалы пенсияны индексациялауҙа яңылыҡтар бар. Әгәр элек страховкалы пенсиялар үткән йылғы инфляция кимәлендә ағымдағы йылдың 1 февраленән индексацияланһа, 2019 йылдан был тәртип үҙгәртелде. Хәҙер индексациялау 1 ғинуарҙан, йәғни страховкалы пенсия хаҡындағы законда ҡаралғандан бер ай элек үткәреләсәк. Шул уҡ ваҡытта пенсиялар инфляция кимәленән юғарыраҡ буласаҡ. 2018 йылда инфляция 4,3 процент тәшкил итһә, 2019 йылдың ғинуарынан 31 млн эшләмәүсе пенсионерға түләүҙәр 7,05 процентҡа арттырылды. Быйыл иһә инфляция 4 процент самаһы булыр, тип күҙаллана, 2020 йылдың ғинуарынан страховкалы пенсиялар 6,6 процентҡа арттырыласаҡ. Һөҙөмтәлә эшләмәүсе пенсионерҙарҙың йәш буйынса страховкалы пенсиялары 15,4-тән 16,4 меңгә артасаҡ. Яҡын йылдарҙа страховкалы пенсиялар күләмен айына уртаса 1 мең һумға арттыра барыу дауам итәсәк: йәғни йылына 12 мең тәшкил итә һәм һөҙөмтәлә 2024 йылға уртаса пенсия кимәле 20 меңдән юғарыраҡ булыр, тип көтөлә. Ләкин был уртаса һандар. Пенсияға өҫтәмә һәр пенсионер өсөн төрлөсә буласаҡ. 2020 йылдың 1 ғинуарынан пенсияғыҙҙың күпмегә артасағын белергә телһәгеҙ, уның әлеге күләмен 0,066-ға (66 процент) ҡабатлағыҙ.

Дәүләт тәьминәте буйынса, шулай уҡ социаль пенсиялар апрелдә индексациялана. Быйыл улар 2 процентҡа арттырылһа, 2020 йылдың 1 апреленән 7 процентҡа артасаҡ. Һөҙөмтәлә социаль пенсияның уртаса кимәле 9,7-нән 10,3 меңгә еткереләсәк. Был иһә пенсионерҙың минималь йәшәү кимәленән 5 процентҡа юғарыраҡ. Пенсия кимәлен арттырыу эшләмәгән, шулай уҡ эшләп йөрөүсе пенсионерҙарға ла ҡағыласаҡ.

**? Социаль өҫтәмә күләме үҙгәрәме?**

Быйыл эшләмәгән хаҡлы ялдағыларҙың пенсияһын йәшәү минимумына еткерерлек кимәлдә социаль өҫтәмәләр менән тәьмин итеү тәртибе лә үҙгәрҙе. Хәҙер пенсионерҙың килеме өҫтәмә түләүҙәр менән минимум кимәленә еткерелә һәм шунан ғына был кимәлдән юғарыраҡҡа индексациялана. 2019 йылдың май - июнь айҙарында законға үҙгәрештәр индерелгәс, 4,4 млн самаһы кешегә социаль өҫтәмәләр күләме иҫәпләнде һәм уларҙың уртаса 523 һумға артыуы асыҡланды. Киләһе йыл был өлкәлә ниҙәр буласаҡ? Иң мөһиме - пенсияларҙы һәм башҡа өҫтәмәләрҙе (мәҫәлән, бер тапҡыр түләнеүсе өҫтәмәләр) минимумдан юғарыраҡҡа индексациялау һаҡланасаҡ. Бынан тыш, 2019 йылдың июлендә РФ субъекттарында пенсионерҙың йәшәү минимумын билдәләүҙең бөтөн ил буйынса берҙәм тәртибе булдырылды. Был теге йәки был төбәктә минимум дәүмәлен нигеҙһеҙ рәүештә үҙгәртеүҙәргә мөмкинлек бирмәйәсәк.

**(Дауамы бар).**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЭСКЕҺЕҘ ҠАРШЫЛА!

**Башҡортостан етәксеһе Радий Хәбиров "Һаулыҡ һаҡлау сәғәте"нең күсмә кәңәшмәһендә Яңы йыл байрамдарында республикала алкоголь һатыуҙы сикләү тәҡдиме тураһында иҫкә төшөрҙө. Әлеге ваҡытта закон проекты республика Дәүләт Йыйылышында ҡарала.**

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, проектҡа ярашлы, 3 ғинуарҙа хәмер һатыу бөтөнләй тыйыла, ә 4-6 ғинуарҙа урындағы ваҡыт буйынса иртәнге сәғәт 10-дан көндөҙгө 2-гә тиклем генә һатыла."Беҙ аңлы рәүештә ошо сараларға барабыҙ, йәмғиәттә, шул иҫәптән медицина берләшмәһендә беҙҙе хуплаҙар, тип ышанабыҙ. Ә ҡатын-ҡыҙҙар, һис шикһеҙ, хуплар. Әлбиттә, ошо ҡарар өсөн беҙҙе тәнҡитләүселәр ҙә табылыр. Хәмер һатыуҙы сикләп, беҙ республикала йәшәүселәргә был көндәрҙе ғаилә менән бергә үткәрергә тәҡдим итәбеҙ. Башҡортостанда төрлө кимәлдәге саралар ойошторолор. Балалар ҙа, өлкәндәр ҙә байрамдарҙы бергә үткәрә алһын өсөн ғаилә уйындары уҙғарылыр. Әлбиттә, хоҡуҡ һаҡлау структуралары ялған алкоголь һатырға маташҡан бутлегерҙарға ла һөнәр иғлан итер", - тине Радий Хәбиров.

# ЯҢЫ ОРДЕНДАР

**Башҡортостанда генерал Шайморатов һәм Григорий Аксаков ордендары булдырыла. Республика Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары килһе пленар ултырышта тейешле закон проектын ҡарарға йыйына.**

Республика парламенты спикеры Константин Толкачев һүҙҙәренсә, йәмәғәт тәртибен һаҡлауҙа, кешеләрҙе ҡотҡарғанда, ғүмер өсөн хәүефле шарттарҙа хәрби, граждандыҡ, хеҙмәт бурысын үтәгәндә батырлыҡ күрһәткәндәрҙе легендар генерал иҫтәлегенә Шайморатов ордены менән бүләкләргә тәҡдим ителә. "Григорий Аксаков ордены - емешле дәүләт, йәмәғәт һәм хәйриә эшмәкәрлеге өсөн тәғәйенләнгән. Беренсе Өфө губернаторы Григорий Аксаков тап шундай аҡыллы дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре булып мәңгелеккә беҙҙең төйәктең тарихына инеп ҡалған", - тине Дәүләт Йыйылышы рәйесе. Шулай уҡ закон проекты менән һөнәри оҫталыҡ, күп йыллыҡ намыҫлы хеҙмәт, юғары хеҙмәт ҡаҙаныштары өсөн "Хеҙмәт батырлығы өсөн" миҙалын булдырыу күҙаллана. Награда әлеге ваҡыттағы "Башҡортостан Республикаһында фиҙаҡәр хеҙмәт" билдәһен алмаштырырға тейеш. Бынан тыш, тағы өс маҡтаулы исем барлыҡҡа килә: "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған ҡотҡарыусыһы", "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған эшҡыуары", "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған IT-индустрия хеҙмәткәре". Закон проектында шулай уҡ "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған нефть һәм газ сәнәғәте хеҙмәткәре" тигән маҡтаулы исем булдырыу ҡаралған. Ул әлеге "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған нефтсеһе" исемен алмаштыра.

# ЯҢЫ ЙЫЛ САРАЛАРЫ

**Башҡортостанда яңы йыл календары-2020 төҙөлгән. Райондарҙың һәм ҡалаларҙың бөтә яңы йыл саралары бер урынға тупланған. Ул "Башҡортостандың мәҙәни донъяһы" порталында баҫылған.**

Республика Хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары Фәнүр Йәғәфәров хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә 20 декабрҙә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында республика Яңы йыл шыршыһы ойоштороласы хаҡында һөйләне. 25 декабрҙә Дәүләт Кремль һарайындағы дөйөм Рәсәй Яңы йыл шыршыһында республиканан 114 бала ҡатнаша.

19-23 декабрҙә 32 мең уҡыусы ҡатнашлығында 143 муниципаль шыршыһы уҙғарыла. 31 декабрҙә бөтә Яңы йыл майҙансыҡтарында күңел асыу ойоштороласа. Хөкүмәт вице-премьеры һүҙҙәренсә, яңы йыл каникулдарында республикала бик күп спорт һәм мәҙәни саралар үткәрелә. Уларҙа балалар ата-әсәләре менән бергә ҡатнаша ала. 2-6 ғинуарҙа мәктәптәрҙә 1017 спорт залында һәм майҙансыҡта спорттың ете төрө буйынса "Яңы йыл ғаилә уйындары-2020" фестивале була. 3 ғинуарҙа Өфөлә - Ҡарһылыуҙар парады, 4 ғинуарҙа "Ҡашҡаҙан" паркында - ат-сана экипаждары парады, 7 ғинуарҙа тотош республикала Раштыуа байрамы уҙғарыла. 11 ғинуарҙа Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында Аксаков шыршыһы-2020 була. 3750 мәҙәниәт учреждениеһы Яңы йыл байрамдарына 6049 сара планлаштырған.

# ТИҘ ЯРҘАМҒА ЯРҘАМ

**Республикала ашығыс медицина ярҙамында эшләгән табиптар, стажға ҡарап, ай һайын хеҙмәт хаҡына 7 мең һумдан ашыу өҫтәмә ала башлай. Башҡортостан һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин Өфөләге ашығыс медицина ярҙамы станцияһында уҙған күсмә "Һаулыҡ һаҡлау сәғәте"ндә ошо хаҡта белдерҙе.**

Кәңәшмә башланыр алдынан Башҡортостан етәксеһе Радий Хәбиров станцияның эше менән танышты, халыҡтан шылтыратыуҙар ҡабул ителгән диспетчерҙар бүлмәһен ҡараны. Өфө станцияһының баш табибы урынбаҫары Александр Степанов баш ҡалала ғына тәүлегенә 3 меңдән ашыу шылтыратыу ҡабул итеүҙәре, ә Башҡортостан буйынса йылына 4 миллиондан күберәк саҡырыу теркәлеүе хаҡында һөйләне. Әле бында 03 телефоны буйынса барлыҡ шылтыратыуҙарҙы үҙенә алған берҙәм мәғлүмәт диспетчер хеҙмәтен ойоштороу эше бара. Мәғлүмәт таблоһында һәм махсус картала бөгөн уҡ ашығыс ярҙам автомобилдәренең бөтә маршруттарын күҙәтергә мөмкин, диспетчерҙар пациенттарҙың маршруттарын билдәләй. Стәрлетамаҡта ла тағы бер ошондай резерв үҙәк булдырыла. Максим Забелин республикала 57 ашығыс ярҙам бүлексәһе эшләүен, бригадалар һаны шул уҡ кимәлдә ҡалыуын, ләкин кадрҙар менән тәьмин итеү мәсьәләләре барлығын билдәләне. Радий Хәбиров республика артабан да был хеҙмәткә тейешле ярҙам күрһәтәсәген әйтте.

# ТЫУАЛАР, ҮЛӘЛӘР...

**2019 йылдың тәүге туғыҙ айында Башҡортостанда 31 654 бала тыуған. Уларҙың 11 584-е - беренсе, 11 810-ы - икенсе бала, тип хәбәр итте республика статистиктары.**

Башҡортостанда 5,8 меңдән ашыу ҡатын-ҡыҙ өсөнсө балаһын табырға йөрьәт иткән. Ғаиләләрҙә 1,5 меңдән ашыу малай һәм ҡыҙ - дүртенсе, 900-гә яҡын сабый бишенсе һәм артабанғы бала булып донъяға килгән. Ошо ваҡыт эсендә иң күп балалар Туймазы (976), Өфө (864) һәм Белорет (817) райондарында тыуған. Ҡала округтарына килгәндә, бында, көтөлгәнсә, Өфө тыуым буйынса алдынғылыҡты бирмәй - 9 151 бала. Стәрлетамаҡта - 2 048 ҡыҙ һәм малай, Нефтекамала - 1 110. Киреһенсә, ағымдағы йылдың туғыҙ айында Башҡортостанда 36 883 кеше вафат булған, уларҙың 19 264-е - ир-егеттәр, 17 619-ы - ҡатын-ҡыҙҙар. Башстаттан хәбәр итеүҙәренсә, республикала үлгәндәрҙең дөйөм һанынан 27 888-е - эшкә һәләтле йәштән өлкән, 8 576-һы - иҡтисади яҡтан әүҙем халыҡ. Сағыштырыу өсөн: 2018 йылдың ғинуар-сентябрендә Башҡортостанда 35 560 бала тыуған, 38 205 кеше вафат булған.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә "Рәсәй - Ислам донъяһы" стратегик ҡараш төркөмөнөң V ултырышы булып үтте. Форумда Рәсәйҙең сит ил эштәр министры урынбаҫары Михаил Богданов, Рәсәйҙең Ислам хеҙмәттәшлеге ойошмаһы ҡарамағындағы даими вәкиле Рамазан Абдулатипов, Федерация Советының халыҡ-ара эштәр буйынса комитеты рәйесе урынбаҫары Фәрит Мөхәмәтшин, Рәсәй Сит ил эштәре министрлығының Дипломатик академия ректоры Александр Яковенко, шулай уҡ Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров, Татарстан президенты Рөстәм Миңлеханов, шулай уҡ илдең бер нисә төбәге етәкселәре ҡатнашты.

✓Федераль һалым хеҙмәтенең Башҡортостан буйынса идаралығы 2 декабрҙә милек һалымын түләү кампанияһының тамамланыуы тураһында хәтергә төшөрә. Шәхси кабинетҡа инеү мөмкинлеге булмаған йәки почта аша белдереү ҡағыҙы алмаған кешеләргә һалым инспекторҙары күп функциялы үҙәк офистарында йәки телһә ниндәй инспекцияла квитанция алырға кәңәш бирә. Улар эш көндәрендә иртәнге сәғәт 9-ҙан киске 8-гә тиклем эшләй.

✓"Тамыр" балалар-үсмерҙәр телеканалының "Бирешмә!" беренсе балалар премияһы "ТЭФИ-Регион"дың төп бүләгенә - Бронза Орфейға лайыҡ булды. Енеүселәрҙе бүләкләү тантанаһы Волгоградта уҙҙы. Рәсәйҙең 70 тораҡ пунктынан 126 телекомпанияның 500-ләгән эше баһаланды.

✓Өфөлә В.И. Ленин исемендәге майҙанда 21 ноябрҙә төндә баш ҡаланың төп шыршыһын ҡуйҙылар. Ҡаланы йәшелләндереү хужалығы хеҙмәткәрҙәре урман ҡупшыҡайын Благовещен районынан килтерҙе, тип хәбәр иттеләр мэрияның матбуғат хеҙмәтенән.

✓Дәүләт автоинспекцияһы оҙайлы уҡытыу курсы ойоштороу шарты менән балиғ булмағандарға водитель таныҡлығы тапшырыу идеяһын хуплаdensə. Идея балиғ булмағандарҙың юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен өс ай түгел, ә күпкә оҙағыраҡ өйрәнеүенә ҡайтып ҡала. Мәҫәлән, 14 йәшкәсә үсмерҙәр - йәш юл хәрәкәте инспекторҙары отрядында, ә өлкәнерәк балалар үсмерҙәр өсөн автомобиль мәктәптәрендә уҡый ала.

✓Башстаттың һуңғы мәғлүмәттәренә ярашлы, республикала рәсми теркәлгән эшһеҙҙәр һаны 18,3 мең кеше тәшкил итә. Был ағымдағы йылдың 1 сентябренә ҡарағанда 6,7 процентҡа аҙыраҡ. 1 октябргә ҡарата Башҡортостанда 16,7 мең кешегә эшһеҙлек пособиеһы түләнә.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

КӨНАУАЗ

# ҺЕҘҘЕҢ ИХАТАЛА НИҘӘР БАР?



**Ниһайәт, тиергәме, әммә милли проекттар ҡасандан бирле тормошҡа ашырылып килһә лә, быҒаса улар буйынса ентекле отчет булғаны юҡ ине әле. Һәр хәлдә, быйыл сентябрҙә уларҙың үтәлеше ни бары 30 процент тәшкил итеүе асыҡланғас, барыһы ла аяҡҡа баҫты, шикелле. Хәҙер төрлө кимәлдә отчет тотҡан яуаплы кешеләр һәр ваҡыт милли проект тигән һүҙгә баҫымды нығыраҡ яһағандай.**

Республика Башлығы Радий Хәбиров та был мәсьәләне даими күҙ уңында тота. Ошо көндәрҙә Хөкүмәт ултырышында "Башҡорт ихаталары" программаһы буйынса башҡарылған эштәр көн үҙәгенә сығарылды. "Башҡорт ихаталары" программаһы ябай ремонт ҡына түгел, уны тормошҡа ашырыу һөҙөмтәһендә һәр ихатала резиналы ҡатлам менән ҡапланған балалар һәм спорт майҙансыҡтары, контейнер майҙаны, транспортты парковкалау урындары, яҡтылыҡ сығанаҡтары булырға тейеш. Шулай уҡ территорияны йәшелләндереү, ял итеү өсөн эскәмйәләр ултыртыу, видеокүҙәтеү урынлаштырыу ҙа мөһим. Ләкин... БР торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Борис Беляев белдереүенсә, заявка бирелгән күләмдән ни бары сирек өлөш кенә ремонтланған, йәғни һандар теле менән әйткәндә, барлығы 400 ихата ремонтланырға тейеш булһа, был һан 107-не генә тәшкил итә. Был эштәрҙең ваҡытында башҡарылмауы төҙөлөш материалдары менән ваҡытында тәьмин итмәү һәм спорт, балалар майҙансыҡтарын килтереү тотҡарланыуға бәйле. Ошо сәбәпле 11 муниципалитетта эштәр бары тик декабрь урталарында ғына тамамланасаҡ, әле 19 муниципалитетта балалар майҙансыҡтары хәүефһеҙ резина ҡатламы менән ҡаплана. Әммә сәбәп шунда ғынамы икән? Миҙалдың икенсе яғын ҡарағанда, Бөрө ҡалаһында ихаталарҙы төҙөкләндереүгә тип бүленгән 9 миллион аҡса эҙһеҙ юҡҡа сыға. Быға хатта Радий Фәрит улы ла аптырауын йәшермәне. Ғәйепле табылырмы, юҡмы - билдәһеҙ, тик һәр муниципалитетта шундай суммалар юғала башлаһа...

Ә киләһе йылға бер ихата территорияһын төҙөкләндерергә финанстар 1,5 тапҡырға артҡан. Әлбиттә, был яуаплылыҡты тағы ла арттырырға тейеш. Шуға ла республика Башлығының эштәрҙең аныҡ графигын эшләргә ҡушыуы бик урынлы. Уға ярашлы, торгтар, контракт төҙөү ваҡыты аныҡ билдәләнеп, шул ваҡыттан да һуңға ҡалырға тейеш түгел. Һөҙөмтәлә, Радий Хәбировтың күҙаллауҙары буйынса, объекттар ҙа ваҡытында тапшырылырға, 2024 йылға тиклем республикала һәр ихата ремонтланырға тейеш. "Башҡорт ихаталары"на ҡағылышлы беренсе проблема ошо булһа, икенсеһе - башҡарылған эштең сифаты. Ошо көндәрҙә Хөкүмәттә үткән оператив кәңәшмәлә Радий Хәбиров был йәһәттән Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығына һәм урындағы властарға ҡәнәғәтһеҙлеген белдерҙе.

Был мәсьәләгә республика премьер-министрының беренсе урынбаҫары Андрей Назаров та үҙенең ҡарашын еткерҙе: "Юлдар һалынмаған, ә ямалған, - тине ул. - Яңы ла, әммә әле үк иҫке кеүек күренә. Балалар майҙансыҡтары исем өсөн генә эшләнгән. Аҡсаны статистиканы күрһәтеү өсөн генә әрәм итергә ярамай. Ни өсөн ундай объекттарҙы ҡабул итәбеҙ? Халыҡ көлә бит. Әлбиттә, улар ошондай майҙансыҡтарға килеп, аҡсаны үҙләштергәндәр, тип кенә әйтәсәк, сөнки эш һөҙөмтәһе балалар ихтыяжын ҡәнәғәтләндермәй".

Вице-премьерҙың тәнҡите лә урынлы кеүек, әммә бында бер мөһим мәлде онотorға ярамай: "Башҡорт ихаталары" программаһы буйынса башҡарылған эштәрҙе ҡабул иткәндә ошо ихата территорияһында йәшәүсе халыҡ дөйөм йыйылышта һайлап ҡуйған вәкил дә ҡатнаша. Әгәр етешһеҙлектәр булып та, объект ҡабул ителә икән, тимәк, йә уны ҡурҡытҡандар, йә ул аҡса үҙләштереүҙә "өлөшсө" булып тора. Сөнки намыҫлы вәкил бер ваҡытта ла етешһеҙлекте күрә тороп, уны ҡабул итеү документтарына ҡул ҡуймаясаҡ, ә нисек тә булһа эште еренә еткереп башҡарыуға өлгәшәсәк. Хәйер, бында ошондай "вәкилдәр" менән матур ғына аңлатыу эштәре алып барылыуы ла ихтимал. Мәҡәләнең башында әйтеп киткәнсә, сентябрҙә милли проекттарҙың үтәлеше ни бары 30 процент ҡына тәшкил итә ине. Ә уларҙы, федераль программа булараҡ, тормошҡа ашырыу өсөн финанстар федераль бюджеттан да бүленә. Тимәк, программа өсөн бүленгән аҡса билдәле ваҡытҡа тиклем үҙләштерелеп бөтөргә тейеш, әгәр шулай булмаһа, киләһе йылға финанслау тап үҙләштерелмәгән сумма күләменә ҡыҫҡартылыуы мөмкин (үҙләштерә алманыҒыҙ, тимәк, ул сумма һеҙгә кәрәкмәй, икенсе төбәктәргә етмәй ҡалды). Юлдар, башҡа объекттарҙы ремонтлау темпы тап ошо йыл һуңы яҡынлаша башлағас йылдамланыуы ошоға бәйле түгелме икән? Иң мөһиме - аҡсаны үҙләштереп ҡалыу, ә сифат көтөп торор... Күҙ башында етәкселектең милли программаларҙың үтәлеше өҙөлөү ҡурҡынысы аҫтында булыуын күҙаллауы ла шулай уйларға мәжбүр итә.

Өфө ҡалаһына килгәндә, быйыл ошо программаға ярашлы күп фатирлы йорттарҙың 89 ихата территорияһы комплекслы төҙөкләндерелә, йәғни 279 бағана ултыртыла, 3 спорт майҙансығы, 41 балалар майҙансығы, 45 турник комплексы, 639 сүп һауыты, 330 эскәмйә һәм 511 видеокүҙәтеү системаһы ҡуйыла. Автотранспорт өсөн 5 меңдән ашыу парковка урыны булдырыла. Әлеге ваҡытта 29 ноябргә тиклем 2020 йылға заявкалар ҡабул ителә. Был эште һеҙҙең өсөн кемдер килеп эшләүен көтөп ултырырға ярамай, ихатаны төҙөкләндереүгә заявканы идара итеү компаниялары ла, район хакимиәттәре лә, халыҡ үҙе лә бирә ала. Бының өсөн ни бары йыйылыш үткәрергә, программала ҡатнашыу тураһында ҡарар сығарырға һәм ҡала хакимиәтенә заявка тапшырырға кәрәк. Артабан инде эштәрҙең дөйөм күләме суммаһының 1 проценты халыҡтан йыйылһа, 94 процентын ҡаплауҙы республика үҙ өҫтөнә ала, 4 проценты ҡала ҡаҙнаһы иҫәбенә башҡарыла.

Тағы бер проблема - ул барлыҡ ошо эштәр башҡарылғандан һуң ихаталарҙың "хужаһыҙ" тороп ҡалыуы. Шул уҡ ваҡытта, йорт эргәһендәге территория дөйөм милеккә инә һәм уның хужалары булып милекселәр тора. Әммә үҙ милкен үҙе йәшәгән фатиры тип кенә күреп өйрәнгән ҡала халҡы, күрәһең, дөйөм милеккә ингән майҙанды һаман да үҙенеке тип танырға теләмәй. Һәм ҡуласа элеккесә әйләнә лә әйләнә: комплекслы ремонт эштәре башҡарыла, хужа юҡ, хужаһыҙ донъяла тәртип тә юҡ...

Ә һеҙҙә, хөрмәтле гәзит уҡыусылар, ниндәй фекерҙәр, ниндәй миҫалдар бар ошо эштәр буйынса? Яҙып ебәрегеҙсе әле.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# БЕЛЕМЛЕ МЕҢДЕ ЙЫҒА...



**Ҡала хакимиәтендә үткән сираттағы оператив кәңәшмәлә был юлы "Мәғариф" һәм "Демография" милли проекттары көн тәртибенә сығарылды. Уларҙың нисек тормошҡа ашырылыуы менән Мәғариф бүлеге етәксеһе Елена Хаффазова таныштырҙы.**

Ҡалала атап үтелгән милли проект сиктәрендә 6 төбәк проекты эшләй. "Ҡатын-ҡыҙҙарҙың мәшғүллегенә ярҙам" проекты 3 йәшкә тиклемге балаларҙың иртә үҫеше өсөн шарттар тыуҙыра. Һөҙөмтәлә уларҙың әсәләре эшкә ваҡытынан алдараҡ сығыу мөмкинлегенә эйә була. Быға балалар баҡсаларында булған биналарҙы ремонтлау һәм үҙгәртеү һөҙөмтәһендә өлгәшәләр. Быйыл 23 мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһында 3 йәшкә тиклемге тағы ла 625 бала балалар баҡсаһына йөрөй башлаясаҡ.

"Балалы ғаиләләргә ярҙам" проекты сиктәрендә балалар баҡсалары ҡарамағында Консультация үҙәктәре эшләй. Уларҙа бәләкәйҙән һәм сәләмәтлек мөмкинлектәре сикләнгән балаларҙы үҫтереү мәсьәләләре буйынса эш алып барыла. Хатта ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балаларҙы тәрбиәгә алырға теләүселәр ҙә үҙәктә консультация алырға хоҡуҡлы.

"Заманса мәктәп" проектына ярашлы, уҡыусыларға уңайлы инфраструктура булдырыуға йүнәлтелгән сараларға иғтибар бирелә, йәғни матди-техник базаһы үҫешкән белем усаҡтары бер сменала ғына эшләргә, уларҙа инклюзив мөхит булырға һәм һәр уҡыусыға урын етергә тейеш. Быйыл ғына 13 мәктәптә 850 өҫтәмә урын булдырылған. Ағымдағы уҡыу йылы башында баш ҡалала 1000 урынлыҡ ике - 44-се һәм 162-се "Смарт" полилингваль һәм киң профилле мәктәптәр асылды. Был проектты тормошҡа ашырыу сиктәрендә "Технология" фәнен уҡытыу тамырынан үҙгәреп, унда хәҙер кәрәкле һөнәрҙәр буйынса әҙерлек үтәләр. Интернет ярҙамында "Мәктәп - вуз - предприятие" моделе һөҙөмтәле үҫешә.

Өфө шулай уҡ Мәскәү ҡалаһының Мәғариф департаменты инициативаһы менән булдырылған "Ҡалаларҙың бер-береһен өйрәтеүе" проектында ла ҡатнаша. Унда Мәскәү, Новосибирск, Силәбе, Ижевск кеүек алдынғы ҡалаларҙың иң яҡшы тәжрибәләре өйрәнелә һәм алына. Мәғариф идаралығы вәкилдәре даими рәүештә Мәскәүҙә һәм Өфөлә үткән халыҡ-ара мәғариф салондары эшендә ҡатнаша. Был белем биреү учреждениеларының проекттарын, уҡытыусыларҙың оҫталыҡ дәрестәрен Бөтә Рәсәй һәм халыҡ-ара кимәлгә сығарыу мөмкинлеге бирә.

Әйткәндәй, Рәсәй Президенты Владимир Путин тарафынан былтыр раҫланған "Мәғариф" милли проекты Рәсәйҙәге белем алыу кимәленең глобаль кимәлдә дәғүәселеккә һәләтлелеген арттырыуҙы күҙаллай. Дөйөм белем сифаты буйынса Рәсәй донъяның алдынғы 10 иле иҫәбенә инергә тейеш.

## Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Юғары температура

❖ Температураны төшөрөү өсөн сей картуфты ҡырғыс йәки ит үткәргес ярҙамында ваҡларға һәм сикәләргә, маңлайға һалырға.

❖ Аш һеркәһе лә температураны яҡшы төшөрә. 100 г аш һеркәһенә 200 г һыу өҫтәп ҡойорға һәм шуға мамыҡты тығып сылатып, тәнде һөртөргә.

### Матдәләр алмашыныуы боҙолғанда

❖ Бер ҡалаҡ балан емешен бер стакан һыуға һалып ҡайнатырға, 1-2 сәғәт төнәтеп, һөҙөргә. Көнөнә ике тапҡыр яртышар стакан эсергә. Был төнәтмәнең дөйөм организмға файҙаһы ҙур.

### Һалҡын тейҙергәндә

❖ Һалҡын тейҙергәндән тал ҡабығы ҡайнатмаһын антибиотик урынына ҡулланырға була. Бының өсөн 3 ҡалаҡ ваҡланған тал ҡабығына 200 мл ҡайнар һыу ҡойоп, 3-5 минут ҡайнатырға һәм 2 сәғәт төнәтеп, һөҙөп алырға. Дауаны икегә бүлеп эсергә.

### Гайморит булғанда

❖ 8 теш һарымһаҡты бер ҡалаҡ алма һеркәһенә ҡушып бутарға. Килеп сыҡҡан шыйыҡсаға бер стакан ҡайнар һыу өҫтәп ҡойорға. Өс көн дауамында 4 сәғәт һайын ингаляция яһарға.

### Тын ҡыҫылғанда

❖ 1 кг бал, 10 лимондың һутын һығып һәм 10 баш һарымһаҡты иҙеп, бөтәһен дә ҡушып бутарға, ауыҙы ябылған банкаға һалып бер аҙнаға һыуытҡысҡа ҡуйырға. Көнөнә дүрт балғалаҡ ашарға кәрәк. Дауаланыу осоро ике ай, бер көндө лә ашамай онотоп ҡалдырырға ярамай. Был дауа төрлө йәштәге кешеләргә лә файҙалы.

### Тамаҡ ҡарлыҡҡанда

❖ Ҡарлыҡҡан тамаҡты дауалау өсөн парҙа бешерелгән һарымһаҡты мөмкин тиклем күберәк ашарға кәрәк.

❖ 2 сей йомортҡа һарыһына шәкәр һалып ағартҡансы туҡырға, аҡ май ҡушырға һәм аҙыҡ ҡабул иткән арала ашау ҙа тамаҡ ҡарлыҡҡанда ярҙам итә.

***✓ Был егеттең алкоголь ҡоллоғонан тамам ҡотолоп, әҙәм рәтенә ҡайтҡанына ысын күңелдән шатландым. Дембелгә ҡайтҡас, шайтан эсемлеге менән ҡаршы алып, уны харап итеп кенә ҡуймаһалар ярар ине…***

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!

# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

**Сәкмән һәм еләндәрҙең салғый мөйөштәре, итәгенең ҡабырға йөйҙәре буйлап, бил, яурындар, ең остарына нағыш һалынған; камзулдарҙың бил һәм уйып яһалған кеҫәләр тирәһе ҡайылған. Сергенең эйәр аҫтынан күренеп торған остары нағышланған.**



*Серге ҡайыуҙарының үҙенсәлекле мотивтары (ике осло ырғаҡтар, мөгөҙҙәр) (БР, Баймаҡ һәм Әбйәлил райондары). Т.К. Сурина фотоһы*

Түшәктәр һәм ат япмалары орнамент менән ҡаймаланған, мөйөштәренә айырым оя биҙәк (розеточный узор) һалынған. Түшәк тартҡыһын буйлап тотош нағыш алып торған. Янсыҡта оя биҙәк ике яғында ла булған. Уны төҫлө әҙерләмәлә ике тапҡыр ҡабатлап эшләгәндәр, ҡайһы берҙә төрлө ителгән; әҙерләмә уртаға бөкләнгән һәм муҡсаның яҫыраҡ туҡымаһы өҫтөнә тегелгән.

Элек ҡулдан һуғылған аҡ тулала ҡайыу ғәҙәти күренеш һаналған. Сәкмән, тула ойоҡ, серге, түшәктәрҙе биҙәгәндәр. XIX һәм XX быуаттарҙа һатып алынған йоҡа тулала йәки кармазин, бәрхәт, ҡытат, сәтин туҡымаларҙа ҡайығандар. Ҡайыу өсөн ҡыҙыл, йәшел, ҡара ерлек өҫтөнлөк иткән; шәмәхә, алһыу зәңгәр, ҡыҙғылт һары төҫлө туҡымалар һирәгерәк ҡулланылған. Һәр ваҡыт тиерлек төҫлө ерлеккә ҡара ептән, йә ҡара ерлеккә төҫлө ептән ҡайма эшләнгән. Сигелгән туҡыма кейеҙ йәки тулаға тегеп ҡуйылған, кизе-мамыҡ аҫтарға ултыртылған.

Ҡусҡарлы композициялар сикһеҙ күп төрлөлөгө менән айырылып торған. Оҫтабикәләр билдәле фигураларҙы үҙгәртеп һүрәтте ҡатмарлаштырған йәки ябайлаштырған, традицион орнаменттың ябай ғына элементтарын төрлөсә аралап ҡушҡан. Төрлө төҫлө гамма нағышты төрлөләндергән: һәр ҡусҡар икенсе төҫтәге ептән эшләнгән. Элмә һыҙатлы сылбыр ҡапма-ҡаршы килеп торған. Композицияның төп элементы, шулай уҡ ике осло ырғаҡтар (интегралдар), төрлөсә оялар (розетки) барлыҡҡа килтергән ҡусҡарҙар бигерәк айырылып торған. Фигураның төрлө осондағы бер төҫтәге деталдәр вертикаль буйынса симметрияны айырып килгән.



*Янсыҡтарҙа үҫемлек һәм геометрик орнамент биҙәктәре. БР Милли музейы. Т.К. Сурина фотоһы*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

УЙЛЫҒА - УЙ

**Оҙайлы хәрби хеҙмәтем дәүерендә СССР, унан Рәсәй тип аталған гәйәт ҙур илебеҙҙең һәр төбәгенән килгән төрлө кешеләрҙе күрергә, улар менән аралашырға тура килә ине. Гарнизон госпитале табибы булараҡ, ниндәй генә әҙәм балаларын осратманым. Бына шул ваҡыттарҙы бәғзе мәл иҫкә алып, ҡайһы бер ваҡиғаларҙы үҙемсә анализлап, төрлө һығымталар ҙа яһап ҡуйғылайым.**

# ӘРМЕ ХЕҘМӘТЕ...

## эскелеккә ҡаршы бер сарамы?



Бөгөнгө һүҙем дә әрмегә саҡырылыш буйынса килгән егеттәребеҙгә ҡағылышлы. Хәҙер нисектер, белмәйем, әммә, йәшерен-батырыны юҡ, бынан егерме-утыҙ йылдар элек туған-тыумасалары, дуҫ-иштәре күп призывниктарҙы әрмегә оҙатҡанда ныҡ ҡына "ашатып" ебәрә торғайны. Айырыуса, йыйылыу пункты урынлашҡан өлкә үҙәгендә йәшәүселәрҙе. Һәммәһенең рюкзагын әленән-әле тикшереп, артыҡ нәмәләрен (спиртлы эсемлектәрҙе) тартып алып, уларҙың күҙ алдында түгеп тороуыбыҙға ҡарамаҫтан, бер ни тиклем ваҡыттан әлеге шайтан эсемлеге бер-икәүһененең сумкаһында әллә ниндәй юл менән тағы ла пәйҙә була! Хатта тимер юл вокзалына автобусҡа тейәлеп сығыр алдынан тикшереү ҙә файҙаһыҙ. Поезға ултырғас та "хәстәрлекле" дуҫтары буласаҡ ил һаҡсыларына әллә күпме шешә тапшырып өлгөрә... "Покупатель" булып килгән ике-өс сержант, бер-ике офицер бәғзе ваҡыт был егеттәрҙе тикшереп өлгөрә алмай ҡала. Юлда барғанда ла ҡайһы бер егеттәрҙең, станцияларҙа төшә һалып, әлеге "провизияһын" тулыландырып алырға тырышыуҙарына аптырап, иҫем китә ине. Иҫерек егеттәрҙе тынлатыуы, уларҙы тыйып алыуы - тағы бер бәлә. Был, әлбиттә, бөтә призывниктарға ҡағылмай. Ауыл еренән килгәндәр, ғәҙәттә, тыныс, әҙәплерәк, тыңлаусаныраҡ була, әллә ни хәмер эсергә лә тырышып бармай...

Ул дәүерҙәр инде артта ҡалғандыр ҙа, бындай күренештәр хәҙерге егеттәргә хас түгелдер, тип ышанғы килә. Башҡа республикалар һәм өлкәләр менән сағыштырғанда, Өфөнөң йыйылыу пунктынан алған призывниктар ошо тарафтан иң яҡшылары тип хәтеремдә уйылып ҡалған. Сөнки беҙҙең Башҡортостан егеттәре: урыҫмы ул, сыуаш йә марий булһынмы, бөтөнләйгә башҡа, ифрат тәртипле булды. Ә башҡорт, татар егеттәре хаҡында айырыуса әйтке килә. Улар менән юлда йөрөү үҙе бер ял ине, тиһәм дә, хаталанмаҫмын. Шуға күрә лә мин призывниктар алырға гел генә үҙебеҙҙең Башҡортостанға килергә тырыша инем. Тик тырышыуҙан ғына тормай шул. Бойорһалар, кемдер әйтмешләй, елкәнде тырнай-тырнай, башҡа яҡтарға ла йөрөйһөң...

Шулай, сираттағы саҡырылыштарҙың береһендә ниндәйҙер бер республика, әллә өлкә хәрби комиссариатына (ҡайһы икәне хәтеремдән сыҡҡан, әммә үҙебеҙҙеке түгел) командировкала булырға тура килгәйне. Ана шунан саҡырылған егеттәр араһынан Алмаев фамилиялы һалдат әле булһа күҙ алдымда. Баштараҡ һүрәтләгән һымағыраҡ, юлда "көрәшә-көрәшә" бер нисә тиҫтә егетте үҙебеҙҙең ракета часына алып килгәйнек. Башҡа иптәштәре менән бергә был егет тә һәүетемсә "һуғып" алғайны... Поезда йоҡлап, таң атыуға уянып, ул-был итеүгә, үҙебеҙҙең часть биләмәһенә килеп тә еттек. Килгәс тә һалдат мунсаһында йыуынып, хәрби кейем кейеп алған егеттәр, тәүге төн казармала төнәп, иртәгәһен сержант ҡарамағында госпиталь поликлиникаһына килде. Хәрби комиссариаттарҙа тикшерелеүҙәренә ҡарамаҫтан, үҙебеҙҙә тағы бер мәртәбә уларҙы медицина комиссияһынан үткәрә инек. Хәҙер егеттәрҙең юлдағы "саялыҡтары", хатта бәғзе бер йор ғына һүҙлеләрҙең дә шаянлыҡтары бөткән, һәммәһенең йөҙө - етди. Ябыҡ ҡына, ағарынған битле әлеге Алмаевҡа иғтибар итәм. Башҡаларҙан айырмалы, сирле йөҙлө был йәш һалдатҡа һорау бирәм: "Берәй ерең ауыртамы әллә, Алмаев?" "Юҡ, бер ерем дә ауыртмай, доктор, ә үҙем ауырыйым... Хәҙер берәй йөҙ грамм булһа, килешеп ҡалыр ине..." Был егеттең оялмай тура әйтеүенә иҫем китә яҙҙы. Ошоғаса бер һалдаттан да бының һымаҡ яуап ишеткәнем юҡ ине. "Йөҙ грамм?..." "Эйе..." "Һалдат ашханаһында ашап, тағы бер төн туйғансы йоҡлап алһаң - был "һатып алған" ауырыуың да үтеп китер". "Минең бөтөнләйгә ашағым килмәй..." "Ничего, асыҡһаң - ашарһың..." Иртәгәһен санитар-инструктор бер нисә һалдатты тағы госпиталгә алып килгән. Араларында әлеге Алмаевты таныйым. "Хәлдәр нисек, Алмаев?" "Насар, товарищ подполковник". "Нишләп?" "Ауырыта..." "Һаман әлеге бахмурмы?" - тип шаяртып һорайым. "Эйе", - тип етди яуап бирә егет. Ғәжәпләнеүемдән ултыра төшә яҙҙым! Шулай ҙа оҙаҡ ауырый икән кеше! Шунан уның менән бер аҙ әңгәмәләшеп алырға булдым. Был егеттең һөйләүе буйынса, әрмегә саҡырылғанға тиклем әллә нисә ай буйы, көн һайын әҙ-әҙләп хәмер һемергән икән. Шунһыҙ "ашау ҙа бармай", кәйефе лә юҡ, имеш. Әле булһа, ашағыһы килмәй, тик көсләп кенә ары-бире йотҡолай икән. Һалдатты госпиталь бүлектәренең береһенә һалып, баштан-аяҡ тикшерергә булдыҡ. Аҙна ярымдай ятып сыҡты. Сыҡҡан саҡта ла һаман әлеге "100 грамм"ды көҫәй ине ул...

Артабан уны бер йылға яҡын күрергә тура килмәне. Егерме-утыҙ саҡырым арала ятҡан ракета полктарының береһенә ебәрелгәйне ул. Әммә бер мәл хәрби ҡаласыҡ урамында теҙелешеп барған бер отделение һалдат араһынан әлеге Алмаевты танып ҡалдым. Көскә таныным!.. Бер йыл элек бите бер аҙ баш һөлдәһен хәтерләткән, ифрат ябыҡ булған был егет тулылынап киткән, хатта һыны ла турайып ҡалғандай. Һалдат "стройҙ"ын туҡтатып, был егетте саҡырып алып, күрештем: "Алмаев, был һинме?" "Так точно, товарищ подполковник!" "Йөҙ грамм эскең килмәйме?" - тип шаяртам. "Хәҙер төшөмә лә инеп сыҡмай, иптәш доктор!" "Ашау яғы нисек, аппетитың бармы?" "Только давай!.." - тип шат яуап бирә егетең. Шуның менән беҙҙең әңгәмә тамамланды, һалдат ҡабаттан стройҙағы урынын алды. Отделение командирының "шагом марш", тигән командаһына гөрҫөлдәтеп баҫып китеп тә барҙылар. Был егеттең бер ниндәй ҙә туғаным, башҡа яҡыным, хатта яҡташым да булмауына ҡарамаҫтан, алкоголь ҡоллоғонан тамам ҡотолоп, әҙәм рәтенә ҡайтҡанына ысын күңелдән шатландым. Уны башҡаса бер ҡасан да күрергә тура килмәне. Дембелгә ҡайтҡас, әлеге туғандары, дуҫиштәре шайтан эсемлеге менән ҡаршы алып, уны харап итеп кенә ҡуймаһалар ярар ине, тип кенә уйландым...

Әрменән ҡайтҡан уландарығыҙға, ҡустыларығыҙ, дуҫтарығыҙға рюмка һонор алдынан һеҙ ҙә уйланығыҙ әле, йәмәғәт.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**отставкалағы медицина подполковнигы.**

ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ҠУРАЙСЫЛАР ИЛӘҮЕ ТҮҢГӘҮЕР ЫРЫУЫНАН БЕҘ



Тикшеренеүсе Ю.С. Бикбов шулай уҡ түңгәүер-бөрйән бәйләнеше хаҡында ҡыҙыҡлы мәғлүмәт бирә: "Түңгәүерҙәр үҙҙәрен бөрйәндәр менән яҡын ҡәрҙәштәр, тип иҫәпләй, уларҙың уртаҡ ер биләмәләре булған һәм бар."

Урман түңгәүерҙәренең иң боронғо ауылдары - Беренсе һәм Икенсе Асҡар, Ишҡол, Әхмәт, Мәһәҙей. Түңгәүер ырыуы башҡорттары бөгөн Башҡортостандың ете районының үҙҙәре нигеҙләгән ауылдарында, Һамар (Самара) һәм Һарытау (Саратов) өлкәләрендә йәшәй. Бөрйән, ҡыпсаҡ, тамъян, үҫәргән ырыуҙары башҡорттары менән ҡатнаш ауылдарҙа йәшәгән түңгәүер вәкилдәре лә байтаҡ.

Этногенетик тикшеренеүҙәр түңгәүер ырыуы башҡорттарының ир-ат линияһы буйынса генофондында төрлө этник компоненттар булыуын асыҡланы. Уларҙа N1c1-M178 (60%), R1b-M343 (15%), C3-M217 (15%), R1a1-M198 (5%), I2a-P372 (5%) гаплотөркөмдәре вәкилдәре табылды. Тимәк, геногеография мәғлүмәттәре түңгәүерҙәрҙең ҙур бер өлөшөнөң, атап әйткәндә, генетик маркеры N1c1-M178 гаплотөркөмөнөң L1034 линияһына тап килгәндәренең, Себер уғырҙарына (ханты һәм манси), венгрҙарға, Үҫәргән, Уран, Мең, Ҡошсо, Салйоғот, Терһәк, Сырҙы башҡорт кландарына ҡәрҙәш булыуын раҫлай. Был боронғо Көньяҡ Урал башҡорттары этногенезында уғыр генетик субстратының ҡатнашыуына етди дәлил булып тора. Шулай уҡ түңгәүер кланында R1b-M343 гаплотөркөмө булыуы ошо боронғо ырыу кешеләренең ата-бабаларының урындағы сармат-алан ҡәбиләләре менән нәҫелдәш булып, шул уҡ генетик линияға ҡараған бөрйәндәр менән булған ҡәрҙәшлеген раҫлап тора. Күрәһең, Евразия киңлектәрендә башҡорт этнонимы аҫтында билдәле булған төрки ҡәүеме тап Көньяҡ Урал ерлегендә урындағы уғыр һәм сармат-megaландарҙы үҙенә ҡуша алған.

Түңгәүер ырыуы башҡорттары дөйөм башҡорт тарихында лайыҡлы урын тота, улар үҙ хоҡуҡтары, ерҙәре, дини һәм милли йолалары өсөн туҡтауһыҙ тиерлек барған көрәштә бик әүҙем ҡатнаша. 1735 - 1740 йылдарҙағы оҙайлы башҡорт ихтилалы осоронда түңгәүер ырыуы башҡорто Күсәп батыр Солтанғолов оло ихтирамға лайыҡ булған юлбашсыларҙың береһе була. Пугачев яуы осоронда Нуғай даруғаһында Түңгәүер олоҫоноң йөҙбашы Юлдыбай Бәкеров баш күтәреүселәр командиры булып танылa. XX быуат башында башҡорт ерле автономияһы өсөн барған хәрәкәткә түңгәүер башҡорттары ла дәррәү ҡушыла. Әбделкәрим ауылында тыуып үҫкән Хәбибулла Ғәбитов, заманына ҡарата төплө белемле кеше, шағир һәм публицист, 1917 йылда Башҡорт Үҙәк Шураһының башҡарма комитеты ағзаһы итеп һайлана, башҡорт милли хәрәкәтенең тәүге баҫма органы булған "Башҡорт" гәзитен нәшер итеүгә күп көс һала, ойоштороу, агитация эштәрендә әүҙем ҡатнаша. 1935 йылда репрессияға дусар булып, хөкөм ителә, 1938 йылда атып үлтерелә. Бөрйән-Түңгәүер кантоны рәйесе Мөхәмәтйән Булатов, хәрби эшмәкәрҙәр Заһиҙулла Ҡаҙнабаев, Шәмсетдин Яҡшыгилдин башҡорт хәрәкәтенең билдәле инсандары булып танылa.

Түңгәүер башҡорттарының үҙенсәлекле ҡурайы ла була, был мөхит бик күп оҫта ҡурайсыларҙың, шул иҫәптән мәшһүр Йомабай Иҫәнбаев менән Ишмулла Дилмөхәмәтовтың тыуған төйәге.

Танылған башҡорт прозаигы, Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты Яңыбай Хамматов, данлыҡлы көрәшсе Ғаззали Үтәшев, дәүләт эшмәкәре, иҡтисад фәндәре докторы Абрар Ярлыҡапов, дәүләт эшмәкәре, БР-ҙың атҡаҙанған юрисы Рафиҡ Ғибәҙәтов, дәүләт эшмәкәре Әхмәт Хисмәтуллин, маһир ҡурайсы, халыҡ артисы Азат Айытҡолов, йырсы, халыҡ артисы Фәрит Бикбулатов, яҙыусы, ғалим-филолог Мирас Иҙелбаев, СССР-ҙың халыҡ рәссамы Әхмәт Лотфуллин, композитор Рафиҡ Сәлмәнов, Башҡортостандың халыҡ артисы Азат Нәҙерғолов, Рәсәй Федерацияһының халыҡ артисы Хөрмәтулла Үтәшев, шағирәләр Айһылыу Йәғәфәрова һәм Гөлназ Ҡотоева, тарих фәндәре докторы, профессор Роза Буканова, биология фәндәре докторы, БР Фәндәр академияһының ағза-корреспонденты Йәлил Һөйөндөков, ғалим-филолог Миңлеғәли Нәҙерғолов, Социалистик Хеҙмәт Геройҙары Килдебай Сөләймәнов, Абдулла Фәйзуллин һәм ошо бай тарихлы мөхиттә тыуып үҫкән башҡа бик күп зыялылар үҙ ырыуының данын бар Башҡортостанға таратты. Исемдәре аталмаған башҡа йөҙәрләгән хеҙмәт алдынғыларын, ғалимдарҙы, танылған мәғариф һәм медицина хеҙмәткәрҙәрен, сәнғәт эшмәкәрҙәрен, тыуған төйәктәренең, Башҡортостан Республикаһының үҫешенә тос өлөш индергән шәхестәрҙе тыуҙырған Түңгәүер ере.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.**

**Өлөшләтә Ф.М. Сөләймәнов материалдары файҙаланылды.**

**(Аҙағы. Башы 46-47-се һандарҙа).**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ



# БОРОНҒО БАШҠОРТ ДӘҮЛӘТСЕЛЕГЕ

Табын ханлығының (Табуни формаһында) айырым күрһәтелеүен, бая үрҙәрәк асыҡлап киткән дәүләт һәм халыҡ тигән схеманан сығып аңлатырға булалыр. Идриси табындарҙы, айырым ханлыҡ тотоусы булараҡ, башҡорттан айырым күрһәткән. Сөнки ошо уҡ ваҡытта, Идриси карталарынан күренеүенсә, донъяла айырым Башҡорт дәүләте лә булған. Бер үк халыҡта ике дәүләт булыуы борон иҫ киткес, ғәҙәттән тыш хәл иҫәпләнмәгән. Бихисап урыҫ кенәзлектәрен иҫкә төшөрәйек. Йәки, төрөк бейлектәрен. Шулай булғас, башҡорт ырыуҙарының, ҡәбиләләренең бер нисә дәүләте булыуына шикләнеп ҡарарға түгел, ә боронғолоҡ дәүерe өсөн ғәҙәти хәл тип кенә ҡабул итергә кәрәк.

Ҡайһы бер тарихсылар - башҡорттарҙың ырыу, ҡәбилә исемдәрен һаҡлауын артта ҡалғанлыҡ билдәһе, бер халыҡ булып ойошоп етмәүгә ишара, тимәк, башҡорттар дәүләт төҙөүҙән дә мәхрүм булғандар, тип иҫбатларға тырыша. Ырыу, ҡәбиләләр тураһында халыҡ хәтерендә мәғлүмәттәр һаҡланыу ғына әле дәүләтселек булмауының, юҡлығының күрһәткесе түгел. Мәҫәлән, афған дәүләтен иҫкә төшөрәйек. Афған тигән дәүләтте төҙөүсе халыҡ үҙен пашто, йәки пуштун, тип атай. Был Пашто (пуштун) халҡы әле лә төрлө ырыуҙарҙан, ҡәбиләләрҙән тора, шул арҡала, Афғанстан дәүләте юҡ, тип әйтергә, берәүҙең дә башына килмәҫ.

Ырыу, ҡәбиләләрҙең һаҡланыуын үҙ милли дәүләттәре булған бүтән халыҡтарҙың тарихынан да табырға була. Ҡайһы бер дәүләттәр әле лә, Афғанстан кеүек, туғандаш ырыу, ҡәбиләләр берләшмәһенән тора. Мәҫәлән, Иран дәүләте эсендә иран телле фарсыларҙан тыш, уларға туғандаш, оҡшаш телле әллә күпме ырыу, ҡәбиләләр әле булһа имен-аман йәшәп ята. Телдәре оҡшаш һәм яҡын булыуға ғына ҡарап, улар үҙҙәрен бер ҙә фарсы һанамайҙар, ырыу, ҡәбилә атамаһын, аңын ныҡ һаҡлайҙар.

Ҡыҫҡаса ғына әйткәндә, башҡорттоң үҙ милли дәүләте тарихта булған, башҡорт тигән халыҡ үҙенең барлыҡҡа килеүе, формалашыуы һәм тарих аренаһына килеп сығыуы менән шул дәүләткә бурыслы. Башҡорт дәүләте көс йыйып нығынғас, сығыштары менән дә, телдәре менән дә башҡортҡа яҡын күрше Табын ханлығын "йотҡандыр", тип уйларға була.

Ҡыпсаҡ дәүләтенең ҡыйралыуҙан ҡалған ярсыҡтарының үҙҙәренә туғандаш башҡорт араһына килеп инеп, башҡортлашып китеүе, бөрйән менән ҡыпсаҡ араһындағы дау-яу тураһында мәғлүмәттәр фольклорҙа һәм бүтән тарихи материалдарҙа ярайһы уҡ тулы сағылдырылһа ла, башҡорт менән табын араһындағы низағтар тураһында хәбәр-фәлән һаҡланмаған кеүек. Шуға күрә, башҡорт менән табындың берләшеүе тыныс юл менән, һөйләшеп-килешеү аша атҡарылғандыр, тип уйларға кәрәк. Башҡорт бейлектәренең, ханлыҡтарының берләшеүен Көньяҡ Уралда һәм уның тирә-яғында килеп тыуған тарихи ихтыяждар, халыҡ мәнфәғәттәре тыуҙырған.

Тарихта төрлө халыҡтар үҙ дәүләттәрен төҙөйҙәр, төрлө сәбәптәр арҡаһында уны юғалталар, кире тергеҙәләр, йәки тергеҙергә ынтылалар. Был тарих ҡануны. Бер халыҡ та үҙ дәүләтен үҙе тарҡатырға, таратып ебәрергә ынтылмай. Әгәр дәүләтен юғалта икән, был уның өсөн фажиғә. Ошо трагедияны аңлап, халыҡ нисек булһа ла дәүләтен кире тергеҙергә ынтыла, ошо юлда ҡан-тир түгеп көсәнә. Быға миҫал урыҫ дәүләте. XIII быуатта эреле-ваҡлы урыҫ кенәзлектәрен, йәғни дәүләттәрен татар-монголдар баҫып алғас, урыҫтар монгол дәүләтенең эсендә автономия хәлендә ҡалалар. Юл ыңғайы булһа ла әйтеп китергә кәрәк - был автономия, йәғни үҙаллылыҡ әле беҙҙең халыҡтың Рәсәй тигән урыҫ дәүләте эсендәге үҙаллылығынан күпкә юғары булған. Был фактҡа объектив ҡарарға кәрәк. Урыҫтар ике быуат татар-монгол иҙеүе аҫтында йәшәгәндән һуң, үҙ дәүләтен киренән тергеҙергә көс тапҡан. Табып ҡына ҡалмай, үҙҙәре буйһоноп йәшәгән татар-монгол мираҫын, улар биләгән ерҙәрҙе үҙ ҡулдарына төшөрөп, Рәсәй тигән дәүләт төҙөйҙәр.

Һүҙ ыңғайында Тукбуға исемле башҡорттоң Себер ханлығында хан булып ултырғанлығы тураһында тарихи документтарҙа теркәлеп ҡалғанлығын да әйтеп китергә кәрәк. Тукбуға хан булып оҙаҡ ултыра алмай, уны үлтерәләр. Бындай хәлдәр урта быуаттар өсөн ғәҙәти күренеш булған. Тукбуға кеүек сығышы менән башҡорт булған дәүләт эшмәкәрҙәре тарихта күп булған, тик улар икенсе дәүләттәргә хеҙмәт иткән. Мәҫәлән, Ғилметдин Санжар аль-Башҡорди исемле Египет әмирен һәм дә Насретдин аль-Насыри исемле башҡорт сығышлы ғәрәп шағирын иҫкә төшөрөргә була. Был икәүҙән тыш төрлө илдәрҙә ҙур-ҙур вазифалар тотоп килгән башҡорт сығышлы кешеләр күп булған. Әле лә сит-ят яҡтарҙа ҙур-ҙур вазифалар биләгән башҡорттар бик күп, уларҙың күбеһен беҙ хатта белмәйбеҙ ҙә. Бындай факттар беҙҙең халыҡтың дәүләтте ҡорорға ла, уны етәкләй алырға ла һәләтле икәнен күрһәтә.

Тарихта үҙ дәүләтен үҙ ихтыяры менән юҡ иткән халыҡ юҡ. Дәүләттәрҙең юҡҡа сығыуының сәбәптәре төрлө булыуы ихтимал, әммә халыҡ һәр ваҡыт үҙ дәүләтен ҡорорға ынтыла. Был тарих ҡануны.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ, этнограф.**

**(Аҙағы. Башы 39-47-се һандарҙа).**

*✓ Бөгөн күстәрҙең күпселек өлөшө ойошмаларҙа түгел, ә ябай ауыл умартасылары, йәғни һәүәҫкәр умартасылар ҡулында. Шуға күрә һәүәҫкәр умартасыны бөрйән ҡортон һаҡлап алып ҡалыу эшенә йәлеп итеү мөһим.*

# БАЛ ҠОРТО - ул матдилыҡтан

**Бөрйән бал ҡортоноң Башҡортостандың бик үҙенсәлекле тәбиғәт тереклеге икәнлеге иҫбатланған, ә бына был ҡорт төрөнә ҡурҡыныс янауы һәм уны һаҡларға кәрәклеге тураһындағы һүҙ яңы-яңы ҡуҙғала. Тәбиғәт байлығын сикһеҙ һәм мәңгелек тип уйлап күп яңылышлыҡтар эшләнгән кеүек, был ҡорт популяцияһы ла әрһеҙ һәм яуапһыҙ ҡарау арҡаһында юғалыу алдына баҫҡан. Бәхеткә күрә, был килеп тыуған бәләгә етди ҡараған һәм уны хәл итеү юлдарын тәҡдим иткән белгестәр бар. Бары уларҙы ишетергә һәм улар тәҡдим иткән хеҙмәттәргә аңлау, ярҙам һәм терәк булырға ғына кәрәктер. "Киске Өфө" гәзитенең түңәрәк ҡоронда был юлы шундай белгестәрҙең өсәүһе ҡатнаша. Улар: "Бөрйән бал ҡортон таҙа килеш һаҡлайыҡ" проектын тәҡдим итеп, Рәсәй Президенты грантына эйә булғандар - Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Химия институты доценты, ауыл хужалығы фәндәре докторы, химия фәндәре кандидаты Наилә ИШМОРАТОВА, ауыл хужалығы фәндәре докторы, биология фәндәре кандидаты Әғләм ШӘРИПОВ һәм Бөрйән умартасылар ойошмаһы етәксеһе Айытбай ДАУЫТОВ.**

**Бөрйән районында умартасылар ойошмаһы ҡасандан эшләп килә?**

**А. Дауытов:** Ойошма 2011 йылда барлыҡҡа килде. Уға тиклем айырым ғына ойошма булманы. Элегерәк бит инде был яҡта умартасылыҡҡа ҡарағанда солоҡсолоҡ менән шөғөлләнеүселәр күберәк булды. Бөрйән халҡында һәм, ғөмүмән, башҡорт халҡында солоҡсолоҡ борондан килгән кәсеп булһа ла, колхозлашыу осоро уны ла юҡ кимәленә алып барып еткерҙе. Иртәнән кискәсә эштә йөрөгән кеше урманда солоҡ ҡарап йәки шәхси хужалығы менән иркенләп булышып йөрөй алманы. Шул сәбәпле шәхси хужалыҡтарҙа ҡорттар һаны артыҡ күп булманы, ә урмандағылары бармаҡ менән генә һанарлыҡ ҡалды. Республикала Бөрйән ҡортсолары иң һуңғыларҙан булып солоҡтан умартаrange ларға күсте. Был хәл үткән быуаттың алтмышынсы-етмешенсе йылдарына тура килә. Ул заманда колхоз-совхоздарҙы ла умартаһыҡтар тоторға мәжбүр иткәндәр һәм башҡа ауыл хужалығы продукцияһы менән бер рәттән, бал тапшырыу ҙа бурыс итеп һалынған. Әммә солоҡ балының ҡәҙере булмаған, хаҡы ла бик осһоҙ баһаланған. Бөгөн замана ҡырҡа үҙгәреп китте. Беҙҙең ойошманың төп маҡсаты булып райондағы умартасыларҙы берләштереү тора. Район умартасыларына төрлө аңлатыу эштәре алып барыу, ярҙам итеү, ҡорт үрсетеү өлкәһендә белемдәрен үҫтереү.

**"Бөрйән бал ҡорто" тигән легендар ҡорт ул ысынлап та шулай үҙенсәлекле ҡортмо, әллә бында мифтар, уйҙырмалар күберәкме?**

**Ә. Шәрипов:** Быны аңлар өсөн тарихҡа күҙ һалыу кәрәктер. Ҡасандыр әле беҙ йәшәгән төбәк Һуңғы боҙлоҡ дәүерен кисергән. Бынан ун ике мең йыл элек боҙлоҡ йәйлап сигенә, ә тәбиғәт ҡабаттан терелә башлаған. Бына бер мәл йылы яҡта йәшәгән сама менән егерме бишләп төр бал ҡортоноң тик бер генә төрө һыуыҡ төбәктә йәшәргә "ҡарар" иткән. Бал ҡортоноң башҡа егерме дүрт төрө йылы яҡта тороп ҡалған, ә был ҡыйыуҙар йылы яҡтан һыуыҡ төбәккә табан ынтылған. Һыуыҡ шарттарға өйрәнеү-сынығыу нисәмә мең йыл барғандыр, был осорҙа нисәмә бал ҡорто һәләк булғандыр, быны әйтеүе ҡыйын. Әммә ҡаратырыш ҡорттар туҡтап ҡалмаған, артҡа сигенмәгән, бары тик алға ынтылған. Һәм барыбер ҡырыҫ шарттарҙа, ағас ҡыуышлығында йәшәргә ҡулайлашҡандар, ҡыҫҡа ваҡыт эсендә саған-йүкәнең һутын алырға өйрәнгәндәр. Бына ошо ҡыйыу ҡорттарҙың иң һуңғы килеп еткән урыны - Башҡортостан ерҙәре. Урал тауҙары аша ары үтә алмаған улар. Бөгөн ошо тарихи ҡорттарҙың төп өлөшө Бөрйән ерлегендә һаҡланып ҡалған. Шуға улар "бөрйән ҡорто" исемен алған да инде. Аңлатыу урынһыҙ, үҫеш буйынса бөрйән ҡорто йылы яҡта ҡалған бал ҡорттары менән сағыштырғанда бер генә түгел, хатта ике-өс баҫҡысҡа юғары тора. Бына, әйтәйек, йылы яҡ ҡорттарының дошмандары һаман да ҡош-мош та һағыҙаҡ, ә бөрйәндәрҙең дошмандары айыу ҙа һыуһар. Шуға ла бөрйән ҡорттары үҙҙәре лә эрерәк, сағыуҙары ла көслөрәк. Ябай ғына аңлатҡанда - ошолар. Әйткәндәй, бөгөнгө көндә лә бөрйән ҡорттары кеше ярҙамына мохтаж түгел. Улар үҙҙәре ағас ҡыуышлығы табып урынлаша, ояны ҡышҡа әҙерләй, дошмандарына ҡаршы көрәшә ала. Бөгөн ер йөҙөндәге шулай үҙаллы көн күрә алған бик һирәк ҡорттарҙың береһе улар. Шуға улар менән эшләүе лә ауыр, кеше йоғонтоһона бирелеп бармайҙар, сағалар, "талашалар", һаман үҙ-ҙәренсә эшләргә тырышалар.

**Н. Ишморатова:** Бөрйән районында бына шундай ижади ҡортсолар эшләй. Уларҙың тәжрибәһе, белеме, күҙәтеүҙәре һәм асыштары әллә нисә ғилми үҙәккә етәрлек. 2021 йылда Башҡортостанда ҡортсоларҙың Апимондия тип аталған бөтә донъя фестивале үтәсәк. Ҡортсолоҡ буйынса республиканың йөҙөк ҡашы, әлбиттә, Бөрйән районы буласаҡ. Бында күп нәмә эшләнә, әммә шул эшләнгәнде күрһәтеү мөмкинлектәре һәм ысулдары ғына етешмәйҙер, тип уйлайым мин. Һәм, бая әйткәнсә, Бөрйәндә иң таҙа һәм иң боронғо ҡорт популяцияһы - бөрйән бал ҡорто һаҡланған. Башҡа ерҙә бындай хазина юҡ. Сит илдәрҙә ниндәйҙер ҡорт төрөн һаҡлау өсөн хатта махсус утрауҙар тоталар. Ә беҙҙә улар тәбиғи рәүештә йәшәп ята. Әлбиттә, ҡунаҡтар быны күрергә теләйәсәк. Һәм беҙ уларҙы тейешле кимәлдә ҡабул итергә тейешбеҙ.

**Бөрйән ҡортона бөгөн ниндәй хәүеф янай?**

**Ә. Шәрипов:** Иң ҡурҡыныслы хәүеф уларҙы сит ҡорттар менән буташтырырға тырышыуҙар. Сәбәптәрҙең береһе булып тәмле йүкә балы, дөрөҫөрәге, уның юғары хаҡы тора. Бөгөн бөрйән балының "Башҡорт балы" тигән бренды барлыҡҡа килде. Йәй көндәре туристар, ситтән килеүселәр күп. Балдың нимә икәнен белмәгәндәр ҙә даны сыҡҡан бөрйән балын алып китергә теләй. Ә умарта тотоусылар, ҡайҙа ғына йәшәүҙәренә ҡарамаҫтан, һораусыларға тап бөрйән балын биреп ебәрергә ынтыла. Шуға күрә ҡайһы бер сит район умартасылары үҙ умарталарын тейәп, Бөрйән сигендә урынлашҡан йүкәлектәргә килеп ултыра. Үкенескә ҡаршы, Рәсәй законлары умартасыларҙың был ҡыланышын бер нисек тә сикләмәй. Умарталыҡтың документлы, ҡорттары һау-сәләмәт, йоғошло ауырыуҙарһыҙ булыуы ғына шарт. Әлбиттә, сит район умартасыһы сит тоҡомло ҡорт менән килеп ултыра, улар, үҙ сиратында, урындағы ҡорттар менән ҡушыла, бутала башлай. Ошондай буташыуҙар арҡаһында бөрйән ҡортоноң тәбиғәте лә, холҡо ла, йәшәү рәүеше лә үҙгәреш кисерә. Бындай буталған күс урындағы һауа шарттарына ла яраҡлаша алмай. Улар йә ниндәйҙер ауырыуҙарға бирешә, йә ҡышты сыға алмай ҡырылып бөтә.

**А. Дауытов:** Бөрйән умартасыларын бөгөн тағы ла бер күренеш аптырата: улар ҡорттарына сит ҡорттар һөжүм итә тип аптырай. Бының да аңлатмаһы әлеге ҡырҙан килтерелгән ҡорттарға бәйле. Йылы яҡ ҡорттары оҙон йәйгә яраҡлашҡан, улар йыл әйләнәһенә тип әйтерлек сәскәләр араһында рәхәтләнеп йәшәүгә күнеккән. Улар ҡышҡа ла ни бары ике ай тирәһенә генә ябыла. Ә бөрйән ҡорттары өсөн йәй ҡыҫҡа, йүкә мәле бөттөмө - бал да бөттө тигән һүҙ. Беҙҙекеләр ҡышҡылыҡҡа ноябрҙән алып апрелгә тиклем бикләнә. Бына ошо оҙон ҡышты буталған ҡорттар үткәрә алмай бер була. Йә ваҡытынан алда шаулайкөжгөй башлай, йә оянан осоп сығып үләләр. Яҙ көнө лә аптырана улар, сөнки уларға сәскә юҡ, шуға күрә уларға башҡа умарталарҙы эҙләп табып, уларҙы талап, балдарын урлап ташыу юлы ғына ҡала. Был уларҙың ҡандарындағы ашамһаҡлыҡ бәләһе. Урындағы умартасылар үҙ ҡорттарын икенсе урынға күсереп тә, кейәләрен бөтөнләйе менән ябып та ҡарайҙар, тик "баҫҡынсыларҙан" ҡотола алмайҙар. Бына ошо талау-баҫыуҙар һуңғы йылдарҙың төп бәләһе булып тора.

**Был мәсьәләне хәл итеү юлдары бармы?**

**Ә. Шәрипов:** Бар. Бына ошо бәләнән ҡотолоу маҡсатында беҙ эш башланыҡ та инде. Бөрйән бал ҡортон һаҡлау буйынса проект төҙөп, уны Рәсәй Президенты грантына тәҡдим иттек. Һәм еңеп сыҡтыҡ. Бөрйән район хакимиәтенә рәхмәт, ул беҙгә ер һәм лаборатория урынлаштырыу өсөн бина бирҙе. Район башлығы Рөстәм Шәрипов, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаты Айнур Бейембәтов ҡортсоларҙың һәр йыйылышында ҡатнашып, беҙҙең эш менән танышып торҙо, беҙҙең эштең мәртәбәһен күтәрҙе. Беҙ йәй осоронда райондың иң таҙа умарталығы эргәһендә эшләнек. Үҙебеҙҙең ихлас рәхмәттәребеҙҙе ошо умарталыҡ хужаһы Йомағужин Рөстәмгә һәм уның атаһы Рафиҡ ағайға еткерәбеҙ. Уларҙың эскерһеҙ ярҙамы булмаһа, беҙгә үҙ эштәребеҙҙе башҡарып сығыуы бик ауыр булыр ине. Йәй осоронда беҙ таҙа тоҡомло ҡорт инәләре сығарҙыҡ һәм урындағы умартасыларға тараттыҡ. Тараттыҡ ҡына түгел, ә уларға алып барып урынлаштырып, күстең инәне ҡабул итеү-итмәүен тикшерҙек. Проекттың төп маҡсаттарының береһе - ябай умартасы менән ғалимдар араһында бәйләнеш булдырыу. Бөгөн күстәрҙең күпселек өлөшө ойошмаларҙа түгел, ә ябай ауыл умартасылары, йәғни һәүәҫкәр умартасылар ҡулында. Шуға күрә бөгөн һәүәҫкәр умартасыны бөрйән ҡортон һаҡлап алып ҡалыу эшенә йәлеп итеү мөһим. Бының өсөн уларға аңлайышлы һәм улар ҡабул итерлек эш ысулдарын тәҡдим итергә кәрәк. Шул осраҡта ғына бөрйән ҡортон һаҡлау мөмкинлеге бермә-бер артасаҡ. Бына быйыл йәй осоронда өс фән докторы һәүәҫкәр умартасылар менән бергә эшләне. Бындай эш ике яҡ өсөн дә отошло, ғалимдар умартасыларҙы өйрәтте, ҡайһы бер нескәлектәрҙе умартасылар төшөндөрҙө. Ошолай килешеп эшләгәндә генә беҙ дөрөҫ юл таба аласаҡбыҙ.

**Бөрйән ҡорто өсөн халыҡ үҙе борсоламы һуң? Урындағы умартасылар үҙҙәре үҙ ауыл биләмәләре янындағы ерһыуға килеп ултырыусыларға ирек ҡуя түгелме? Ә солоҡсолоҡ райондың ҡайһы өлөшөндә яҡшыраҡ һаҡланған? Бының өсөн ниндәй шарттар булырға тейештер?**

**А. Дауытов:** Урындағы умартасылар, ауыл хакимиәттәре башлыҡтары сит умарталыҡтарҙы аңғарып ҡалыу менән улар эргәһенә барып, һөйләшеп-килешергә тырышалар. Хатта боронғоса ҡыуып ебәреп тә ҡуялар. Әммә, үрҙә әйтелгәнсә, әгәр умарталығының документтары, тейешле справкалары бар икән, Рәсәй гражданын ҡайҙалыр индермәҫкә берәүҙең дә хоҡуғы юҡ. Ошо сикләү ҡулды бәйләй ҙә инде.

Солоҡсолоҡ менән шөғөлләнеү өсөн ҡарағай урманы кәрәк. Урманда делянкалар күп булған ерҙәрҙән ҡорттар китә. Уларға йәшәү өсөн тыныс, кеше аяғы һил булған ҡарағайлыҡтар, ә бал йыйыуға йүкәлек һәм сағанлыҡтар булыуы шарт. Бөгөн солоҡ ҡорттарының ҡырағайҙары Аҫҡар-Ғәлиәкбәр төбәгендә күберәк тороп ҡалған.

Бөрйән ҡортоноң тағы бер "кире" үҙенсәлеге бар. Улар иркенлекте ярата, эргәләрендәге күстең яҡында булмауын хуп күрә. Умарталыҡта бер урынға йөҙ умарта ла ултырып була, был хәл уларға оҡшамай һәм шуға ла йыш ҡына күстәр уйламаҫтан күсеп сығып та китә. Оялар һаны бер урында илле-алтмыш баштан күбәйһә, ҡорттар сәбәпһеҙгә кәмей башлай. Ә йылы яҡ ҡорттары ҡыҫынҡы ғына урында ике йөҙ баш умарта булғанда ла тыныс ҡына йәшәй ала, хатта умарталар бер-береһенә терәлеп ултыра.

**Лаборатория тураһында һөйләп китегеҙ әле? Ниндәй файҙа килтерәсәк был проект бөрйән ҡортона һәм Бөрйән умартасыларына?**

**Ә. Шәрипов:** Лаборатория эш башланы. Иң башта заман талап иткәнсә, компьютер, уға махсус программа, ошо программаға тура килгән сканер һәм башҡа өр-яңы ҡорамалдар һатып алдыҡ. Компьютер программаһы ярҙамында Ырғыҙлы ауыл биләмәһендәге ҡорттарҙың тоҡом хәлен асыҡланыҡ. Ырғыҙлы, Ҡотан һәм Мәҡсүт ауылдарындағы 17 умартасынан 304 ҡорт өлгөһө алдыҡ һәм тикшерҙек. Башҡа ауылдарҙан "Беҙҙекен дә тикшерегеҙ әле" тип алып килгән 22 ҡорт өлгөһөн өйрәндек. Һөҙөмтәлә Ырғыҙлы ауыл биләмәһендәге ҡорттарҙың 75 проценты таҙа бөрйән ҡорттары булып сыҡты, ә бына ҡалған 25 процентының сит ҡорттар менән буташып өлгөргәне асыҡланды. Бөгөн был буталған ҡорттарҙан тиҙ арала ҡотолорға кәрәк. Ә бының өсөн ошолай эшләйбеҙ: күстең инәһен алабыҙ һәм таҙа бөрйән инәһенә алмаштырабыҙ. Ҡорт инәһе сығарыу эшендә лә яңы ысул ҡулландыҡ. Иң мөһиме, өмөтлө ыңғай һөҙөмтәләр бар.

**А. Даутов:** Киләһе йылдарҙа ҡорттарҙы тикшереү эшен район буйынса йылына бер тапҡыр булһа ла үткәреп тороу зарур. Әле Өфө ғалимдары менән ауылдар буйлап йөрөйбөҙ, умар-

✓ *Ә бал ҡортонан бик күпте өйрәнергә була, улар шул ҡәҙәре аңлы һәм тәртип яратҡан бөжәктәр. Улар бер ваҡытта ла кешегә яраҡлашмаясаҡ, беҙ үҙебеҙ уларға яраҡлаша һәм улар теләгәнсә эшләргә бурыслы.*



тасыларға мөрәжәғәт итәбеҙ. Улар быңдай иғтибарға шатланып китә, шөғөлдәренә дәртләнеберәк тотона, тигәндәй. Сөңгө бөгөн күп умартасылар үҙ бәләләре менән үҙҙәре генә ҡалған, уларға иғтибар етешмәй, бугай. Шуныһы ҡыуандыра: бөтәһе лә "бөрйән ҡортон таҙа килеш һаҡлайыҡ" тип ихлас тора.

Бөрйән ҡортон таҙа килеш һаҡлау мөһимлеген урындағы халыҡ ҡына түгел, башҡалар ҙа аңлаһын ине. Бына йәй үткәргән тәжрибә миҫалдарын ғына алайыҡ. Бөрйән-Йылайыр сигендә сит район умартасылары килеп ултырҙы. Беҙ компьютер программаһы ҡулланып уларҙың да ҡорттарын тикшерҙек. Һөҙөмтәһе ҡыуанырлыҡ түгел: алып килеп ултыртылған ҡорттар йылы яҡ ҡорттары булып сыҡты.

**Н. Ишморатова:** Бөрйән популяцияһы ҡорттарының тағы бер "кире" һыҙаты - улар сит инәне ҡабул итмәй. "Инәне алмаштырыу" тигән аңлатма эсендә әле ул инәне көс ҡабул итерлек итеп урынлаштырыу кәүек оло бер хеҙмәт ята. Был тәңгәлдә беҙ феромон препараттарын ҡулланабыҙ. Нимә ул феромон? Миҫал өсөн бына беҙ һәр беребеҙ үҙ телебеҙҙә һөйләшәбеҙ, әйе бит, һәр милләт үҙ телендә аңлаша ала. Шуның кеүек, бөжәктәрҙең дә үҙ теле бар. Һәр бөжәктең үҙ теле! Улар химик формулалар аша сигналтикшереүселәр инә ҡорттоң еҫе башҡа йәки нимәһеләр саҡ ҡына булһа ла икенсе төрлө икәнде аңғара икән, шундуҡ ихтилал ҡуба ла "инәне алыштырырға" тигән ҡарар ҡабул ителә. Һәм "яңы инә сығарырға" тигән фарман барлыҡҡа килә. Беҙ үҙ эшебеҙҙә бына ошо хәлдә ҡулланырға уйлайбыҙ ҙа инде. Эш шунда: беҙ ошо химик формулаларҙы асыҡлау ғына түгел, хатта уларҙы эшләй алдыҡ. Бөгөн беҙ көс ҡабул итә торған феромондар менән йәш инәне эшкәртә һәм күскә ебәрә алабыҙ. Был һөҙөмтә бирә, ә шулай ҙа әле йөҙ проценты менән ышанысլы түгел. Бөрйән ҡорттары, башҡаларҙан айырмалы рәүештә, бик ҡырыҫ, уҫал һәм шөнә барабыҙ. Әммә был башланғыс ҡына, уны дауам итеү өсөн дә сығымдар һәм дәүләт ярҙамы кәрәк. Шуныһы булмай. Йәки беҙгә ярҙам итерҙәй, башланғысты күтәреп алырҙай ойошмалар булһын ине. Мәҫәлән, түмәр-умарталар яһап, уға кәрәкле документтар тултырып патент алырға йөрөйбеҙ. Әлеге әйткән түмәр-умарта таҙа ҡорт инәләре алыу өсөн бик кәрәк. Беҙ өсәүләп йөҙгә яҡын түмәр-умарта эшләнек, ә күберәк эшләү өсөн ағас менән ни итә белеүсе оҫталар, ағас эшкәртеү станогы, транспорт, транспорт яғыулығы һәм башҡаһы кәрәк. Грант үҙ бурысын башҡарҙы: беҙ башҡаларға "бына ошолай эшләп була" тип проблеманан

**Кеше тарафынан бал ҡортона ниндәй мөнәсәбәт булырға тейеш?**

**А. Дауытов:** Быны аңлау өсөн тағы бер тапҡыр тарихҡа күҙ һалыу кәрәктер. Борон солоҡ тотҡан атай-олатайҙар солоҡҡа, бөрйән ҡортона, дөйөм әйткәндә, тәбиғәткә ихтирам һәм хөрмәт менән ҡараған. Солоҡтар тамғалы булған. Тамға - ул әйәле тигәнде аңлатҡан һәм ситтәр уға теймәгән. Хужаһы ҡортон айыуҙан һаҡлау өсөн солоҡ ағастарына туҡмаҡтар элгән, һыуһарға тоҙаҡ ҡорған. Ҡышлауға аҙығын да етерлек итеп ҡалдырған. Йәғни, үҙенә аҙыҡ, шифа биреүсе ҡортҡа һәм

**Н. Ишморатова:** Кореянан бер профессор, бер студент, бер аспирант килде. Уларҙы Ильясов Рөстәм менән Юнысбаев Урал тигән Башҡортостан егеттәре - белгестәр оҙатып йөрөнө. Улар бөрйән бал ҡортоноң гендары ысынлап та таҙа һәм боронғомо икән, тигәнде өйрәнергә килгән. Һәр хәлдә, оҙатып йөрөүселәр беҙгә шулай аңлатты. Беҙҙә генә түгел, Белорет, Яңауыл, Мәләүез районларында ла булғандар. Өлгөләрҙе үҙҙәре алды һәм тикшереүҙе лә үҙҙәрендә үткәрәләр. Тикшереү үткән, әммә күрһәткестәрен әлегә әйтмәнеләр. Ғилми мәҡәлә яҙасаҡбыҙ һәм ебәрәсәкбеҙ, тип вәғәҙә иттеләр. Көтәбеҙ.

**Бөрйән ҡорто менән шунда йәшәгән аҫаба халыҡ араһында ниндәйҙер тәбиғи бәйләнеш бармы икән? Ошо тоҡом ҡортон өйрәнеп фәнни эштәр яҙғанда, әҙәбиәттәр булдырғанда, әлеге уй килгәне булманымы һеҙгә?**

**Ә. Шәрипов:** Әлбиттә, бәйләнеш бар. Улар икеһе лә ошо ерлектең тереклеге. Ошо мөхиткә кеше лә, ҡорт та яраҡлашҡан һәм урындағы тәбиғәт уларҙың холҡона ла бер төрләрәк йоғонто яһаған. Элекке колхоз-совхоз осоронда эштән һуң, төндә солоҡтарын ҡарарға тип егермешәр саҡрымға барып урап



# УЛ ИЛҺАМ СЫҒАНАҒЫ,

## күпкә юғары һәм аңлы донъя

дар, йәғни еҫтәр ебәреп аңлаша. Һәр формулала үҙҙәренең генә молекулалары, шунлыҡтан уларҙы тик үҙҙәренеке генә төшөнә ала. Был уларҙың үҙ теле. Ошо химик формулалар феромондар тип атала инде. Бөжәктәр араһында иң ҡатмарлы тел бал ҡортонда. Уларҙағы химик формулалар тотош көйҙәр ансамбле булып тора. Инә ҡорттоң үҙенә генә хас формулалары бар, ул эш ҡорттары менән бер феромонда, балалары менән икенсеһендә, өсөнсөләре менән өсөнсө төрлө итеп йөҙгә яҡын төрлө "еҫтәр" сығара ала. Шулай уҡ инә ҡорттоң үҙ еҫе, эшсе һәм атай ҡорттоң үҙ еҫтәре бар. Инә ҡорт шундай һиҙгер, ул ошо еҫтәр буйынса кустә нимәләр барғанын, нимәләр үҙгәргәнен белеп тора. Шул уҡ ваҡытта инә ҡорт үҙе лә һәр ваҡыт "ҡалпаҡ" аҫтында. Уның янында һәр ваҡыт эйәрсәндәре йөрөй, инә ҡорт бер ваҡытта ла яңғыҙ ҡалмай. Эргәһендәге эйәрсәндәре уны ялап, еҫкәп кенә тора ла, ундағы бәләкәй генә үҙгәреште лә күскә тарата. Инә ҡорт ауырыймы, сәләмәтме, ҡаратайғанмы, берәй ере "һынмағанмы" (умартасы яңылыштан имгәтеүе бар), сәскөрмәйме-бышҡырмаймы - барлыҡ мәғлүмәт шундуҡ ғаиләгә хәбәр ителә. Әгәр ошо характерлы ҡорттар, тип әйттек бит инде.

**Быңдай проект Башҡортостанда беренсе тапҡыр ҡаралалыр, шулай бит?**

**Н. Ишморатова:** Бына бында ултырған егеттәр ошо проектты тормошҡа ашырыу өсөн әллә күпме ваҡыт урындағы умартасылар менән аралашты. Карта төҙөп алдылар, бөтөн территорияны күҙәттеләр, өйрәнделәр, ҡорттарын тикшерҙеләр. Һәм бөтөн был хеҙмәтте урындағы халыҡты ҡаршы ҡуймай ғына, дуҫлыҡ-хеҙмәттәшлек мөнәсәбәттәрендә башҡарырға кәрәк ине. Быныһын да булдырҙы егеттәр. Бына ошо тикшереүҙәр күрһәткесе бөрйән ҡортон артабан һаҡлау өсөн иҫбатлау базаһы булып тора ла инде. Хәҙер беҙ ҡыйыу рәүештә "Был ерҙәрҙә таҙа бөрйән ҡорто ғына йәшәй һәм бында сит ҡорттарҙы индереү тыйыла!" тигән тәртипте ҡуя аласаҡбыҙ.

**А. Дауытов:** Был проект ысынлап та бик уникаль булып сыҡҡан икән. Беҙ быны хатта үҙебеҙ ҙә аңлап етмәгәнбеҙ. Проектҡа Рәсәй Пезиденты Путин ҡул ҡуйғас, уның программаһы менән эшләй башлағас ҡына беҙ был хеҙмәттең ниндәй файҙалы һәм ҡиммәтле икәнен төсығыу юлын күрһәттек, артабан бергәләп эшләргә кәрәк.

**Инә ҡортто алмаштырыу, яһалма аталандырыу кеүек үҙенсәлекле эштәр өсөн махсус белгестәр талап ителәләр?**

**Ә. Шәрипов:** Был яңы заманса йүнәлеш буйынса мин Мәскәү өлкәһендә уҡып ҡайттым. Рәсәй буйынса 19 белгес белемен камиллаштырҙы, Бөрйәндән мин бер үҙем генә булдым. Күбеһе йылы яҡ умартасылары ине.

Баштан уҡ шуны әйтәйем: был йүнәлештә әле беҙҙең тәжрибә бөтөнләйе менән юҡ. Ә йылы яҡ ғалим-умартасылары был ысулды күптән ҡуллана һәм үҙҙәренә кәрәкле тоҡомдо кәрәкле кимәлдә үрсетә. Уларҙа һәр эштең үҙ белгесе бар. Берәү йәш инә сығара, икенсеһе ата ҡорттар өсөн яуаплы, өсөнсөһө аҙыҡ таратыу (шәкәр сиробы) менән мәшғүл һәм башҡаһы. Һәүәҫкәр умартасылар ҙа һәйбәт таҙа инәләр һатып алырға өйрәнгән, тоҡом талаптарына яуап биргән ҡорт инәләрен йөҙәрлән һатып алалар, мөрәжәғәт итеүҙәр йыл башында уҡ башлана икән. Беҙҙең умартасылар әлегә бал алыуға ғына эшләй. Бөгөн умартасылар араһында "селекционер" тигән яңы һөнәрмәндәр ҙә барлыҡҡа килергә тейеш. Алдынғы ҡарашлы, белемле йәштәргә мохтажбыҙ.

был шөғөлгә бик һаҡсыл ҡараған, тимәксемен.

Дөйөм әйткәндә, бал ҡортона иң беренсе хөрмәт һәм һөйөү булырға тейеш. Уларҙың тормошона тығылырҙан алда шул тормошто белеү, аңлау зарур. Китаптан уҡып ҡына алған белем менән күскә килеп йәбешеп булмай. Күҙәтеү, өйрәнеү, тәжрибә, белгәндәрҙе тыңлау аркаһында ғына ҡорт донъяһын төшөнөргә һәм файҙаға тотонорға мөмкин. Миҫалға ғына алып ҡарағанда, күс йәшәгән умарта йәки солоҡ эсендә шул хәтлем таҙалыҡ, тәртип, ә һин унда быҫраҡ ҡулың, еҫле ҡорамалдарың менән тотондоң икән, уларға оҡшамаясаҡ. Һинән һуң улар ояны тағы ла тәртипкә килтереп алыу өсөн әллә күпме көс һәм ваҡыт сарыф итәсәк. Шунлыҡтан, ҡортҡа ярағанса һәм оҡшағанса ғына эшләй белеү бик мөһим. Бының өсөн, әле әйткәнсә, өйрәнергә лә өйрәнергә. Ә бал ҡортонан бик күпте өйрәнергә була, улар шул ҡәҙәре аңлы һәм тәртип яратҡан бөжәктәр. Улар бер ваҡытта ла кешегә яраҡлашмаясаҡ, беҙ үҙебеҙ уларға яраҡлаша һәм улар теләгәнсә эшләргә бурыслы.

**Быйыл йәй Бөрйәнгә Кореянан ҡортсолар килгән икән, тигән хәбәр булды. Ниндәй маҡсат менән сәфәр ҡылған улар һеҙгә? Осрашыу нисек үтте?**

ҡайтҡан солоҡсоларҙы беләм инем. Аҡса, тип түгел, ә, ҡортомдоң хәле нисек икән, айыуфәлән теймәнеме икән, берәй ярҙам кәрәкмәйме икән, тип барып ҡайта ине бит улар. Бөгөн дә күптәр ҡорттарын ҡарап, уларҙың гөжләп осоуына бергә ҡыуанып, ауырып китһәләр, бергә "ауырып", дөйөм әйткәндә, улар менән бергә йәшәй. Бал ҡортона ғашиҡ бит ул умартасы-солоҡсо. Был уларҙың күңел торошо, тел менән әйтеп бирә алмаған эске бәйләнеше. Бал ҡорто ул мал да, байлыҡ та, мөлкәт тә түгел, ул - илһам сығанағы, матдилыҡтан күпкә юғары һәм аңлы донъя.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Бал ҡорттарын һеҙҙең кеүек яратһалар һәм хөрмәт итһәләр ине" тип өҫтәп ҡуйғы килә диалог аҙағынан геройҙарыбыҙға төбәп. Сөңгө улар атҡарып килгән эш баһалап бөткөһөҙ, быңдайҙы тик тәбиғәтте аңлаған, белгән һәм үҙ еренә сикһеҙ һөйөү менән йәшәгән патриоттар ғына булдыра алалыр. Күтәреп алайыҡ был башланғысты, ярҙам итәйек, мөмкинлектәр бирәйек. Шундай юғары фәнни хеҙмәтте артабан үҫтермәй һәм халыҡ мәнфәғәтенә тапшырмай әрәм итеп ҡуймаҫҡа ине...**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**яҙып алды.**

✓ **Бындай шаулы-даулы йыйындың был тирәлә күптән булғаны юҡ ине. Иртәгеһенә улыс ауылдарынан эркелешкән ылауҙарҙан Ҡаҙаҡкол гөрләп торҙо, улыс йортоноң ян-яғы санаға егеүле аттар менән тулды.**





Мәүлит ЯМАЛЕТДИН

# ҠОТОЛОУ ЮЛҠАЙҘАРЫН ТАПМАҺЫМ

**(повестан өҙөк)**



Ауыл старостаһы Ниғмәтйән Ишморатовтың өйөнә байтаҡ кеше йыйылғайны. Күнелдәрендә яңырыу рухы йөрөткән дәртле йәштәр менән бергә, яңылыҡҡа һыуһаған урта йәшлек ир аҙаматтары ла күп кенә ине. Сходта баш һүҙҙе Әхмәҙи әйтте:

- Ағай-эне, ниндәй тыныслыҡ, ауыр ваҡытта йәшәгәндә үҙегеҙ күреп-белеп тораһығыҙ. Донъялар болғанып тора, ул да мәғлүм. Әле бының менән генә бөтөп китмәҫ был тартҡылаш, был фетнә. Артабан нисек йәшәргә, ҡайһы юл менән китергә? Ана шул турала һөйләшеп, кәңәш-тәңәш итергә беҙгә күршеләр килгән, һеҙ уларҙы танынһығыҙ. Бына шуға йыйҙыҡ һеҙҙе. Ярар, мин оҙаҡ һөйләп тормайым, һүҙҙең толҡаһын Муса ҡулына тапшырам.

- Егеттәр! - тип башланы Муса. - Аждаһалай золом сәсеп, халыҡтарҙы нисек теләһә, шулай иҙгән батшаның ҡолағанына ла байтаҡ ваҡыт үтеп китте. Ян-яҡта ярлы-ялпы уяна, күҙен аса, үҙ яҙмышына үҙе хужа булырға ынтыла. Беҙ һуғыштан: "Инде үҙебеҙҙә лә шуралар ойошторолғандыр, дилбегә халыҡ ҡулына яйлап-яйлап күсәләр", - тигәнерәк уй менән ҡайтҡайныҡ. Дөрөҫмө, Әхмәҙи?

- Дөрөҫ, мин дә шулайыраҡ уйлап ҡайттым, - тип йөпләне Әхмәҙи.

Муса дауам итте:

- Ҡайтып төшһәк, ни күрәбеҙ: власть һаман элекке хужалар ҡулында. (Ошо ерҙә ул яңылыш Ниғмәтйәнгә ҡарағайны, өй хужаһы уның үткер ҡарашынан сүгә бирер ҡуйғандай булды). Улыста унда һаман байҙар йөгөнтоһо көслө, старшина Ишкәримов ян-яғын үҙен маҡтап-хуплап тороусы ялағайҙар менән уратып, эләккеләй ни теләһә, шуны ҡыла, имеш. Алыҫ китмәй генә, һеҙҙең ауылды алайыҡ: бер-бер йомошҡа кемгә бараһығыҙ?

- Кемгә булһын, һаман шул Сәғит муллаға барабыҙ ҙа старостаға киләбеҙ инде, - тине ауыл йәштәренән үткерлеге менән айырылып торған Закир.

Был һүҙҙәрҙән һуң Ниғмәтйән ултырған урынында тағы ла нығыраҡ сүгә төшкәндәй тойолдо.

- Ана бит, - тип дауам итте Муса, - беҙ кемде көтәбеҙ һуң? Әллә власты батмусҡа һалып ҡына әпкилеп бирерҙәр тип өмөт итәбеҙме?

- Уныһы шулай, - тине әлеге Закир, - тик беҙ ниҙән башларға белмәй йонсойбоҙ. Улай намыҫҡа тейеп торғансы, арыуыраҡ һүҙ әйтеп, кәңәш бирергә булмаймы?

Ошо урында, ауылдашының ҡатыраҡ бәрелеүенән уңайһыҙланғандай, Әхмәҙи ҡыҫылырға булды:

- Тураһын әйткән туғанына ярамаған, тигәндәй...

- Ниңә, әйтһендәр, әйтһендәр, - тине Муса, - аңлашыу өсөн йыйылғанбыҙ ҙа... Арыуыраҡ һүҙме? Улай тиһәгеҙ, шуны әйтә алам: Рәсәйҙә большевиктар партияһын төҙөп, революцияның атҡарыусы Ленинды ҡарағыҙ. Әгәр ҙә ул ер хәстәрен күктән көтөп ҡул ҡаушырып ултырһа, анау хәтле оло эш үҙенән-үҙе эшләнер инеме? Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы: үҙебеҙгә тәүәккәл булырға кәрәк - яңы власть шуға өндәй. Минең кәңәш: оҙон-оҙаҡҡа һуҙмай ғына халыҡты йыйып, улыста ҡоролтай үткәрергә кәрәк. Унда барса аңлашылмаған һорауҙар асыҡланыр, тип уйлайым. Шуға нисек ҡарайһығыҙ?

Уның был һүҙҙәре халыҡ күңелендә ҡайнар яҡлау тапты: йыйылыш шау-гөр килергә тотондо:

- Бына, исмаһам, эшлекле кәңәш!

- Күптән шулай ҡыбырларға кәрәк ине!

- Берәү йөрөмәйенсә булмай шул!

- Бик хуп!

Шау-шыу баҫыла төшкәс, Закир ҡысҡырып һораны:

- Унда нимә, бөтә ауыл барамы инде шунан?

Уға Әхмәҙи яуап бирҙе:

- Юҡ, егеттәр, ундай ергә делегаттар һайлана, йәғни илселәр.

- Мин Көсөк ауылынан. Мортазин Муса исем шәрифендәмен.

- Ә-ә, Лут ағайҙың улымы? Атайыңды бик яҡшы белә торғайным. Ай-һай, һәйбәт кеше ине, мәрхүм...

Ишкәримовтың эс-бауырҙарға инеп, кешене арбап ала торған ғәҙәтен ишетә белгән Муса һүҙҙе оҙонға һуҙмаҫҡа була, тура һуҡтырҙы:

- Йомош, тип... Иртәгә съезд була бында, шуны хәбәр итергә ҡушылған миңә.

- Съезд? Ул ниндәй ҡолаҡ ишетмәгән нәҫтә?

- Йыйын, ҡоролтай була торғайны беҙҙенсә. Бөтә улыс халҡы йыйыласаҡ.

- Әһә, халыҡҡа теләһә нәмә һөйләп, ҡорсотоп йөрөй тип һине әйтәләр икән дә. - Старшина һөжүмгә күсергә булды. - Ҡоролтайҙан ҡубып, ғауға сығарырға кем полномочие бирҙе

сәй дәүләтендәге өр-яңы бер дәүергә - иҙелеп йәшәгән халыҡтарҙың аңы уяна башлаған заманға аяҡ баҫҡан бер мәлдә асыла.

Беҙ үткәндәргә боролоп ҡарап ни күрәбеҙ? Тарихтың һикәлтәле, хәтәр ваҡыттарында илдең арҙаҡлы азаматтары йыйындар үткәреп, кәңәш беркеткәнен күрәбеҙ. Аҡһаҡалдар ни әйткән был турала? Кәңәшле ил тарҡалмаҫ, тигән. Минең уйлауымса, беҙҙең быуынға тарихтың иң һикәлтәле ваҡытын үткәреп ебәрергә яҙған. Ошо мәлдә, тырым-тыраҡай ятып, илде тарҡатып бөтмәҫ өсөн, һеҙҙе кәңәш-тәңәш итергә саҡырҙыҡ та инде. Эйе, тураһын әйтәйек, бик тынғыһыҙ дәүерҙәр килде: тирә-яҡта сыуалыш, ҡыйралыш. Тәхеттәр һелкенә, батшалар ҡолай, ярлы-ябаға үҙҙәренең Советтары, йәғни шуралары аша дилбегәне үҙ ҡулына

йылдар алып барам. Старшинаның ҡайһы бер ҡылыҡтарын элек тә хупламай инем, әле лә риза түгелмен. Шуға күрә аҙаштың һүҙҙәре менән килешмәй булмай: иҫкелектән тиҙерәк ҡотолорға кәрәк. Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ: батша ҡолатылған тигән хәбәр ишетелеү менән үк яңы хөкүмәт бер нисә декрет, беҙҙеңсә фарман сығарҙы. Уларҙың береһендә аҡҡа ҡара менән: "Бөтә власть - советтарға", икенсеһендә: "Ер - крәҫтиәндәргә", - тип яҙылғайны. Шул фармандар зым-зыя юҡ булды - старшина уларҙы халыҡтан, йәғни һеҙҙән йәшерҙе, ни өсөн тиһәгеҙ, совет власын да, ваҡытлы хөкүмәт кеүек үк, тиҙҙән ҡолаясаҡ, тип уйлай ул.

Делегаттар араһында еңелсә шау-шыу, гөүләү ишетелде. Шәмсетдинов уларҙы түҙем генә үткәреп ебәргәндән һуң дауам итте:

- Йәки бынауҙы алайыҡ: үҙебеҙҙең башҡорт хөкүмәте Ырымбурҙа бөтә Башҡортостан ҡоролтайы үткәрергә йыйына. Күрһәтмә килде, ә шуның буйынса бында йыйын үткәреп, ҡоролтайға делегаттар һайлау тураһында ла старшина ләм-мим.

Шәмсетдиновтың әйткәндәре залдағыларҙы оторо ярһыта ҡуйҙы - ғәжәпләнеү ҡатыш асыулы тауыштар ишетелде:

- Ниңә беҙ улар тураһында бер нәмә лә белмәйбеҙ?

- Ниңә һин үҙең был хаҡта шымып килдең?

- Ул ҡағыҙҙарҙы йәшереү кем файҙаһына?

- Ер тураһындағы фармандың ҡағыҙы бармы, шуны күрһәт әле!

- Старшина үҙе ҡайҙа ул, ниңә күренмәй?

Тап шул саҡта ишек төбөндә ығы-зығы ҡупты. Үҙе хаҡында һүҙ сыҡҡанды көтөп кенә торғандай, Ишкәримов ҡысҡырып ебәрҙе:

- Дружинниктар! Ойоштороусыларын ҡулға алығыҙ, нимә ҡарап тораһығыҙ? Мортазинды иң тәүҙә!

Старшина, ҡарт бүре, ваҡытты бушҡа үткәрмәйенсә, үҙҙәрен демократ тип йөрөтөүсе йәштәрҙе ылыҡтыра һалып, шуларҙан дружина төҙөп өлгөргәйне. Күбеһенсә мулла, бай балаларынан торған әлеге егеттәр Ишкәримовтың абруйлы тауышынан рухланып, ишек төбөндәге делегаттарҙы этә-төртә залға үтеп инә башланылар.

- Ҡыйыуыраҡ, ҡыйыуыраҡ! - тип дәртләндерҙе уларҙы старшина, - һөйрәп сығарығыҙ шуларҙы!

Эштең ҡайҙа табан барыуын һиҙеп алған Муса һушын тиҙ йыйҙы. Залда барлыҡҡа килгән ығы-зығыны баҫып, уның көслө тауышы яңғырап китте:

- Егеттәр! Беҙҙең яҡта дөрөҫлөк һәм көс! Үҙҙәрен ҡулға алығыҙ!

Был тәүәккәл оран күптәрҙе айнытып ебәрҙе: делегаттар менән дружинниктар араһында шарт та шорт көрмәкләшеү китте. Саҡырылғандар сафында Мусаны күптән белеп, уның өсөн йәнен бирергә әҙер тороусыларҙың береһе бәхлеүән Усман да бар ине. Ул бер юлы ике дружинникты бөрә тотоп алды ла, тегеләргә алмаш-тилмәш ҡарап:

- Мин шулай уйлайым, - тине Муса, - был эштең башы ғына бит әле. Һеҙ бер-ике көн уйлаштырып йөрөгөҙ ҙә, тағы бер йыйылып алырһығыҙ. Шунда бер ыңғай делегаттар ҙа һайларһығыҙ, биш-алты кеше булһа еткән. Әйҙәгеҙ, был эште Әхмәҙигә тапшырайыҡ. Ризаһығыҙмы?

- Риза, риза!

- Нәҡ үҙе!

Тәүге уныштан ҡанатланған Муса менән Ибраһим бер-ике көн эсендә был яҡ ауылдарҙы йөрөп сыҡҡандан һуң, Көсөккә тейеп тә тормайынса, улыстың Күбәләккә ҡараған тарафына юл алдылар. Егеттәрҙең күнелдәре күтәренке ине, сөнки үҙҙәренең уйҙары күпселек халыҡтың фекеренә ауаздаш булыуын тойоу үҙе үк йөрәктәргә көс өҫтәй, һайланған юлдың дөрөҫ булыуын раҫлай. Ошо теләктәшлек, ниәттәрҙең игеҙлеге рухты күтәрә, алға әйҙәй.

Улыстың төп ауылдарын йөрөп сығып, оҙаҡҡа һуҙмай ғына йыйындың көнө билдәләнгәндән һуң Муса көндәрҙән бер көндө Ҡаҙаҡколға килде. Ул туп-тура старшина бүлмәһенә инеп, көр тауыш менән сәләм бирҙе:

- Әссәләмәғәләйкүм!

- Мәғәләйкүм! - Табаҡ битле, йыуантыҡ кәүҙәле Мөхәммәт Ишкәримов шеш ҡабаҡтары аҫтынан уға мут күҙҙәрен төбәне. - Ни йомош, егет кеше? Кем тип әйтергә лә белмәйем...

һинә? Закон буйынса мин һине ҡулға алырға тейешмен.

Муса ул-был килеп сыҡһа тип, яуаптың еллеһен әҙерләп ҡуйғайны:

- Революция!

Ул шуны әйтте лә, ишекте шарт ябып сығып китте. Ишектең теге яғында Ишкәримов туҙынып ҡалды:

- Туҙға яҙмағанды!.. Булмаясаҡ йыйын!.. Маңҡалар!..

Бындай шаулы-даулы йыйындың был тирәлә күптән булғаны юҡ ине. Иртәгеһенә улыс ауылдарынан эркелешкән ылауҙарҙан Ҡаҙаҡкол гөрләп торҙо, улыс йортоноң ян-яғы санаға егеүле аттар менән тулды. Ике остан да саналар ауылға өҙлөкһөҙ ағыла, таныштары булған кешеләр йә уңға, йә һулға борола ла, ҡалғандар баҙар шикелле ҡайнап торған ергә - съезд булаһы урынға ашыға. Урамда шау-шыу, ҡысҡырып сәләмләшеүҙәр, аттар бышҡырыуы, саналар шыжлауы.

Ҡоролтай башланғанда улыс бинаһы делегаттар менән шығырым тулы ине. Уны мөһәбәт кәүҙәһенә килешеп торған унтер-офицер формаһындағы Муса башлап ебәрҙе:

- Хөрмәтле делегат иптәштәр! Күбәләк-Тиләү улысы башҡорттарының беренсе йыйынын асып, һеҙгә бер нисә һүҙ әйтергә ниәтем. Ағай-эне! Халыҡтың ышанысына лайыҡ булмыш йәмәғәт! Һеҙ бөгөн тарихта ҡала торған ҡоролтайға йыйылдығыҙ. Был ҡоролтай шуныһы менән шанлы: ул икһеҙ-сикһеҙ Рә-

ала. Революция беҙҙең башҡорт һымаҡ аяуһыҙ иҙелеүгә хөкөм ителгән халыҡтарға ла хөрриәт асмаҡсы - үҙ юлдарын үҙҙәре һайлаһын, тип бара.

Бына ошондай ваҡытта беҙ, әрме хеҙмәтенән әйләнеп ҡайтып, ни күрҙек? Улыста тормоштоң һаман элеккесә икәнен, халыҡтың яңы хакимиәт үҙенә ниндәй хоҡуҡтар биргәнен аңламай ҡаңғырғанын күрҙек. Был хәл менән килешеп буламы? Булмай! Беҙ бүтән халыҡтарҙан ҡалыша алмайбыҙ. Иҫкегә йәбешеп ятыу башҡортҡа төҫ түгел.

Алда бик ҙур бурыс тора: бороңғо идаралыҡты - старшиналыҡты юҡҡа сығарыу, уның урынына яңы хакимиәте - волость башҡарма комитеты, ауыл шуралары ойоштороу. Минең һеҙгә әйтер һүҙем ошо ине. Йыйын асыҡ. Йәгеҙ, хәҙер делегаттарҙы тыңлайыҡ, кемдең ниндәй һорауы, ниндәйерәк уйы бар - асыҡтан-асыҡ һөйләгеҙ, тартынмағыҙ.

Тәүге һүҙҙе Ишкәримовтың писары Муса Шәмсетдинов алды:

- Йәмәғәт! Был йыйын элегерәк булырға тейеш ине, беҙ үҙебеҙҙең ығыш ғәҙәтебеҙ арҡаһында, һәр ваҡыттағыса, һуң ҡыбырлайбыҙ. Шулай булһа ла һеҙҙең бөгөн йыйылыуығыҙ ҡиммәт - бер-берегеҙҙең фәһемле һүҙҙәрен тыңлап, бәләкәй күҙегеҙ асылыр, ҡайтҡас, яңы сәйәсәтте ағай-энегә төшөндөрөрһөгөҙ. Һеҙ мине беләһегеҙ, инде: писарь вәжеүәтен байтаҡ

- Кемгә ҡул күтәргән булаһығыҙ һеҙ, ә? - тип бер-берећенә ҡуша һуҡты. Көсөн самалаңҡыраманы шикелле Усман - былдай ҡаты ҡулға өйрәнмәгән егеттәр һуштан яҙып, тоҡ һымаҡ иҙәнгә ултыра төштө. Дүрт йөҙҙән ашыу делегатҡа бер төркөм дружинникты ҡулға алыу сүп кенә ине - "һә" тигәнсе тегеләрҙең аяҡ-ҡулдарын бәйләп тә ташланылар.

- Старшинаны тотоғоҙ, старшинаны! - тип ҡысҡырҙы тығыҙ халыҡ төркөмөн бер нисек тә йырып сыға алмай аҙапланған Муса. Ләкин хәйләкәр Ишкәримов үҙенең көтөлмәгәнлеккә һәм элекке абруйына ҡоролған планының юҡҡа сығыуын күреп, тайыу яғын ҡараны: уны тоторға тип артынан ташланған бер нисә делегаттың ҡотон алып алтатарҙан һауаға атты ла, егеүле торған кашауайына йүгерҙе. Кешеләр тәүге ҡаушауҙарын еңеп тышҡа сыҡҡанда старшинаның елһеҙ көндә ҡар бураны күтәреп сабыусы аты алыҫ ине инде.

Ҡулға алынған дружинниктарҙы келәткә бикләп ҡуйғандан һуң съезд ғауғалы тәнәфестән яйлап-яйлап арынып, артабан дауам итте. Был көтөлмәгән кисҡен бәрелеш халыҡты уятып ебәрҙе, йыйынға өр-яңы йүнәлеш бирҙе. Ишкәримов ҡуштандарының ҡулға алыныуы, бигерәк тә старшинаның ҡурҡып ҡасыуы делегаттарҙың рухын күтәреп, телдәрен систе, сөнки улар бөгөн улыс ауылдарына ҡурҡыу һалып тороусы хакимды ҡолатырға һәләтле яңы бер көстөң барлыҡҡа килеүен үҙ күҙҙәре менән күрҙе.

Делегаттар сығышының һәр берећендә Ишкәримовтан күргән йәбер-золом, иҫке властың ябай халыҡ өсөн тигеҙһеҙлеге, ғәҙелһеҙлеге фашланды. Фронтовиктарҙан Мусаның хеҙмәттәштәре, буласаҡ көрәштәштәре - Ҡарағужанан Уйылдан, Сорамандан Әхмәҙи Мамилин, Ғәлиәхмәрҙән Әхмәҙи Зиннуров, Батталдан Нурғәле Биргәлин сығыш яһаны. Рәсәйҙәге төрлө милләт вәкилдәре менән бер окопта ятып, политик йәһәттән күҙҙәре ярайһы уҡ асылып ҡайтҡан был алдынғы ҡарашлы кешеләр батша хакимлығының, Ваҡытлы хөкүмәттең һәм әле лә уларҙы һағынғандарҙың реакцион асылын ярып һалдылар, илдәге сәйәси хәлгә ҡағылышлы бик күп ҡыҙыҡлы, фәһемле нәмәләр һөйләнеләр. Йыйылған халыҡ өсөн был ысын мәғәнәһендә политик мәктәп ине.

Көн буйына һуҙылған йыйын улыстың яңы идараһын һайлау, бөтә Башҡортостан ҡоролтайына делегаттар күрһәтеү менән тамамланды. Составына Муса ла ингән башҡарма комитет ағзаларына Күбәләк-Тиләү улысы менән идара итеү, урындарҙа ауыл советтары ойоштороу, һәр ерҙә ирекле дружиналар төҙөү бурысы йөкмәтелде. Тиҙҙән Ырымбурҙа асыласаҡ бөтә Башҡортостан ҡоролтайына һайланған иң тәүге делегаттарҙың береће Муса ине.

...Коридорҙа, ваҡыттың ҡотолғоһоҙ икәнлегенә ишара яһап, надзирателдәрҙең аяҡ тауышы ишетелә. Улар сәғәт йөрөшөн хәтерләтеп, бер яҡыная, бер алыҫая: тап-топ, тап-топ...

## ХӘТЕРКИТАП

**"Күкрәүҙәрен тойоп замандың..." Рәйес Түләк яҙып ҡалдырған ошо шиғранә тамға Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры шәхестәренә лә таман ғына. Данлы-шанлы 1919 йылда башҡорт театры сәхнәгә аяҡ баҫа. Бөгөн илебеҙ уның 100 йыллығын байрам итә. Хөрмәтле милли сәнғәт усағының тарихын, режиссерҙары һәм актерҙарының ижадын барлап мәҡәләләр яҙған театр белгестәре лә бар. Кемдәр һуң улар, беҙҙең яратҡан театрыбыҙҙы ҡурсып-бәпләп, хуплап-маҡтап ижад юлына әйҙәүселәр? Режиссерҙар Вәлиулла Мортазин-Иманский, Мәкәрим Мәҙәһиев, әҙәби бүлек мөдирҙәре Әминә Аралбаева, Тамара Абросимова, театр тәнҡитсеһе Һөйөндөк Сәйетов, Өфө сәнғәт институты профессорҙары Суфия Күсемова, Галина Вербицкая, Айһылыу Сәғитова, Гөлсәсәк Саламатова, Рида Буранова, йәш театр белгестәре Ирина Шәмсетдинова, Эльвира Дәүләтбирҙина, Эльвира Әбдрәкипова, Әлиә Мәмбәтова һәм театр уты ҡағылған башҡа йәндәр бөгөн дә арымай-талмай һәр тамашаны, һәр яңы образды сәләмләп, һөйөнсөләп тора. Ошо көндәрҙә Башҡорт театрының 100 йыллығы уңайынан нәшер ителгән тарихи-сәнғәти баҫма донъя күрҙе, уның өсөн бөгөнгө башҡорт театр белгестәре тарафынан бик күп эҙләнеүҙәр-уйланыуҙар аша өр-яңы мәҡәләләр яҙылды (китаптың яуаплы төҙөүсеһе һәм иң күп мәҡәләләр авторы Айһылыу Сәғитова менән Гөлсәсәк Саламатова). Артабанғы фекерҙәр шул яҙмаларҙан алынды.**



# КҮКРӘҮҘӘРЕН ТОЙОП ЗАМАНДЫҢ,

## йәки Башҡорт театры тарихын күҙҙән үткәреп

**➔ Иң башта бер һорау ҡалҡа: "Башҡорт театры" тигән сәнғәти бейеклек ҡасан һәм кемдәр тарафынан барлыҡҡа килтерелә?**

**Айһылыу Сәғитова:** Милли театр тарихында тәүбашлап профессиональ актер оҫталығы дәрестәре уҡытылған театр бүлеге 1926 йылда Башҡорт музыка техникумында (хәҙерге Өфө сәнғәт училищеһы) асыла. Башҡорт театрының формалашыуына һәм үҫешенә был уҡыу йорто ифрат ҙур йоғонто яһай. Бында дүрт йыл буйы актер оҫталығы дәрестәрендә ғәмәли уйын алымдары, сәхнә теле, бейеү, ритмика, грим, музыкаль белем төшөнсәләре бирелә, донъя театры тарихы уҡытыла. Беренсе педагогтар араһында башҡорт театрына нигеҙ һалыусы Вәлиулла Мортазин-Иманский, режиссер-педагогтар Хажи Бохарский менән Мәкәрим Мәһәҙиевтарҙың эшмәкәрлеге төп урында тора.

Тәүге йылда уҡ театр бүлегендә В. Мортазин-Иманский ҡуйылышында М. Буранғоловтың "Башҡорт туйы" этнографик спектакле өҫтөндә эш башлана. Был студенттар спектакле техникумдың 25 кешелек хоры һәм симфоник оркестры башҡарыуында башҡорт халыҡ йырҙары һәм көйҙәре (И.В. Салтыков төҙөгән гармонизация һәм оркестровка) менән биҙәлеп, 1928 йылдың 2 ғинуарында Хеҙмәт һәм сәнғәт һарайында күрһәтелә. Шул ваҡыттарҙан алып "Башҡорт туйы" дәүләт театры репертуарына алына һәм оҙон-оҙаҡ йылдар буйы милли тамашасының оло һөйөүен һәм зауҡын биләй.

1929 йылдан башлап театр бүлегенең спектаклдәре тураһында гәзит-журналдарҙа хәбәрҙәр күренә башлай, уларҙа берсә әсе тәнҡит уттары тоҡана һәм бәхәстәр ҡуба, берсә һоҡланыу һәм алҡыштар яуа, йәш актерҙарҙың нисек уйнауы, режиссерҙарҙың етди эҙләнеү-табыштары, сәхнә асыштары яҡтыртыла. Шундай уй-хисләр ҡойоно ҡуптарған постановкаларҙың береће Ф. Шиллерҙың "Юлбаҫарҙар"ы (режиссеры Мәкәрим Мәһәҙиев). Һәр образ, һәр деталь, мизансцена, күренеш - дәүер рухын тергеҙеү буйынса ентекле эш. Әҫәр психологик яҡтан тәрән уйлы, хисле романтик спектакль булып етешә.

1929-1930 уҡыу йылындағы тәүге сығарылыштың дипломлы 15 артисы Башҡорт драма театры труппаһына дәррәү инеп китә. Улар араһында Булат Имашев, Вәли Ғәлимов, Зәйтүнә Бикбулатова, Һәҙиә Рафиҡова, Рим Сыртланов, Фатима Нагаева, Ғәмбәрә Мансурова, Әхмәт Садиҡовтар була. Икенсе сығарылыштан килеп ҡушылған артистар - Арыҫлан Мөбәрәков, Мәхмүт Хәбибуллин, Талиға Бикташева, Әклимә Садиҡова, Ғабдулла Шамуҡов, Ғәйшә Абызгилдиналар... Техникум тамамлаусыларҙың бер төркөмө Баймаҡтағы икенсе Башҡорт дәүләт драма театрына, йәнә бер нисәһе Өфөләге Башҡорт дәүләт театрына эшкә алына, ҡайһы бере уҡыуын дауам итергә Мәскәүгә ебәрелә.

Мәһәҙиев менән Мортазин-Иманский икеһе бер төптән егелеп тәрбиәләгән тотош бер шәлкем сағыу драма актерҙары артабан башҡорт театр труппаһының үҙәген тәшкил итә. Йәштәр иненә зыялылыҡ миссияһы ғүмерлек бурыс булып йөкмәтелә: улар актер ғына түгел, ә йәмәғәтсе, ойоштороусы, педагог, мәҙәни ағартыусы булып китә. Мәҫәлән, Вәли Ғәлимов техникумды тамамлағас та Өфөлә эшсе йәштәр Театрын етәкләй. Стәрлетамаҡ ҡалаһында төпләнгән Башҡорт күсмә театрын етәкләүҙе Мортазин-Иманский йәш кенә Арыҫлан Мөбәрәковҡа ышанып тапшыра. Булат Имашев техникумда уҡып йөрөгән сағында уҡ республиканың баш театрында режиссер сифатында спектаклдәр ҡуя. Беренсе һәм икенсе сығарылыштан өс кеше аҙаҡтан СССР-ҙың халыҡ артисы булып китә - улар Зәйтүнә Бикбулатова, Арыҫлан Мөбәрәков, Ғабдулла Шамуҡов. Милли сәхнә ҡото шулай барлыҡҡа килә.

**➔ Башҡорт театры бик ҡаты заман һынауына - 1937 йылғы сәйәси репрессиялар ауына эләгә. Уның эске рухы ҡаҡшамай-емерелмәй ҡалыуы ниндәй шарттарға бәйле?**

**Һөйөндөк Сәйетов:** 1931 йылда уҡ ВКП(б)-ның Башҡорт өлкә комитеты бюроһы "Башҡорт милли театры үҫеше тураһында резолюция" ҡабул итә, ул Башҡорт театрындағы милли тарих һәм милли фольклор менән бәйле ижади образдарға коммунистик һәм партия органдарының емергес ябырылыуының башланғысы булып тора. Башҡорт коммунистары ойошмаһының был резолюцияһы уҙған тормош тарихын һүрәтләгән "Башмағым" комедияһына, "Башҡорт туйы" мелодрамаһына, "Ынйыҡай менән Юлдыҡай" романтик драмаһына - йәмғеһе унарлаған спектаклгә "антихудожестволы", "халтура", "идеологик зарарлылар рәтендә" тигән ҡара мөһөр баҫа. Партияның былдай текемле установкаһын - ҡарарын публицистика эләктереп тә ала, "Театрҙар гәзиттәр кеүек үҫешергә тейеш", тиешеп лаф ора.

...Фажиғәле 1937 йыл башҡорт милли театрының бөтә идея-эстетик нигеҙҙәрен һәм художестволы ысулдарын ҡаты тәнҡит утына ала һәм бигерәк тә социаль-тарихи драмаларҙың художество йөкмәткеһе өсөн ҡан-йән менән түләргә мәжбүр итә. Һәм был дөһшәтле тәнҡит уғата ныҡ "дәлилле" була: милли тарих, традицион мәҙәниәт рухи байлығына таянып, сәнғәттә героик теманы күтәреүсе драматургтар һәм режиссерҙар атылыр алдынан йәки концлагерға оҙатылырҙан алда граждандар язаһына дусар ителә. Власть әһелдәре "Юлдыҡай менән Ынйыҡай" драмаһының авторы шағир Хәбибулла Ғәбитов өҫтөнән тап шундай суд ойоштора. Эшафотҡа алып барып атыр алдынан уны майҙан уртаһына ҡуйып халыҡ алдында тәүбә итергә, яҙғандарынан ваз кисеп, баш тартырға мәжбүр итәләр. Коммунистик тәнҡит ана шулай 1917 йылдан ары - быуат арьяғына киткән, тарих төпкөлөнә боролған милли героик темаларҙы күтәргән спектаклдәрҙә туҡтауһыҙ "утҡа тота".

Рус кинематографының бөйөк режиссеры Я.А. Протазановтың үҙе төшөргән "Салауат Юлаев" фильмында (1939) актерҙар менән эшләүҙән ни өсөн бөтөнләй ситләштерелеүе хаҡында баш ватмай ғына, барыбер бер һорауҙы күтәрге килә: Арыҫлан Мөбәрәковтың кинокартинала төп ролдә нисек башҡарыуы актерҙың театрҙағы спектаклдә уйнауының сағылышы түгелме икән? Арыҫлан Мөбәрәков ғәжәп сағыу актер эше менән үҙен илгә танытҡан һәм бөгөн дә тамашасыны һоҡландырған "Салауат Юлаев" кинофильмы беҙҙең театрҙы вульгарлыҡта ғәйепләгән тәнҡитте бөтөнләй кире ҡаға.

1937 йылдың аҙағында һәм 1938 йылдың башында етемһерәп ҡалған театрҙа художество етәксеһе менән директор урынын биләгән Арыҫлан Мөбәрәков художество ижади эш планын төҙөй һәм труппа алдында башҡорт яҙыусыларының ижади тәҡдимдәрен иғлан итә. Репертуарҙа Б. Бикбай менән Ғ. Сәләмдең "Салауат"ы, М. Ғафуриҙың повесы буйынса Ғ.Әмири менән В.Ғәлимов инсценировкаһы буйынса ҡуйылған "Ҡара йөҙҙәр"е, М. Буранғоловтың "Гөлсәсәк" ("Башҡорт туйы"нан автор варианты) спектаклдәре тора. Ни өсөн был йүнәлештә эште дауам итеүен Арыҫлан Мөбәрәков былай аңлата: "соцреализм сәнғәтендә иҫке темаларҙың, хатта иҫке пьесаларҙың төп идеяһы коммунистик идеалдың барлыҡҡа килеүенең бер моменты тип ҡарала. Совет театры художестволы образ-шәхестең характерын, психологияһын перспективала-киләсәктә буласаҡ революцион эшсе-крәҫтиәндәрҙең героик характеры итеп күрһәтә".

(Дауамы 12-13-сө биттәрҙә).

ИНТЕРНЕТТАН



# БАЛАҢ... тулы кәүҙәлеме?

■ Тулы кәүҙәле балалар тиҫтерҙәренә ҡарағанда яйыраҡ үҫешә, тигән фекергә килгән Төньяҡ Каролина университеты ғалимдары. Ындай балалар һуңыраҡ шыуышырға өйрәнә, һәҙәмтәлә дөйөм организмдың хәрәкәт әүҙемлеге түбәнәйә. Ғалимдар билдәләүенсә, баланың бәләкәй саҡта тулы кәүҙәле булыуы уның артабанғы ауырлығына ла йоғонто яһауы ихтимал.

■ Ҡартайғас еңел аҡыллылыҡ менән яфаланырға теләмәһәгеҙ, йәш саҡтан уҡ сәләмәт тормош алып барығыҙ, тип кәңәш итә Эдинбург университеты ғалимдары. Әгәр ҙә кеше спорт менән шөғөлләнһә, насар ғәҙәттәр менән дуҫ булмаһа, дөрөҫ туҡланһа, был сир менән ауырыу ихтималлығы 20 процентҡа түбәнәйә.

■ Тәмәке тартыу бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ сәләмәтлегенә насар йоғонто яһай. Айова штаты университеты тикшеренеүселәре билдәләүенсә, тәмәке тартыусы ҡатын-ҡыҙҙың уйлау һәләте түбәнәйә. Тест арҙамында ғалимдар баш мейеһе функцияларын тикшерә һәм фекерләү функцияһының боҙолоуын асыҡлай. Был ҡатын-ҡыҙ организмында бүленеп сыҡҡан эстроген гормоны менән бәйле һәм тәмәке ҡанда был матдә концентрацияһының аҙайыуына килтерә.

■ Әгәр ҙә башығыҙ йыш ауырта икән, дарыуханаға барырға ашыҡмағыҙ. Тайвандың милли университеты табиптары белдереүенсә, баш ауыртыуын ябай массаж бөтөрә. Бынан тыш, массаж күңелһеҙ хәлдәрҙә оноторға мөмкинлек бирә. Ғалимдар фекеренсә, массаж депрессияны еңергә лә ярҙам итәсәк.

■ Эҫе көндәрҙә күптәр лимонад менән һыуһынын ҡандырырға күнеккән. Асыҡланыуынса, лимонадтың дауалау үҙенсәлеге лә бар икән. Лимонад составындағы калий цитраты, мәҫәлән, бөйөрҙә таш барлыҡҡа килеүҙән һаҡлай. Был татлы эсемлек антисептик һәм бактериаль үҙенсәлеккә лә эйә. Иң мөһиме, лимонад яҡшы сифатлы булырға тейеш.

■ Тропикта йәшәүселәрҙә склероз сире һирәгерәк осрауы ғалимдар тарафынан күптән иҫбатланған. Мэдисондағы Висконсина университеты белгестәре склероз организмға D витамины етешмәгән осраҡта барлыҡҡа килеүен асыҡлаған. Тимәк, ҡояш был сирҙең барлыҡҡа килеүен туҡтата ала, ти улар.

■ Йөрәк сирлеләр өсөн ҡәһүә файҙалы, тип раҫлай Гарвард медицина мәктәбе ғалимдары. Улар инфаркт кисергән 1300 кешенең һаулыҡ торошона 10 йыл буйы тикшеренеүҙәр алып барған һәм шундай һығымтаға килгән: көнөнә 1-3 сынаяҡ ҡәһүә эскән кеше өсөн инфарктан үлеү хәүефе - өстән бер өлөшкә, ә 5-7 сынаяҡ эскәндәргә яртылашҡа кәмей.

■ Антибиотиктар ҡабул иткән ваҡытта һаҡ булырға кәрәк, тип иҫкәртә Миссуриләғы Медицина мәктәбе университеты белгестәре. Бактиһән, ындай дарыуҙарҙы дөрөҫ ҡулланмау ишетеү һәләтенең насарайыуына килтереүе ихтимал икән. Ғалимдар тикшереүҙәрҙә ике препарат - канамицин һәм уның балалар өсөн тәғәйенләнгән аналогы гентамицин нигеҙендә үткәрә. Был ике препарат та ауырыуҙарға йыш тәғәйенләнә. Табип билдәләгән дозаны 10-20 процентҡа ғына арттырыу ҙа ишетеү һәләтен юғалтыуға килтереүе ихтимал, тигән һығымтаға килә ғалимдар.

ХӘТЕРКИТАП

# КҮКРӘҮҘӘРЕН ТОЙОП ЗАМАНДЫҢ,

## йәки Башҡорт театры тарихын күҙҙән үткәреп



(Башы 11-се биттә).

Ә донъяла Бөйөк Ватан һуғышы бара, һәм кешеләр хеҙмәт батырлығына тиң героик хәрби ҡыйыулыҡ өлгөләргә мохтаж, кешеләр ил ҡаһармандары рухына һыуһаған. Сталин иптәш үҙе, бөтә халыҡты дәррәү күтәрерлек патриотизм ҡеҙрәтен эҙләп, үткән тарихтың арҙаҡлы полководецтары исеменә-иҫтәлегенә мөрәжәғәт итә. "Бөйөк остаз һәм юлбашсы"нан үрнәк алып, Башҡорт академия драма театры әлеге лә баяғы ямanat тағылған әҫәрҙе - Б.Бикбайҙың "Салауат"ын ҡабатлап ҡуя һәм бөтә һуғыш осоро буйына уйнап йөрөй, 1945 йылда ҮК-тың "Башҡорт партия ойошмаһында агитацион-пропаганда эшен яҡшыртыу хәле һәм саралары" тигән ҡарары үтәр өсөн ВКП(б)-ның Башҡорт өлкә комитеты тыйыу һалып ҡуйғансы спектакль сәхнәнән төшмәй.

В.Ғ. Ғәлимов менән Арыҫлан Мөбәрәков режиссураһында ҡуйылған һәм төп ролдәрҙе һуңғы актер менән Ғөбәйҙулла Яҡупов башҡарған спектакль - М. Буранғоловтың "Иҙеүкәй менән Мораҙым" трагедияһы буйынса спектаклдә лә сағыу антифашистик пафос ярылып ята. Спектакль монгол-татар яуына башҡорт халҡының ҡаһармандарса ҡаршы тороуын бик асыҡ һүрәтләй. Ләкин 1946 йылда коммунистик партия ҡарары уға "хандар, батшалар, вельможалар тормошон идеаллаштыра" тигән иҫке ярлыҡ тағып, был пьеса ла оҙаҡ йылдарға сәхнәнән ҡыр тибелә...

...Мәскәүҙәге 1940 йылда уҡ уйланған һәм Бөйөк Ватан һуғышы башланыу сәбәпле алға күсерелгән художестволы смотр - әҙәбиәт һәм сәнғәт декадаһында күрһәтерлек репертуар 1950-1951 йй. театр миҙгелендә яҡынса билдәле була. Мәҫәлән, унда Баязит Бикбайҙың "Салауат" драмаһының ике варианты ла ҡарала, икеһе лә һыҙып ташлана. Тәүге исемлектә булған өс спектакль генә Мәскәүгә барып етә. Былар: "Отелло", "Ваня ағай" һәм "Яңғыҙ ҡайын" (М.Кәрим драмаһын Р.Фәйзи Арыҫлан Мөбәрәковтың художестволы етәкселегендә сәхнәләштерә). "Салауат"ты алмаштырғас, килеп ҡушылған "Кара йөҙҙәр" менән бергә ошо өс спектакль киң йәмәғәтселектең һәм профессионалдарҙың фекерен, Мәскәү режиссерҙары, сәхнә рәссамдары, композиторҙарҙың тәҡдим-консультацияларын алаcаҡ, тейешле һәм кәрәкле тәнҡит-төҙәтмә һүҙҙәрен ишетәсәк. Иллә мәгәр иң юғары ҡаҙаныштарҙың береһе шул: Арыҫлан Мөбәрәковтың Отелло һәм Войницкий ролдәре һүрәтләнгән шәхси афишаларҙы был йылдарҙағы публика алҡыштарға күмәсәк.

**➔ Башҡорт театрының яҡты юлы режиссер Шәүрә Мортазина эшмәкәрлеге менән бәйле. Уның шәхесе көл аҫтындағы ҡуҙҙан терелгән утты хәтерләтә. Театр утын дөрләтеү - Шәүрә Муса ҡыҙы өсөн илаһи бурыс булғанмы?**

**Айһылыу Сәғитова:** 1948 йылда, ГИТИС тамамлағас та, Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрында яңы башлап эшләүсе режиссер Шәүрә Мортазина килә. Яҙмыш ҡушыуы тап шулай: ул театрға нигеҙ һалған шәхес Вәлиулла Мортазин-Иманскийҙың фамилиялаш аҙашы, уның кеүек үк ҡанлы 30-сы йылдарҙа репрессия ҡорбаны булған легендар башҡорт полководецы Муса Мортазиндың ҡыҙы, ул Бөйөк Ватан һуғышынан һуңғы ауыр йылдарҙа башҡорт театрын яңырыу юлына сығарыусы кеше була. Уның ижады актер театрынан режиссер театрына, традицион-ҡәҙимге театрҙан донъяны яңыса яҡтыртыу алымдарына ҡоролған фәлсәфәүи театрға ныҡлы күпер һала. Башҡорт сәхнәһенә режиссер театры принциптарын күсереп, илдәге театр ҡанундарының иң алдынғы ысулдарына таянып, Шәүрә Мортазина художестволы яҡтан бөтөн һәм тулы ҡанлы спектаклдәр ҡуйыуға өлгәшә, образдарҙың тормошсан асылыуын, мизансценаларҙың психологик шартлылыҡҡа тура килеүен, актер кисерештәренең ысынбарлыҡҡа яҡын булыуын алға ҡуя. Донъя, рус, башҡорт һәм башҡа милли репертуарҙа үҙҙәренең сәхнә йәшәйешен тапҡан профессиональ актерҙарҙың тотош бер быуыны тап Шәүрә Мортазина ҡуйған постановкаларҙа үҫеп сыға.

"Башҡорт театрын күтәрергә кәрәк" - Шәүрәнең күңеленә бала сағынан һеңгән атаһының ошо һүҙҙәре уны институт тамамлағас та Өфөгә алып килә. Йәш режиссер ҡыҙ эш башлаған осор айырыуса ауыр һәм ҡатмарлы була, сөнки репрессиялар дауылы башҡорт театрын нигеҙләгән һәм етәкләгән ижади көстәрҙе ҡырып алып, яҡты донъянан юҡ иткән, аслы-туҡлы һуғыш һәм һуғыштан һуңғы йылдар ыҙалары башҡорт театрының үҫешендәге бер бөтөн юлды юйған, етмәһә, һәр ҡайҙа көсәргәнешле ҡурҡыу тулы шомло атмосфера хөкөм һөрә. Спектаклдәрҙә режиссерлыҡ эшенә бер аҙ барымы булған актерҙар ҡуя. Баш ҡалала бына тигән махсус белем алған режиссерҙың труппаға килеүе театрҙа ҙур һөйөнөс һәм өмөт уята.

...Шәүрә Мортазина Башҡорт театры сәхнәһендә 1972 йылға хәтле эшләү дәүерендә йөмгеһе илленән ашыу спектакль сығара, театрҙың бығаса күрелмәгән ижади мөмкинлектәрен аса, ул республиканың мәҙәни һәм сәнғәти күгендә генә түгел, бөтә Советтар илендә яңы заман сәнғәт усағының өлгөһө булып танылa. Шәүрә Муса ҡыҙы шулай уҡ бик һәләтле педагог була. 1964 йылдан 1966 йылға саҡлы ул Өфө сәнғәт училищеһында уҡыта, ә 1968 йылдан 1970 йылға ҡәҙәр күптән түгел генә асылған Өфө дәүләт сәнғәт институтының режиссура һәм актер оҫталығы кафедраһын етәкләй.

Драматургияла Шәүрә Мортазина һәр ваҡыт Чеховса интонацияларҙы эҙләй, ҡайғыларҙан талсыҡҡан күнелде, кәмһетелгән рухтың һыҙланыуын, ҡыйралған бәхет аяныстарын, кешенең үҙ-үҙе һәм башҡалар алдында бурыслы тойоуын күрергә теләй. Академия театрында сирек быуат фиҙаҡәр хеҙмәт итеп, ижади емешле осороноң иң юғары нөктәһенә еткән ваҡытта ул театрҙы ҡалдырырға мәжбүр була. Мортазинаны үҙе "тыуҙырған" геройҙарының яҙмышы көтөп тора. Театрҙа сағыу, ярҙан ярға тулышып аҡҡан ташҡын кеүек ижади эпоха башлана, һәм был яңы дәүерҙең ҡояшын ҡалҡытыусы, яңы театрға нигеҙ һалыусы, актер театрынан режиссер театрына ныҡлы күпер ҡороусы шәхестең исеме һәр кемгә билдәле, ул - РСФСР-ҙың һәм БАССР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, РСФСР-ҙың К.С. Станиславский исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты, бөйөк башҡорт ҡаһарманы Муса Лут улы Мортазиндың ғәзиз балаһы, башҡорт режиссеры Шәүрә Муса ҡыҙы Мортазина.

**➔ Бай һәм күпҡырлы ижади дарьяла - Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ орденлы Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрының тарихында - ифрат тәрән йөкмәткеле, мауыҡтырғыс ваҡиғаларҙан хасил булған бер сағыу дәүернамә бар. Был сәхифә 1959 йылда А.В. Луначарский исемендәге (ГИТИС) дәүләт театр институтының башҡорт студияһын тамамлап, театр труппаһына килеп ҡушылған йәштәр - тотош бер быуын актерҙарҙың эшмәкәрлеге менән бәйле. Ошо йәш ағым бик затлы һәм йәнле булып сыға, хатта шул ҡушылдыҡтың ижади шәхсәнлегенә, сәнғәти эҙләнеүҙәренә һәм табыштарына нигеҙләнеп, артабанғы ике тиҫтә ярым йыл эсендә милли сәхнәнең художество йөҙө яңыса балҡый.**

**Суфия Күсемова:** Бөгөн был быуынды юғары баһалап, ихтирам менән "урта быуын" йәки "гитисcылар" тип йөрөтәләр. Киң ҡолас асып, атайҙарса хәстәрлек менән ҡаршы ала театр студия йәштәрен. Бындағы актерҙарҙың маһирлығы һоҡланғыс һәм көслө була. Сәхнәнән төшмәй уйнаусы А.Мөбәрәков, З.Бикбулатова, Ә.Зөбәйеров, Ғ.Ҡарамышев, Х.Бохарский, Т.Рәшитова, Р.Янбулатова, Ғ.Туҡаев, Р.Сыртлановтар... Ҙур тормош тәжрибәһе булған, сәхнә уйыны тылсымдарын, милли характерҙы сағылдырыу үҙенсәлектәрен, телмәр вәзене нескәлектәрен яҡшы белгән өлкән дуҫтарынан гитиссылар һабаҡ ала. Айырыуса шуныһы мөһим, йәштәрҙәге актерлыҡ һәләтен һәр яҡлап күркәм итеп аса алырҙай ҡыҙыҡлы заманса фекерле, милли ерлектә нығынған режиссураны таба улар театрҙа. Үҙ сиратында гитиссыларҙың ҡайтыуы театрға "яңырыу һулышы өрә", репертуар "йәшәрә", идея-тематик ҡарашы киңәйә, дөйөм сәхнәүи уйын кимәле яҡшыра, сценала актер ансамбле нығына һәм ижади коллективтың башҡа бик күп тарафтары ыңғай үҙгәрештәр кисерә. Гитиссылар академик милли театр сәнғәтенең

иң һәйбәт традицияларын һаҡлай, арттыра бара.

**Айһылыу Сәғитова:** Ул гитиссылар - Гөлли Мөбәрәкова, Илшат Йомағолов, Шамил Рәхмәтуллин, Муллаян Сөйәрғолов, Роза Кәримова, Хәмит Яруллин, Зинира Атнабаева, Әмир Абдразаҡов, Марат Солтанов, Физә Латипова, Фәрдүнә Ҡасимова, Гүзәл менән Хәкимйән Сәғитовтар һәм башҡалар була. Артабан уларҙың һәр ҡайһыһы башҡорт театры үсешенә үҙенең тос ҡабатланмаҫ өлөшөн индерәсәк. Был көслө һәм теремек динамикалы быуын бер нисә тиҫтә йылдар буйы милли сәхнәнең йөҙөн билдәләйәсәк. Уларҙың ижады менән башҡорт театрының яңы дәүере - үсеш баҫҡыстары асыла.

**➔ Башҡорт академия драма театры тарихын яҡтыртып торған йондоҙҙар араһында фильмдарға, романдарға лайыҡ легендар шәхестәр бар. Айырыуса ҡатмарлы дәүер тулҡындары уларҙы бик ныҡ күтәргән һәм упҡынға бәргән. Уларҙы иҫкә алғанда кемдәрҙең исеме телгә килә?**

**Һөйөндөк Сәйетов:** 1937 йылдың 5 октябрендә дәүләт именлеге органдары сираттағы ултырышта башҡорт актеры һәм режиссеры Булат Имашевтың серле тормош юлына иғтибар йүнәлтә... Быға тиклем, сентябрь айы буйы бында театрҙың күренекле исемдәре яңырай: Вәлиулла Мортазин, Мәкәрим Мәһҙиев, Маһибәҙәр Йосопова, Ғәләм Саттаров, Рәфҡәт Фәйзуллин... Уларҙы шунда уҡ, йыйылыштан уҡ НКВД хеҙмәткәрҙәре ҡулға ала... Ғәҙел һәм барыһы ла көн кеүек асыҡ: был кешеләр совет театрына 1917 йылғы революцияға тиклемге, әллә ҡасанғы иҫке театрҙан килеп ингән, тимәк, улар советтарға ҡаршы. Ләкин Булат Имашев? Кисәге ярлы-ялпы балаһы, бөгөнгө күңелсәк берғатлы егет - унда ниндәй буржуйлыҡ булыуы мөмкин? Яҡты, изгелекле, тормошто яратҡан Булат Имашев - ул ниндәй дошман булһын?

Тынды ҡурырлыҡ зәһәр тынлыҡта һәр кем башында ошо һорауҙар ғына ҡайнаны, әрнеүле һиҙенеүҙәрҙән тынлыҡ тамам тонсоҡторғос булып китте. Һәм кинәт дөйөм ләм-мим тел-һеҙ ҡалыуҙы йыртып ҡаты тауыш сыңланы:

- Булат Имашев? Ул нишләп халыҡ дошманы булһын? Ул - бушаҡ бәйләнгән итәктәрҙең дошманы.

Кешеләр бер юлы ғәр итеп көлөп ебәрҙе, һәм дәһшәтле һорау үҙенән-үҙе ябылды. Публика һәр заманда бик "татлы" булған теманы "сәйнәргә" тотондо - кешенең әхлаҡи йөҙө: "Нисәмә йыл буйы режиссер Булат Имашевтың яғынан көнкүрештә боҙоҡлоҡ һәм күп бисәлек факттары булды һәм дауам итә". Йыйылыш ҡаш емереп уны тикшерҙе, әммә ләкин үҙенең һөйөклө кешеләре хаҡына Булат Имашев фажиғәнән ҡотолоп ҡалды...

...Мөхәббәт уның бөтә булмышын биләгәйне шул. Һәр күҙәнәгендә байрам итеп, һөрән һалып йәшәне һөйөү ләззәте. Театрҙа былай ҙа бөтә нәмә күҙ алдында, ә Булат Имашевтың тормош ваҡиғалары бөтә республикаға һөйләнсәләнде. Уны ҡарауыллап йөрөп, мөхәббәт яландарында тоттолар. Уның хаттары ҡулдан-ҡулға йөрөп уҡылды, һәм бөтә кеше афоризмға әйләнгән сихри юлдарҙы ятлап ҡабатланы.

Ул - актер, драма һәм музыка театры режиссеры, театр педагогы һәм театр эшен ойоштороусы. Һәм ул һәр бер өлкәлә ғәләмәт уңышлы, ырамлы эшләгән булдыҡлы зат.

Әле иҫән сағында уҡ, бөтөнләй йәш кенә булыуына ҡарамаҫтан, Булат Имашев теләһә кемдән түгел, ә башҡорт театрына нигеҙ һалыусылар ауыҙынан үҙе хаҡында "милли сәхнәнең баш актеры" тигән һүҙҙәрҙе ишетә. Ун алты йәшендә ул Ырымбурҙағы һәүәҫкәр театрҙа Гамлетты уйнай һәм, Ырымбур БИНО-һындағы (Башҡорт халыҡ мәғарифы институты) өлкән дуҫы, милли сәхнәнең буласаҡ данлыҡлы актрисаһы Таңһылыу Рәшитованың иҫтәлеге буйынса, үҙенең "иҫ киткес бирелеп-онотолоп уйнауын күрһәтә, әйтерһең дә, уға театр ене ҡағылғандай, шашып-ярһып уйнай". Ә ун-ун ике йыл үтеүгә инде Өфөлә милли театр сәхнәһендә, донъя һәм рус драматургияһы менән бергә тәүге башҡорт театраль әҙәбиәтенең күренекле әҫәрҙәренән дә туплаған классика репертуарынан бер нисә ролде уйнап, "Башҡорт театры Качаловы" тигән маҡтаулы исемгә тәрөнә.

Ул үҙ ижад юлын бик иртә башлай шул һәм иртә үлә, был да уның легендар исеменә серле тамғалар өҫтәй. Үлер алдынан уға 38 йәш тула. Ни бары 38, шуларҙың ун һигеҙен ул профессиональ сәнғәткә биргән. Һәм был йылдар оҙон ғүмерле өс кешегә етерлек хеҙмәт емештәрен үҙенә һыйҙырған. Булат Имашевта - яҙмыш, музаны һайлағандарға оҡшаш тәҡдир, бындай юлды бөгөн "йондоҙ ятлыуы" тип нарыҡларҙар ине; әйткәндәй, үҙенең һәләтлектәре менән ул тотош бер йондоҙлоҡҡа торошло.

...Булат Имашевтың ғүмере аңлайышһыҙ бер осраҡ булып, 1946 йылдың ғинуар айында өҙөлә. Уның "Мәргән" спектаклендәгесә, сәхнә тултырып, осоп йөрөп мәргән батырҙы уйнаған һөйкөмлө һәм аҡыллы башҡорт егетен бер күргән кешеләр уны ғүмере буйы онота алмай, хәтерендә һаҡлай.

**➔ Бөгөнгө театрҙа режиссура үҙенсәлектәре ниҙә? Айрат Абушахмановтың яңы режиссерлыҡ эше - Гүзәл Яхинаның "Зөләйха күҙҙәрен аса" романының Ярослава Пулинович инсценировкаһы буйынса спектакль. Был әҫәр ысын мәғәнәһендә быйыл йөҙ йыллығын билдәләгән Башҡорт академия театры дәрәжәһенә лайыҡлы һәм уның эске рухы, образдар саялығы ярылып ята торған сәнғәти көҙгөһө, тип әйтергә мөмкинме?**

**Рида Буранова:** Айрат Абушахманов, моғайын, бөгөнгө башҡорт театрының Рәсәйҙә иң билдәле режиссерылыр. Һәр хәлдә, Башҡорт академия драма театрының "Кәкүк оһы өҫтөнән осҡанда" һәм "Кара йөҙҙәр" спектаклдәре менән ул "Алтын битлек"тең республикала берҙән-бер номинанты. Ул үҙенең йәки башҡаларҙың спектаклдәре буйынса һөйләргә ярата, артистарҙың эшенә һоҡлана йәки аптырана, театр хаҡында фәлсәфәүи йәки шаян-ғибрәти хәбәрҙәргә төшөп китә. Бер заман ул үҙе бик яратҡан Питер Брукты телгә алды: "Театр хаҡында мин бер ауыҙ һүҙ менән әйтә алам, ләкин әгәр ҙә мине туҡтатмаһағыҙ, мин инде мәңге туҡтамай һөйләйәсәкмен". Башҡортостандың халыҡ артисы Әхтәм Абушахмановтың улы Башҡорт драма театрында, уның сәхнә ҡоролмалары араһында йөрөп үҫә. Уның профессиональ юлы Өфө дәүләт сәнғәт институтында билдәле режиссер Рифҡәт Исрафилов курсында уҡыуҙан һәм туған театры сәхнәһендәге тәүге ролдәренән башланыуы һис ғәжәп түгел. Аҙаҡ - ГИТИС-тың режиссер факультеты.

...Абушахманов проза әҫәре менән айырыуса уңышлы эшләй, "Кара йөҙҙәр" , "Кәкүк оһы өҫтөнән осҡанда", "Зөләйха күҙҙәрен аса" уның иң яҡшы спектаклдәре булып ҡала. Материал ни хәтлем ҙур күләмле булған һайын, режиссер шул тиклем иркен сумып, ҡыйыу эшләй.

"Руди - never off..." (2012 йыл) спектакле - Абушахманов үҙе автор булараҡ сығыш яһаған берҙән-бер хеҙмәте. Бындай исемле пьеса юҡ, һәм спектакль Рудольф Нуриев яҙмышын сәхнәүи өйрәнеү-төшөнөү кеүек булып сыға. Репетициялар башлар алдынан актерҙар ҡала буйлап камера менән йөрөп, үтеп барыусы кешеләрҙе туҡтата һәм бер генә һорау бирә: "Ә һеҙ Рудольф Нуриевты беләһегеҙме?" Өфө халҡының яуаптары спектаклгә ингән, һәм сәхнәлә ҡуйылған экрандан күренә.

Яңы ижади асыштар зарурлығы режиссерҙы Олжас Жанайдаровтың 1930 йылдарҙағы Ҡаҙағстандағы йотто һүрәтләгән пьесаһы буйынса "Джут" драмаһына алып килә. Театрҙың баш рәссамы Альберт Нестеровтың, Айрат Абушахмановтың тәйән ижади арҡадашының эше йәнә көн ҡаҙағына һуҡҡан теүәллеге менән ғәжәпкә ҡалдырҙы.

Провинциализм-тәпкөллөк тойғоһон еңергә - амбициоз-ынтымат рәсәмдың иң төп маҡсаттарының береһе был. Ул бөтә көсөн һалып Башҡорт академия драма театрын традицион милли театр сиктәренән сығармаҡ була. Заман театрының үсеш тенденцияһын - ынтылыш-йүнәлештәрен бик иғтибарлап күҙәтеп бара, һәр төрлө бөтә Рәсәй йә Халыҡ-ара режиссер лабораторияларында ҡатнаша, форумдарҙа һәм фестивалдәргә йыш йөрөй. Ул эшләүҙән, үсештән туҡтамай, башҡорт режиссерын постановкалар ҡуйырға әленән-әле Татарстан, Ҡаҙағстан һәм башҡа региондар саҡырып тора. Уның спектаклдәренән традицион нигеҙенә заманса театр элементтары уңышлы ҡатлана. Хәтерҙә, бынан ун йыл әүәл Абушахманов былай тине: "Мине спектаклдәремә ҡарап таныуҙарын теләмәйем. Улар төрлө булырға тейеш. Мин ҡабатланмаҫҡа тырышасаҡмын". Был яҙатайым ғына һүҙ "Кәкүк оһы өҫтөнән осҡанда" репетицияһы мәлендә генә әйтеп ысҡындырған фраза режиссерҙың үҙенә биргән иң теүәл характеристика-ҡылыҡһырламаһы булып сыҡты. Ул үҙен әүәләнеп-бешегеп бөткән, тамам эш мәнеһен белеп бөтөп, ныҡына ултырған тәртипкә ултырған режиссер почерғы булған ижади шәхес, тип һанамай, өҙләкһеҙ эҙләнеүҙәр үҙен эҙләүҙәр, үҙ геройын һәм стилен юллауҙы дауам итә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Театр белгестәре һәм күҙәтеүселәре өсөн М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры спектаклдәре, актерҙары, режиссерҙары һәр ваҡыт ифрат ҡыҙыҡлы, мәғәнәле асыштар донъяһы. Театрҙың йөҙ йыллығы уңайынан улар ҙур күләмле тарихи-эҙләнеү китабы яҙып бүләк итте, башҡорт һәм рус телдәрендә донъя күргән баҫманың әһәмиәте бик ҙур: ул милли театрға тәрән хөрмәт, аяулы һәм хәстәрле, өмөтлө һәм мөхәббәтле ҡараш менән яҙылған. Башҡортостан театр белгестәренең мәҡәләләрен русанан башҡортсаға ауҙарған мәлдә мин дә уларҙың тәрән киҫерештәрен, ихлас тулҡынланыуын асыҡ һиҙҙем. Бер ҡасан да бер кем дә күрмәгән шәхси фотолар, архив һәм музей документтары, иҫтәлектәр, мәҡәләләр тупланмаһы - Башҡортостан Республикаһы сәнғәтенең йөҙөк ҡашы булған оло театрға юбилей бүләге генә түгел, мөҡәддәҫ ижад йорто хаҡында бөтә халыҡҡа бәйән итеүсе йылъяҙма ла ул.**

**Сәрүәр СУРИНА,**
**драматург, тәржемәсе.**

---

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

Джустин Гласс үҙенең аныҡ, ентекле һәм фәнни нигеҙләнгән оҙаҡ йәшәү программаһын тәҡдим итә: хәрәкәт һәм мускулдарҙың күнегеүе; дөрөҫ итеп тын алыу; рациональ туҡланыу; психик һәм физик торолштоң үҙара бәйләнеше.

Лондондан доктор Кристоферсон шундай ҡыйыу фекер әйтә: "Әгәр организм йәшәү өсөү кәрәк булған барлыҡ матдәләр менән тәьмин ителһә, кеше 300, 400, хатта 1000 йыл йәшәй ала". Әйткәндәй, бик күп диетологтар ғүмер оҙонлоғон рациональ туҡланыу иҫәбенә арттырырға мөмкин, тип иҫәпләй. Был бөтөнләй көнөнә даими рәүештә өс тапҡыр: туҡлыҡлы иртәнге аш, төрлө ризыҡтарҙан торған тәмле төшкө аш һәм шундай уҡ киске аш ашау тигәнде аңлатмай.

Туҡлыҡлы һәм тәмле файҙалы тигәнде аңлатмай әле. Рациональ туҡланыу - организмдың кәрәкле матдәләр: аҡһым, майҙар, углеводтар, витаминдар һәм минералдар менән тәьмин ителеүе ул. Шуныһы ла бар: продукттар яңы ғына эшләнгән йәки йыйылған, һаҡлау ваҡыты ҡыҫҡа булырға тейеш. Дөрөҫ, витаминлы туҡланыу аша бик күп етди сирҙәрҙе дауаларға мөмкин. Билдәле инглиз табибы, доктор Уоллок үҙенең кеше организмы өсөн файҙалы витаминдар һәм минералдар тураһындағы популяр лекцияларында: "Бик йыш осраҡтарҙа кеше организмға тимер, еҙ, магний, калий, йәғни мотлаҡ кәрәкле минералдарҙың балансы булмауы һәҙәмтәһендә үлә", - ти.

## Мускулдарҙы артыҡ көсөргәнештән һаҡлағыҙ

Тормош нигеҙе хәрәкәт булыуы һәр кемгә билдәле. Һәр ерҙә беҙгә: хәрәкәтлән, хәрәкәтлән, хәрәкәтлән, тиҙәр. Ваҡытынан алда ҡартайыу - тәү сиратта мускулдарҙың бәлтерәүе ул. Шуға күрә уларҙы дөрөҫ файҙаланырға, күнектерергә кәрәк. Хәрәкәт һәм мускулдарҙың күнегеүе - йәшлек һәм сәләмәтлек сығанағы. Тап мускулдар тәндә һомғол итә, ҡорһаҡтағы май ҡатламын бөтөрә, муйындағы йыйырсыҡтарҙы шымарта, икенсе эйәкте юҡҡа сығара һәм бит тиреһен шыма һәм һығылмалы итә. Мускулдарҙың сыҙамлылығы уларҙың тығыҙлығына һәм һығылмалылығына бәйле. Әммә, мускулдарҙы күнектереп, уларҙы артыҡ арытырға һәм көсөргәнештә тоторға ярамағанлығын да онотмағыҙ.

Үкенескә күрә, күпселек халыҡ теләһә ниндәй физик көсөргәнеште күҙаллағанда, эшләгәс, күҙҙәр маңлайға менгәнсе эшләргә кәрәк, тип уйлай. Бигерәк тә был ир-атҡа хас. Улар, ысынлап та, мускулдарын йомшарта белмәй. Ял иткәндә лә, хатта төнгөн йоҡлағанда ла. Шуға күрә, иртән уянғанда үҙҙәрен тукмалғандай хис итә һәм эске бушлыҡ тоя. Өҫтәүенә, төрлө сәбәптәр арҡаһында йоҡларға һуң ятырға, иртән эшкә таң менән торорға тура килһә, хроник рәүештә йоҡо туймай башлай. Ә кеше кәм тигәндә 8 сәғәт йоҡларға тейешлеге һәр кемгә мәғлүм. Шуға күрә, ҡаты, сәләмәт йоҡо, йоҡо туйҙыра алыу һәм белеү - ғүмерҙе оҙайтыуҙың мотлаҡ шарты.

**С. КУЗИНА.**
**(Дауамы бар).**



### 2 ДЕКАБРЯ
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 17.00, 2.05, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30, 1.00 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30, 22.25 Т/с Премьера. "Тест на беременность". Новый сезон. [16+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]
0.00 Познер. [16+]

### РОССИЯ 1
05.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 Кто против? [12+]
17.25 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "Тайны следствия-18". [12+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Т/с "Личное дело". [16+]
03.50 Т/с "По горячим следам". [12+]

### БСТ
**7.00, 9.15 Сәләм.**
**9.00, 16.00, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00, 16.30 Т/с "Метод Фрейда-2". [16+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.[12+]**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00, 17.45 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**18.00 Ради добра. [6+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Йокерит" (Хельсинки).**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Теге өсәү! [12+]**
**23.30 Күстәнәс. [12+]**
**0.00 Х/ф "Примадонна". Новости (на баш. яз.). [16+]**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**3.30 Спектакль "Любви все возрасты покорны". [12+]**
**5.15 Орнамент. [6+]**
**5.30 Наука 102. [12+]**
**6.00 Историческая среда. [12+]**

### 3 ДЕКАБРЯ
### ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 17.00, 2.05, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30, 1.00 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30, 22.25 Т/с Премьера. "Тест на беременность". Новый сезон. [16+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]
23.55 Премьера. "Право на справедливость". [16+]

### РОССИЯ 1
05.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 Кто против? [12+]
17.25 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "Тайны следствия-18". [12+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Т/с "Личное дело". [16+]
03.50 Т/с "По горячим следам". [12+]

### БСТ
**7.00 Сәләм.**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Метод Фрейда-2". [16+]**
**11.15 Республика Live. #Дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.[12+]**
**14.30 Дорога к храму. [0+]**
**15.00, 17.45 Интервью. [12+]**
**15.15 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**18.00 Д/ф "Кукла". [12+]**
**18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Трактор" (Челябинск).**
**22.00 По сути дела... [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Добро пожаловать в джунгли". [12+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Убей меня, голубчик". [12+]**
**4.45 Ете егет. [12+]**
**5.30 Наука 102. [12+]**
6.00 Историческая среда. [12+]

### 4 ДЕКАБРЯ
### СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 17.00, 1.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30, 0.00 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30, 22.25 Т/с Премьера. "Тест на беременность". Новый сезон. [16+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]

### РОССИЯ 1
05.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 Кто против? [12+]
17.25 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "Тайны следствия-18". [12+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Т/с "Личное дело". [16+]
03.50 Т/с "По горячим следам". [12+]

### БСТ
**7.00 Сәләм.**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Метод Фрейда-2". [16+]**
**11.15 По сути дела... [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.[12+]**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бала-саға. [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**18.00 Ты можешь! [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.45 Честно говоря. [12+]**
**22.00, 6.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Ете егет. [12+]**
**23.45 Земляки. [12+]**
**0.00 Х/ф "Любовь и слава". Новости (на баш. яз.). [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Коварная любовь". [12+]**
**4.30 Автограф. [12+]**
**5.15 Орнамент. [6+]**
**5.30 Наука 102. [12+]**

### 5 ДЕКАБРЯ
### ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 17.00, 1.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30, 0.00 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30, 22.25 Т/с Премьера. "Тест на беременность". Новый сезон. [16+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]

### РОССИЯ 1
05.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 Кто против? [12+]
17.25 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "Тайны следствия-18". [12+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Т/с "Личное дело". [16+]
03.50 Т/с "По горячим следам". [12+]

### БСТ
**7.00 Сәләм.**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Метод Фрейда-2". [16+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.[12+]**
**14.30, 5.15 Земляки. [12+]**
**14.45 Ради добра. [6+]**
**15.00, 17.45 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**18.00 Учим башкирский язык. [12+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Металлург" (Магнитогорск).**
**22.00 Республика Live. #Дома. [12+]**
**23.00 "Песня года". [12+]**
**23.30 Автограф. [12+]**
**0.15 Х/ф "Кенау". Новости (на баш. яз.). [16+]**
**2.45 Бәхетнамә. [12+]**
**3.30 Спектакль "Лекарство от смерти". [12+]**
**5.30 Наука 102. [12+]**
**6.00 Историческая среда. [12+]**

### 6 ДЕКАБРЯ
### ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 17.00 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.40 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Голос". Новый сезон. [12+]
23.20 Вечерний Ургант. [16+]
0.15 Х/ф "Соглядатай". [12+]
2.15 "Горячий лед". Фигурное катание. Финал Гран-при-2019. Женщины. Короткая программа. Турин. Алина Загитова, Александра Трусова, Анна Щербакова, Алена Косторная. [0+]
4.00 Про любовь. [16+]
4.50 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1
05.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 Кто против? [12+]
17.25 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "Тайны следствия-18". [12+]
01.30 Х/ф "Напрасная жертва". [12+]
03.10 Х/ф "Спитак". [16+]

### БСТ
**7.00 Сәләм.**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Д/ф "Искать - значит помнить!" [12+]**
**11.15, 18.00 "Йома". [0+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00, 22.00 Точка Z. [12+]**
**12.30, 21.00 Башҡорттар. [6+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.00, 3.45 Йөрәк һүҙе. [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Алтын тирмә. [0+]**
**16.15 Гора новостей.**
**16.30 "Детей много не бывает". [0+]**
**17.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**19.00 "Башҡорт йыры" представляет... [12+]**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.30 Квартирник. [12+]**
**0.15 Х/ф "Отчаянный побег". Новости (на баш. яз.). [16+]**
**2.00 Спектакль "Кадриль". [12+]**
**4.00 Д/ф "Млечный путь". [12+]**
**5.00 Х/ф "Отчаянный побег". [16+]**

### 7 ДЕКАБРЯ
### СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "Открытие Китая" с Евгением Колесовым. [12+]
11.15, 3.50 Наедине со всеми. [16+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Х/ф "Жестокий романс". [12+]
15.00 Д/ф "Алла Пугачева. И это все о ней..." [16+]
17.25 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
19.00 Сегодня вечером. [16+]
21.00 Время.
21.20 "Что? Где? Когда?" Зимняя серия игр. [16+]
22.35 Х/ф "Большие надежды". [16+]
0.30 "Горячий лед". Фигурное катание. Финал Гран-при-2019. Женщины. Произвольная программа. Турин. Алина Загитова, Александра Трусова, Анна Щербакова, Алена Косторная. Прямой эфир из Италии.
1.50 Бокс. Э. Джошуа - Э. Руис. Бой за титул чемпиона мира. Прямой эфир. [12+]
3.00 Про любовь. [16+]

### РОССИЯ 1
05.00 Утро России. Суббота.
08.15 По секрету всему свету.
8.40 Местное время. Суббота. [12+]
09.20 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
13.50 Х/ф "Привет от аиста". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Дорогая подруга". [12+]
01.10 Х/ф "Моя мама против". [12+]

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 Ты можешь! [12+]**
**9.15 Посмотрим... [6+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 Преград.net. [6+]**
**10.30 Сыйырсык. [0+]**
**10.45 "Тамыр селтәре". [6+]**
**11.15 Байтус. [6+]**
**11.30 "Асылташ". [6+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30 Ете егет. [12+]**
**13.15 Земляки. [12+]**
**13.30 Хазина о Хазине. [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Концерт. [12+]**
**17.45 Бизнес-обзор. [12+]**
**18.00 Юристы-2019. Альма-матер-70. [12+]**
**19.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 Ради добра. [6+]**
**20.30 "Байыҡ" представляет... [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 1.45 Итоги недели (на баш. яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры" представляет... [12+]**
**0.00 Х/ф "Право на надежду". [16+]**
**2.30 Спектакль "Дальше тишина..." [12+]**
**5.00 Д/ф "Млечный путь". [12+]**
**5.45 Д/ф "Искать - значит помнить!" [12+]**

### 8 ДЕКАБРЯ
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00, 6.10 Х/ф "Старомодная комедия". [12+]
6.00, 10.00 Новости.
7.00 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.45 Часовой. [12+]
8.15 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Жизнь других. [12+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.35 Д/с "Романовы". [12+]
15.35 Лыжные гонки. Кубок мира-2019-2020. Мужчины. Эстафета. Прямой эфир из Норвегии.
17.00 "Горячий лед". Фигурное катание. Финал Гран-при-2019. Женщины. Произвольная программа. Турин. Алина Загитова, Александра Трусова, Анна Щербакова, Алена Косторная. Трансляция из Италии. [0+]
19.25 "Лучше всех!" Новый сезон. [0+]
21.00 Время.
22.00 Большая игра. [16+]
23.45 Д/ф Премьера. "Хранитель". К 75-летию Михаила Пиотровского. [12+]
0.50 "Горячий лед". Фигурное катание. Финал Гран-при-2019. Показательные выступления. Турин. Алина Загитова, Александра Трусова, Анна Щербакова, Алена Косторная. Трансляция из Италии. [0+]
2.15 Х/ф "На обочине". [16+]

### РОССИЯ 1
04.45 Сам себе режиссёр.
05.25 Х/ф "Опасный возраст". [12+]
07.20 Семейные каникулы.
07.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.00 Утренняя почта.
08.40 Местное время. Воскресенье.
09.20 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.20 Аншлаг и Компания. [16+]
14.25 Х/ф "Добежать до себя". [12+]
18.20 Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов "Синяя Птица".
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
00.30 "Действующие лица с Наилей Аскер-заде". [12+]
01.30 Х/ф "Сердце без замка". [12+]
03.40 Т/с "Гражданин начальник". [16+]

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 Моя вершина. [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТек?!" [6+]**
**10.30 "Детей много не бывает". [0+]**
**11.00 "Сулпылар". [0+]**
**11.30 Гора новостей. [6+]**
**11.45 Бирешмә. Профи. [12+]**
**12.15 Мустаевские чтения. [0+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 Алтын тирмә. [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.30 Башҡорттар. [6+]**
**16.00 Дорога к храму. [0+]**
**16.30, 5.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 Автограф. [12+]**
**17.30 Полезные новости. [12+]**
**17.45, 22.30 Республика Live. #Дома. [12+]**
**18.15 Ты можешь! [12+]**
**18.50 Хоккей. КХЛ. "Нефтехимик" (Нижнекамск) - "Салават Юлаев" (Уфа). [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**22.45 "Красная кнопка". [16+]**
**23.30 "Байыҡ" представляет... [12+]**
**0.30 Х/ф "Презумпция вины". [16+]**
**2.00 Спектакль "Эти свободные бабочки". [12+]**
**4.45 Д/ф "Млечный путь". [12+]**

*✓ Барлыҡ никахтар ҙа күңелһеҙ тамамлана тип уйлаусыларҙы мин аңламайым. Миңә ҡалһа, биш никахымдың барыһы ла уңышлы булды.*
*(Питер де Врайз).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БАШҠОРТ АКАДЕМИЯ ДРАМА ТЕАТРЫНА - 100 ЙЫЛ!




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**47-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Сиҙәм. Урмансы. Әҙәби. Ғаилә. Гәзит. Квадрат. Халыҡ. Олтан. Әтәлге. Ант. Әсә. Ҡараҡ. Наза. Аҡыл. Балыҡ. Ваҡыт. Ваза. Араҡы. Ҡумта. Радикал. Тимеров.

**Вертикаль буйынса:** Хәсәнов. Ғәлина. Аҡ. Ҡарт. Ата. Урал. Рекрут. Әкиәт. Сәмсә. Әхлаҡ. Ыҡ. Ике. Әбделмәнов. Абаға. "Мцыри". Лев. ГТО. Ҡабаҡ. Лупа. Арҡа. Тин. Ҡаҡма.

КӘҢӘШ-ТӨҢӘШ

# ҠАН ТАМЫРҘАРЫН ТАҘАРТ

**Умыртҡаның муйын өлөшө зарарланып ауыртҡанда һәм остеохондроз менән яфаланғанда баш мейеһендә лә ҡан әйләнеше боҙола һәм ул тейешенсә туҡлана алмай. Шуның өсөн баш мейеһенең ҡан тамырҙарын таҙартып алыу кәрәк. Быны халыҡ дауалау сараларын ҡулланып өй шарттарында ла эшләргә була.**

1. Берәр стакан һуған һәм лимон һутын бергә ҡушып болғатығыҙ ҙа ашар алдынан көнөнә өс тапҡыр 2-шәр сәй ҡалағы ашағыҙ. Дауаланыу курсы - 3 ай. Тамырҙарҙы таҙартыу менән бергә был состав организмды нығытыусы өҫтәмә үҙенсәлектәргә лә эйә.

2. 10 г онталған дегәнәк тамырын кистән термосҡа һалып, өҫтөнә ҡайнар һыу ҡойоғоҙ ҙа иртән ас ҡарынға 5-6 аш ҡалағы эсегеҙ һәм шулай ике ай буйына дауам итегеҙ. Ике аҙна туҡтатып торғас, дауалау курсын яңынан ҡабатлағыҙ. Был сирләләр өсөн генә түгел, ә көн оҙоно ултырып эшләргә мәжбүр кешеләр өсөн яҡшы профилактик сара.

3. Анар (гранат) һутын йышыраҡ эсергә, балан, миләш емештәре ашарға, шулай уҡ алма, кишер һуттары эсергә тырышығыҙ.

# ШӘП СӘЙ!

**Был сәй көнсығыш медицинаһында йыш ҡулланыла һәм, ысынлап та, бик күп сирҙән дауалай, тиҙәр. Шул иҫәптән, организмды шлактарҙан таҙарта, паразиттарҙы юҡ итә. Сәй биш төрлө ҡатнашманан тора:**

1. Куркума (ялҡынһыныуҙарға, яман шешкә ҡаршы дауа, йөрәккә файҙалы).

2. Имбир ( аш һеңдереүҙе көйләй, баш ауыртыуҙы баҫа; куркума кеүек үк ялҡынһыныуҙарға, яман шешкә ҡаршы дауа).

3. Дәрсен (корица, Азия илдәрендә уны ҡандағы шәкәр кимәлен кәметеү өсөн ҡулланалар; йоғошло ауырыуҙарға, һалҡын тейгәндә, грипп һәм йүткереүгә ҡаршы файҙаланалар).

4. Кардамон ( тәбиғи ысул менән ҡан тамырҙарындағы төйөр - тромбаларҙы бөтөрөүҙә фәҡәт кардамон файҙаланыла. Ә был иһә артериялар юлын таҙартып, организмда ҡан әйләнешен яҡшырта. Ул шулай уҡ бөйөрҙәрҙе таҙарта).

5. Бал ( уның файҙаһы хаҡында һөйләп тороу ҙа кәрәкмәйҙер. Сәйҙе тәмләндерә, организмға көс бирә, иммунитетты нығыта).

Шифалы сәй өсөн яртышар ҡалаҡ имбир менән дәрсен, 1/6 ҡалаҡ куркума, 1 семтем кардамон, 500 мл һыу, 1 балғалаҡ бал кәрәк. Ҡатнашмаларҙы әкрен генә итеп ҡайнатылған һауға һалып, 5-10 минут ҡайнатырға ла 10-15 минут һыуытып алғас, бал өҫтәргә. Көн һайын иртәнсәк ошо сәйҙе эсһәгеҙ, сәләмәт булырһығыҙ.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1441 һижри йыл.*

| Декабрь (Рабигел ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 2 (5) дүшәмбе | 7:49 | 9:19 | 13:30 | 15:21 | 16:51 | 18:21 |
| 3 (6) шишәмбе | 7:50 | 9:20 | 13:30 | 15:20 | 16:50 | 18:20 |
| 4 (7) шаршамбы | 7:52 | 9:22 | 13:30 | 15:20 | 16:50 | 18:20 |
| 5 (8) кесе йома | 7:53 | 9:23 | 13:30 | 15:19 | 16:49 | 18:19 |
| 6 (9) йома | 7:55 | 9:25 | 13:30 | 15:18 | 16:48 | 18:18 |
| 7 (10) шәмбе | 7:56 | 9:26 | 13:30 | 15:18 | 16:48 | 18:18 |
| 8 (11) йәкшәмбе | 7:57 | 9:27 | 13:30 | 15:17 | 16:47 | 18:17 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**4 декабрь** Театрҙың 100 йыллығына арналған юбилей кисәһе. 12+

**5 декабрь "Эҙләнем, бәгерем, һине..."** (Т. Миңнуллин), мелодрама. 12+

**6 декабрь "Бомба"** (С. Әбүзәр), комедия-фарс 16+

**7 декабрь "Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтғәлиева), лирик комедия. 18.00 12+

**8 декабрь "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия. 18.00 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**6 декабрь "Йәшәгән, ти..."** (М. Ладо), драмеди. 16+

**7 декабрь "Ханума"** (А. Цагарели), музыкаль комедия. 12+

**8 декабрь "Чиполлино"** (Д. Родари), мажара. 12.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**4 декабрь "Уралтау моңдары"** концерт программаһында башҡорт халыҡ моңдары. 6+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**7 декабрь "Волшебник изумрудного города"** (А. Волков) 12.00, 14.00 0+

**"Что такое Новый год?"** (В. Щербакова) 16.00 0+

**8 декабрь "Муха-Цокотуха"** (И. Романов) 12.00, 14.00 0+

**"Что такое Новый год?"** (В. Щербакова) 16.00 0+

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ӘЛДӘ "ЮЛДАШ" БАР



**Республика халҡын иртә таңдан кискә ҡәҙәр үҙ йыр-моңона сорнап, туған телдә һөйләп торған "Юлдаш" радиоһының сираттағы ҙур концерты баш ҡаланың "Башҡортостан" дәүләт концерт залында үтте. "Юлдаш Хит-2019" тамашаһы алыҫ араларҙы яҡынайтып, республиканың төрлө төбәктәренән килгән йөҙәрләгән тамашасыларын моңло тауыштар, "Теге өсәү"ҙең тапҡыр шаяртыуҙары, шәп бүләктәре менән ҡыуандырҙы.**

"Юлдаш Хит-2019" йылдың иң сағыу йырҙарын һәм йырсыларын радио тыңлаусылар биргән тауыштарға ярашлы билдәләне. Халыҡ күңеленә яткан утыҙ композиция араһында оло йәштәгеләр яратып тыңлаған ретро йырҙар ҙа, йәштәргә яҡын замансалары ла яңғыраны. Апрель айының хит-парадында иң юғары баҫҡысҡа "Арғымаҡ" төркөмө һәм Дәүләкән районының "Әхирәттәр" вокаль ансамбле башҡарыуындағы "Бибирәхилә" йыры күтәрелгән булған икән. Уларҙың сығышы халыҡсанлығы, ихласлығы менән тағы бер ҡат тамашасыны кинәндерҙе. Радио тыңлаусылар шулай уҡ моңло тауышлы Флүрә Үҙәнбаева, Заһир Исәнсурин, Айгиз Ханов, Диана Ишниязова, Фәрүәз Урманшин, Азамат Тимеров, Алһыу Бәхтиева һәм уның улы Азамат Урманшин, Айҙар Ғәлимов ижадын юғары баһалаған. Шулай уҡ радио тыңлаусылар теләге менән фестиваль сәхнәһенә сығарылған Башҡортостандың халыҡ артисы Фидан Ғафаров башҡарыуында Заһир йыры, Башҡорт опера һәм балет театры артисы Иҙел Аралбаевтың Салауат арияһы, Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе артисы Рафиҡ Хәсәновтың Мәрәһим йыры, М. Кәрим исемендәге Йәштәр театры артисы Гөлсөм Бикбулатованың Ғилмияза йыры милләттәштәр яратып йөрөгән спектаклдәр геройҙарын хәтергә төшөрөп кенә ҡалманы, бындай йырҙарҙың бер көнлөк түгел, ә һәр быуын кешеләренең дә күңеленә үтеп инер, оҙаҡҡа хәтерендә ҡалыр моң даръяһы икәнен раҫланы.

Шулай итеп, кисәлә яңғыраған утыҙ йыр һәм уның башҡарыусылары "Юлдаш Хит-2019" фестиваленең лауреаттары исеменә лайыҡ булды. Ә бына "Юлдаш Хит-2019" фестиваленең "Йыл аранжировкаһы" номинацияһында - Илдус Дәүләтов, "Иң моңло йырҙар авторы" номинацияһында Юлай Үҙәнбаев еңеүсе тип табылды. Фестиваль сиктәрендә беренсе тапҡыр тапшырылған "Йыл шағирәһе" исеме бик күп популяр йыр юлдары авторы Зөһрә Ҡотлогилдинаға бирелде.

- Иртәнге сәғәттәрҙән алып "Юлдаш" радиоһын тыңларға өйрәнгәнбеҙ, уның менән бергә уянабыҙ. Өс егеттең тауышын ишетмәһәң, көнө буйы көйһөҙләнеп йөрөйһөң, - ти тамашасы, Башҡорт дәүләт медицина университеты педагогы Флориса Мусина. - Бына әле Венер Камалов йырланы, уны беҙ радио аша ла тыңлайбыҙ, "Башҡорт юлдаш телевидениеһы"ндағы "Тәмле" тапшырыуынан да яратып ҡарайбыҙ. Ә Фидан Ғафаров башҡарған Заһир йыры беҙ бала саҡтан ишетеп, тыңлап үҫкән йырҙарҙың береһе. Элек драма театрының һәр спектакленә транспорт туҡталышынан алып билет эҙләп, ҡулдан һатып алып, сират тороп йөрөй инек. Шул осор йырҙары менән бергә матур хәтирәләрҙе яңыртҡаны өсөн дә "Юлдаш" радиоһына рәхмәтлемен. Флориса Сабирьян ҡыҙының һүҙҙәрен Өфө ҡалаһынан тағы бер радио тыңлаусы Рәйлә Ишемйәрова ла хупланы һәм халыҡтың рухын, дәртен күтәрерлек йөкмәткеле тапшырыуҙар, мәғәнәле һәм моңло йырҙар яңғыратҡан "Юлдаш" радиоһы хеҙмәткәрҙәренә оло рәхмәттәрен белдерҙе. Алыҫ араларҙы яҡынайтып, республиканың төрлө төбәктәренән, хатта алыҫ Баймаҡ, Хәйбулла райондарынан "Юлдаш Хит-2019" фестиваленә килеп еткән тоғро тыңлаусыларҙың барыһы ла тамашанан күтәренке кәйеф, дәрт-дарман туплап ҡайтты.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Юлдаш" радиоһы киләһе йыл үҙенең 20 йыллыҡ юбилейын билдәләйәсәк. Ошо йылдар эсендә ул һәр башҡорттоң айырылғыһыҙ моңдаш дуҫына әүерелгән һәм киләсәктә лә үҙенең йырын йырлап, тарих арбаһында барырлыҡ булған халыҡтың аһәңле моңон бар донъяға ишеттереп эшләгән үҙәк булып ҡалһын.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

*ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ*

## Сәмситләү

Ҡуҡырайыбыраҡ, маһайыңҡырап йөрөгән кешеләргә төрттөрөбөрәк ҡалырға ла тартынмай ине әсәйем. Мәҫәлән, "Һай, кейәү, атҡа мендерҙеләрме әллә һине? Түбәң күккә тейгән...", "Ыста, еңгәй, билең ауыртамәллә? Саңҡайып киткәнһең...". Аҙаҡ үҙе: "Сәмситләп киттем әле шуны. Аңлаһа - аңлар, аңламаһа - юҡ, әҙәм көлдөрөп йөрөмәһен",- тип көлөр ине. Тимәк, һауалы кешеләрҙән көлөү, уларҙы тәнҡитләү өсөн әсәйемдең үҙ алымы булған.

## "Ҡолон майың өҫтөңдә"

Йәшләй тол ҡалған йәки айырылышҡан ир йә ҡатындар менән әңгәмәләшкән сағында ла халыҡ әйтемдәрен, борондан ҡалған һүҙҙәрҙе йыш ҡулланды әсәйем. Әйтәйек, апайым өс бала менән 30 ғына йәшендә тол ҡалып, буҫығып-буҫығып илағанында: "Ҡуй, Фәриҙә, улай бөтөрөнмә. Ер бауыры һалҡын, онотороһоң. Үҙеңдең дә ҡолон майың өҫтөңдә әле - балаларға атай, үҙеңә тиң булырҙай берәйһе табылыр, сабыр итәйек", - тип, әҙәпле генә йыуатыр булды. "Ҡолон майың өҫтөңдә", тигәне "Йәшһең әле", тип әйтеүе булғандыр инде.

**Мотал РӘМОВ,**
**Йылайыр районы.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ЯМАНДЫ - ТАЯҠ,

### яҡшыны һүҙ үлтерә

Тал сағында бөгөлмәһәң, таяҡ сағында бөгөлмәҫһең.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Был ресторан гел тулы булғанға унда бер кем йөрөмәй.

**(Йоги Берра).**

Күп кешеләр өсөн төҙәлеү - ул етешһеҙлектәрен алмаштырыу ғына.

**(Вольтер).**

Был хеҙмәтемде мин Леонор исемле ҡыҙыма бағышлайым. Уның ярҙам, дәртләндереүҙәре булмаһа, китабымды ике тапҡырға тиҙерәк яҙып бөтөр инем.

**(Пелем Вудхауз).**

Көсһөҙ бер ҡасан да ғәфү итмәй. Ғәфү итеү тик көслөләргә генә хас.

**(Махатма Ганди).**

Үҙеңде бәхетле булған кеүек тот, һәм ысынлап та бәхетлерәк булып китерһең.

**(Дейл Карнеги).**

Барлыҡ никахтар ҙа күңелһеҙ тамамлана тип уйлаусыларҙы мин аңламайым. Миңә ҡалһа, биш никахымдың барыһы ла уңышлы булды.

**(Питер де Врайз).**

Коллега: аңлашылмаған сәбәптәр буйынса һеҙҙең менән бер ерҙә эшләгән һәләтһеҙ субъект.

**(Пьер Данинос).**

Йомарт булыу - ул биреп булғандан күберәк биреү, ғорур булыу - алып булғандан әҙерәк алыу.

**(Халиль Джебран).**

Осрашыуға ваҡытында килгәндә, эргәлә быны күргән бер кеше лә булмауы ҡалай ҡыҙғаныс!

**(Франклин Джонс).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Өс кеше таш аҡтарып йөрөгән. Береһенән: "Нимә эшләйһең?" - тип һорағандар. Ул маңлайынан тирен һөртөп: "Бил бөгәм", - тип яуап биргән.**

**Икенсеһенә шул уҡ һорауҙы биргәс, ул эшлекле ҡиәфәттә еңдәрен төрөп: "Аҡса эшләйем", - тигән.**

**Шунан өсөнсө кешегә мөрәжәғәт иткәндәр, ул башын юғарыға күтәреп ҡараған да: "Ғибәҙәтхана төҙөйөм", - тигән.**

**Юғары маҡсаты булған кешенең генә тормош мәғәнәһе була шул..."**

1 582218 911006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
29 ноябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3707
Заказ - 2382/11